ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ
# КискеӨфө
30-5 ғинуар - февраль (һыуығай - шаҡай) 2026
№4 (1199)
kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

*Күркәм ҡылыҡтар матур тәнгә ҡарағанда ла матурыраҡ һәм ниндәйҙер картина һәм таш һынға ҡарағанда нығыраҡ һаҡланыу уята. Күркәм ҡылыҡ иң күркәм сәнғәт әҫәренән дә күркәмерәк.*
*(Ралф Эмерсон).*

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Кешенең эске донъяһы - Йыһандың үҙе



8-10

Сихырлаған мине тыуған ерем...



11

Бәйеттәр ҙә тарих һөйләй



12

Кеше күңелдәрен дауалаусы



13

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

## ТУҠТАЛЫШТА ТАРТМА!

Дәүләт Думаһы икенсе һәм өсөнсө уҡыуҙа йәмәғәт транспорты туҡталыштарында вейп һәм тәмәке һатыуҙы тыйған закон ҡабул итте. Дәүләт Думаһы рәйесе Вячеслав Володин билдәләүенсә, йәмәғәт транспорты туҡталыштары - халыҡ күп йыйылған урындар. Унда вейп һәм тәмәке һатыу халыҡты, "тәү сиратта йәштәрҙе" үҙенә йәлеп итеп тора. Бынан тыш, пассив тәмәке тартыу хәүефе арта. Был бигерәк тә балалар, йөклө ҡатын-ҡыҙҙар һәм хроник сирлеләр өсөн зыянлы. "Ҡабул ителгән закон менән йәмәғәт транспорты туҡталыштарында тәмәке йәки никотинлы продукция, шул иҫәптән вейптар, кальяндар һатыу тыйыла", - тип белдерҙе Вячеслав Володин һәм бындай ҡарарҙың граждандарҙың һаулығын яҡлауға йүнәлтелгәнен билдәләне.

## АҠСАЛАТА АЛ!

Башҡортостанда күп балалы ғаиләләр һәм инвалид бала тәрбиәләгән граждандар 2026 йылда ер участкалары өсөн аҡсалата компенсация алырға мөмкин. Тейешле ҡарарға былтыр 12 декабрҙә республика Премьер-министры Андрей Назаров ҡул ҡуйған. Ҡарарҙа билдәләнеүенсә, 2026 йылда 2025 йылдың 31 декабренә тиклем иҫәпкә торған граждандар бер тапҡыр бирелә торған аҡсалата түләү алырға хоҡуҡлы. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, өс һәм унан күберәк бәлиғ булмаған бала, инвалид бала тәрбиәләгән ғаиләләр бер тапҡыр һәм бушлай шәхси төҙөлөш өсөн ер участкаһы бирелә йәки аҡсалата компенсация түләнә. Бының өсөн граждандарға муниципалитет хакимиәтенә ғариза менән мөрәжәғәт итергә кәрәк. Өфөлә йәшәгән ғаиләләр шулай уҡ Башҡортостандың Ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре министрлығына ғариза яҙырға мөмкин.

## ПЕНСИЯ АРТТЫ

2026 йылдың 1 ғинуарынан страховка пенсияһы 7,6 процентҡа индексацияланды, был ағымдағы йыл йомғаҡтары буйынса көтөлгән инфляциянан юғарыраҡ. Хәрби пенсиялар ҙа үҙгәрә: аҡсалата тәьминәт коэффициенты 93,59 процентҡа тиклем арттырыла, октябрҙә лә артыуы көтөлә. Шулай уҡ 1 февралдән бала тыуғанда бер тапҡыр бирелә торған пособие арта - 28 773 һум. Баланы йәш ярымға тиклем тәрбиәләгән өсөн айлыҡ пособие - кәмендә 10 790 һум, ә страховкаланған шәхестәр өсөн иң күбе 83 мең һум була. 17 йәшкә тиклемге балалары булған ғаиләләргә айлыҡ түләүҙәр йәшәү минимумы нигеҙендә иҫәпләнә, 2026 йылда ул 18 939 һумға еткерелә.

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

**Ошо көндәрҙә Рәсәйҙә Студенттар көнө билдәләнде. Ә ниндәй ул бөгөнгө студенттың торомошо? Ни менән көн уткәрә улар? Байрам уңайынан юғары уҡыу йорттарында уҡып йөрөгән йәштәргә ошондай һорауҙар менән мөрәжәғәт иттек.**

***Айгүзәл Муллағолова, Өфө фән һәм технологиялар университеты магистранты:*** Студент саҡ - иң күңелле саҡ, тип бушҡа әйтмәйҙәр. Белем дә үҙләштерәһең, күңел дә асаһың, төрлө яҡтан үҫешәһең дә. Бөгөнгө көндә студенттар өсөн, ғөмүмән, бар ишектәр асыҡ. Улар уҡып ҡына ултырмайҙар, төрлө конкурстарҙа ҡатнашалар, КВН, бейеү һәм башҡа түңәрәк-секцияларҙа шөғөлләнәләр. Мин үҙем, магистрант булараҡ, күберәк фәнни эҙләнеүҙәр менән булам, шул уҡ ваҡытта эшләп тә йөрөйөм. Эш һәм уҡыуҙан тыш, спорт менән шөғөлләнәм, һаулыҡты нығытам, бейеүгә йөрөйөм. Минең өсөн уҡыу йортонда белем үҙләштереү әллә ни ҡыйын эш түгел ине. Бакалавриатта үҙләштергән һөнәрем үҙемә оҡшай, әммә әлеге мәлдә эшләп йөрөгән эш урыным һөнәрем менән бәйле түгел. Минеңсә, бөгөн, ғөмүмән, алған һөнәрҙәре буйынса эшләмәгән студенттар һаны арта бара, аҡсаяғы күберәк ҡыҙыҡһындыра йәштәрҙе. Бәлки, киләсәктә университетта алған һөнәр буйынса ла эшләрмен, тип уйлайым.

Студентар өсөн төрлө стипендиялар ҙа ҡаралған: матди яҡтан ярҙам күрһәтеү, социаль стипендия, яҡшы уҡыусы һәм әүҙем студенттар өсөн ПГАС, йәғни юғары дәүләт стипендияһы һәм төрлө исемле стипендиялар. Мин ике йыл рәттән М. Зәйнуллин исемендәге, М. Кәрим исемендәге стипендиялар алғайным. Быйыл Рәсәй Хөкүмәте стипендияһына лайыҡ булдым. Ҡыҫҡаһы, тырышып уҡыһаң, стипендия иҫәбенә генә лә бынамын итеп йәшәп була.

АФАРИН!

## МӘРГӘНДӘР БӘЙГЕ ТОТТО



**Ошо көндәрҙә Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатында йәйәнән уҡ атыу буйынса "Беренсе гимназия кубогы" республика турниры үтте.**

Бәйгелә 110 уҡсы ҡатнашты һәм, йәштәренә ҡарап, төрлө дистанцияларҙа көс һынашты. Көндәрҙең һыуыҡ тороуына ҡарамай, балалар Ауырғазы, Ишембай, Әбйәлил, Белорет, Ҡырмыҫҡалы, Ғафури, Бөрйән, Бишбүләк, Иглин, Өфө райондарынан һәм Өфө, Белорет ҡалаларынан килгәйне. "Ярыш күтәренке рухта үтте, йәш спортсылар юғары һөҙөмтәләр күрһәтте. Был йәш уҡсыларҙың оҫталығы тураһында һөйләй. Тейешле шарттар булдырған өсөн гимназия-интернат директоры Илнур Рифат улы Салиховҡа, һәр эштә ярҙамлашҡан коллегаларыма, мәктәп хеҙмәткәрҙәренә рәхмәт белдерәбеҙ", - тине бәйгене ойоштороусы Рәйес Низаметдинов.

Үҙ йәштәре араһында Лиза Давидзон (Иглин районы), Марсель Ҡалсин (Ғафури), Мәҙинә Сәмсетдинова (Белорет), Самир Латыпов (Өфө), Розалина Ҡаһарманова (Бөрйән), Ислам Ғәлиәкбәров (Белорет) еңеү яуланы. Ә Р. Ғарипов исемендәге БРГИ уҡыусыһы Самир Латипов абсолют еңеүсе исеменә лайыҡ булды.

"Беренсе гимназия кубогы" быйыл икенсе тапҡыр үтте һәм ул артабан йәйәнән уҡ атыу буйынса йыл да ойошторолған иң күләмле балалар һәм үҫмерҙәр турниры булып танылыр, тигән өмөт бар.

12+

@KISKEUFA
Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!
смартфон камераһын төбә

ҠЫҪҠАСА

# БУРЫСТАР БИЛДӘЛӘНӘ

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров 30 ғинуарҙа Башҡортостан Дәүләт Йыйылышына Мөрәжәғәтнамә менән сығыш яһай.** "Был депутаттар корпусы өсөн мөһим ваҡиға булып тора, - тип билдәргә республика Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев. - Мөрәжәғәтнамәлә республика Башлығы киләһе йылға үсеш йүнәлештәрен, мөһим бурыстарҙы билдәләй һәм бөтә кимәлдәге власть органдары алдында торған төп саҡырыуҙарға яуап бирә. Парламенттың 2026 йылда закондар сығарыу эшмәкәрлеге Мөрәжәғәтнамәгә нигеҙләнеп тормошҡа ашырыла". Хәбәр ителеүенсә, Радий Хәбиров үҙенең сираттағы Мөрәжәғәтнамәһендә Башҡортостандың төп үсеш йүнәлештәрен һәм артабанғы эштең өҫтөнлөктәрен билдәләй. "Серҙе асам, Мөрәжәғәтнамәлә тормошобоҙҙоң бөтә өлкәләренә әүҙем үтеп инә барған яһалма интеллект һәм нейроселтәр менән эшләү тураһында ла һүҙ бара", - тине республика етәксеһе.

✓ **Сит ил агенттары Башҡортостанда референдумда ҡатнашыусы була алмай, тип хәбәр иттеләр республика Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың матбуғат хеҙмәтенән.** "Башҡортостан Республикаһы референдумы тураһында" законға үҙгәрештәр индереү планлаштырыла. Тейешле закон проекты республика Ҡоролтайының киләһе ултырышында аҙаҡҡы уҡыуҙа ҡарала. Закон проектында сит ил агенттарына һәм экстремистик йәки террористик ойошма эшмәкәрлегенә ҡағылышы булған кешеләргә референдумда ҡатнашыусы булыу тыйыла. Күҙәтеүселәр референдум барышында бойондороҡһоҙ һәм объектив контролде тәьмин итергә тейеш. "Сит ил йоғонтоһона дусар булған йәки законһыҙ эшмәкәрлеккә ҡағылышлы кешеләр процедураны дискредитациялай йәки уның һөҙөмтәләрен боҙоп күрһәтергә мөмкин. Референдум - төп мәсьәләләр буйынса граждандарҙың ихтыярын туранан-тура белдереү ҡоралы", - тип аңлатма бирҙе Башҡортостан парламенты спикеры Константин Толкачев.

✓ **Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың пленар ултырышында депутаттар республикала бала хоҡуҡтары буйынса вәкил Ольга Панчихинаның 2025 йылда балалар хоҡуҡтарын яҡлау тураһында докладын тыңланы.** Ольга Панчихина һүҙҙәренсә, быйыл республикала Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы менән берлектә Тотороҡло ғаилә клубтары асыла. "Калаларҙа һәм райондарҙа эшләп килгән "Ғаилә" үҙәктәрендә бөтәһе 20 ошондай клуб асыла, улар көрсөк кисергән ғаиләләргә ярҙам итеү үҙәктәре булырға тейеш", - тип һөйләне Ольга Панчихина. Бынан тыш, "Балалар тауышын ишетәбеҙ" программаһы сиктәрендә онлайн рәүештә балаларҙың фекерен белешеү, ҡарарҙар ҡабул иткәндә уларҙың да фекерен иҫәпкә алыу планлаштырыла. МХО-ла ҡатнашыусыларҙың ғаиләләренә, етем балаларға юридик ярҙам күрһәтеүгә айырыуса иғтибар бүленә. Шулай уҡ ғаиләләргә һәм балаларға ярҙам итеү өсөн коммерцияға ҡарамаған ойошмаларҙы йәлеп итеү буйынса эште дауам итеү күҙаллана.

РӘСМИ СЫҒАНАҠ

# ЭЛИТАЛЫ ЯҢЫ ТӨР ҒӘСКӘР

**Владимир Путин Рәсәйҙә автономлы һәм пилотһыҙ системаларҙы үҫтереү буйынса кәңәшмә үткәрҙе, унын барышында министрҙар менән автономлы системаларҙы төрлө тармаҡтарҙа ҡулланыу сценарийҙарын тикшерҙе һәм бурыстар ҡуйҙы. "Автономлы системаларҙы эшләү, етештереү һәм киң ҡулланыу өлкәһендә донъя лидерҙары исәбенә инеү өсөн беҙҙә ғилми һәм сәнәғәт потенциалы бар", - тине Президент.**

Сер түгел, пилотһыҙ системалар бөгөн ҡоралды конфликттарҙа мөһим роль уйнай. МХО биләмәһендә, мәҫәлән, ҡуйылған хәрби бурыстарҙың 80 проценты дрондар ярҙамында үтәлә. Ошоно иҫәпкә алып, Рәсәй армияһында Юғары баш командующий Владимир Путин һәм оборона министры Андрей Белоусов ҡарары менән махсус подразделениелар булдырылған. Улар ғәскәрҙәрҙең яңы элиталы төрө һанала.

Элек дрон операторҙары башҡа хәрби һөнәрҙәр буйынса иҫәпкә алынһа, хәҙер улар айырым исемлеккә индерелгән һәм юғары статусҡа эйә. Автомат менән ҡоралланған алғы һыҙыҡтағы һалдаттарҙан айырмалы рәүештә, улар джойстик менән оҫта идара итеүсе яугир буласаҡ. Шуға күрә пилотһыҙ системалар операторҙарына башҡаларҙан айырылып торған махсус шарттар булдырыла.

Башҡортостанда ла пилотһыҙ системалар ғәскәренә йыйыу бара. БПЛА подразделениеларында хеҙмәт итеү тураһында тулы мәғлүмәтте башбат.рф сайтында һәм 122 телефоны буйынса алырға мөмкин. Әйткәндәй, пилотһыҙ авиация системалары подразделениеларында хеҙмәт итеү өсөн контракт төҙөгән юғары уҡыу йорттары студенттарына академик отпуск алыу хоҡуғы бирелә. Хеҙмәт ваҡыты тамамланғас, улар түләүле бүлектән бюджетҡа күсергә мөмкин. Был хаҡта республиканың һайлап алыу пункты начальнигы Сергей Родинко хәбәр итте. Билдәле булыуынса, контракт кәмендә бер йылға төҙөлә. Һуынан хәрби хеҙмәткәр килешеүҙе оҙайтырға мөмкин. Тәғәйенләнгән ваҡытта алған һөнәре үҙгәрешһеҙ ҡала - яугирҙы үҙенең ризалығынан тыш икенсе вазифаға күсереү тыйыла. Улар фронт һыҙығынан алыҫта хеҙмәт итә. БПЛА-ны һөҙөмтәле файҙаланған өсөн 50 мендән 500 мең һумға тиклем аҡсалата түләү ҡаралған. 18-45 йәшлек ир-егеттәр контракт төҙәй ала.

# БЕРЛЕКТӘ ЭШЛӘЙҺЕ ЭШТӘР



**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Дәүләт Думаһы рәйесе урынбаҫары, "Ғәҙел Рәсәй" партияһы рәйесенең беренсе урынбаҫары, Рәсәй Президентының сит илдәрҙәге ватандаштар ойошмалары менән үҙ-ара эш итеү буйынса махсус вәкиле, Рәсәйҙең Өҫтәл теннисы федерацияһы президенты Александр Бабаков менән осрашты.**

Башҡортостандың Рәсәй парламенты менән үҙ-ара эш итеүен киңәйтеү, республикала "Ғәҙел Рәсәй" партияһының эшмәкәрлеге, шулай уҡ төбәктең социаль-иҡтисади үсеше һәм спортта берлектәге проекттарҙы бойомға ашырыу фекер алышыуҙың төп темалары булды. Осрашыуҙа Радий Хәбиров Башҡортостанда бөтә кимәлдәге партия вәкилдәре менән конструктив мөнәсәбәттәрҙең яйға һалыныуын билдәләне. "Ғәҙел Рәсәй" беҙҙең өсөн партнёрҙарса сәйәси көс булып тора. Эске һәм тышҡы сәйәсәттең төп йүнәлештәре буйынса беҙ үҙ-ара аңлашып, бергәләп республика һәм ил мәнфәғәте өсөн эшләйбеҙ", - тип белдерҙе ул.

Шулай уҡ МХО-ла ҡатнашыусыларға һәм уларҙың ғаилә ағзаларына ярҙам күрһәтеү тураһында ла һүҙ булды. Александр Бабаков Башҡортостан етәкселегенең эшен һәм Радий Хәбировтың төп мәсьәләләрҙе хәл итеүгә индергән шәхси өлөшөн юғары баһаланы.

# КЕСЕ ВАТАНДАН БАШЛАНА

**Башҡортостанда 29-30 ғинуарҙа III "Кесе Ватан - Рәсәй көсө" бөтә Рәсәй муниципаль форумының "Муниципаль үсеш: яңы үсеш драйверҙары" тип аталған төбәк көнө сараһы үтә.**



Форумда 500-ҙән ашыу ҡатнашыусы - ил төбәктәренең урындағы үҙидара вәкилдәре - биш маршрутта Башҡортостандың иң яҡшы муниципаль тәжрибәләре менән танышты. "Инновацион муниципалитет" маршруты барышында форум делегаттары - Өфө хакимиәтенең ситуацион үҙәгендә, Студенттар кампусында һәм Республикаға идара итеү үҙәгендә; "Инициативалы муниципалитет" маршрутындағылар - Шишмә районы биләмәһендә; "Креатив муниципалитет" маршруты - Бөрөлә; "Сәнәғәт муниципалитеты" маршруты - Благовещен предприятиеларында; "Прогрессив муниципалитет" маршрутындағылар Стәрлетамаҡ ҡалаһында булды.

"Торатау" конгресс-холында форумды асып, Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров иңдәренә ҡатмарлы бурыстар яткан муниципалитет башлыҡтарына үҙенең ихтирам һәм рәхмәт һүҙҙәрен еткерҙе. "Һеҙ - үҙегеҙҙең, беҙ - үҙебеҙҙең Махсус хәрби операцияла ҡатнашҡан яҡташтарыбыҙға һәм, дөйөм алғанда, унда булғандарҙың барыһына ла ярҙам итәбеҙ. Республикабыҙҙа хәрби хәрәкәттәр барған территорияла күп тапҡырҙар булмаған бер генә муниципалитет башлығы ла, беҙҙә иһә улар - 63, юҡ. Сөнки улар быны үҙҙәренең бурысы тип һанай. Улар унда гуманитар ярҙам алып бара, бергәләп бөтәһе 171 гуманитар конвой ойоштороҡ, ошо ваҡыт эсендә генә 3000 автомобиль ебәргәнбеҙ. Һеҙ йөрәк тә, күңел дә талап ителгән бик ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итәһегеҙ", - тип билдәләне ул.

Рәсәй Президентының эске сәйәсәт буйынса идарылығы начальнигы урынбаҫары Евгений Грачев һөйләүенсә, III Бөтә Рәсәй "Кесе ватан - Рәсәй көсө" муниципаль форумының Төбәк көнө Башҡортостанда осраҡлы ғына уҙғарылмай: "Өфөләгә Төбәк көндәре - ғәйәт ҙур эксперт майҙансығы. Беҙҙең менән бөгөн федераль министрлыҡтарҙан һәм ведомстволарҙан коллегалар, сенаторҙар, Дәүләт Думаһы депутаттары эшләй. Радий Фәрит улы, һеҙгә һәм бөтә командағыҙға ҙур рәхмәт белдерәм. Республикала барлыҡ муниципалитеттар үҙләштерерлек лайыҡлы база булдырылған. Был креатив индустрияларҙы үҫтереүгә лә, муниципаль милек менән идара итеүгә лә ҡағыла", - тип ул республикабыҙҙа муниципаль власть кимәлenә юғары баһа бирҙе.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың пленар ултырышында депутаттар тәүге уҡыуҙа республикала граждандарҙың мөрәжәғәттәре тураһында законға үҙгәрештәр индереү тураһында закон проектын ҡабул итте. Парламентарийҙар хәрби хәбәрселәргә республиканың дәүләт органдарына, муниципаль органдарына һәм вәкәләтле ойошмаларына сиратһыҙ инеү хоҡуғын бирергә теләй. Белеүегеҙсә, 2025 йылда Башҡортостан Рәсәйҙә беренсе булып хәрби журналистар тураһында закон ҡабул итте. Документ хәрби журналист, хәрби журналистика хеҙмәткәре, хәрби журналистика ветераны төшөнсәһен билдәләй.

✓2025 йыл йомғаҡтары буйынса республиканың шифахана-курорт комплексы йәнә илдә иң яҡшыларҙың береһе булды, тиелә тармаҡ мониторинғы мәғлүмәттәрендә. Башҡортостан шифаханалары, 200 мең самаһы ял итеүсене ҡабул итеп, Рәсәйҙә тәүге бишәү иҫәбенә инде. Был иһә - Волга буйы федераль округында беренсе урын. Башҡортостанға туристар ағымы кәмеһә лә, республика шифаханаларының килеме 8 миллиард һумға тиклем артҡан.

✓Башҡортостан властары ҡала яны тимер юл транспорты үҫтерергә ниәтләй. Башҡортостан Хөкүмәте ултырышында белдереүҙәренсә, ҡыҫҡа ваҡыт эсендә Өфө - Һамар, Өфө - Туймазы - Яр Саллы, Өфө - Магнитогорск - Сибай маршруттарын ойоштороу, шулай уҡ Өфө - Стәрлетамаҡ һәм Өфө - Ырымбур маршруттарында хәрәкәт йышлығын арттырыу мәсьәләһе ҡарала. Бынан тыш, йәмәғәт транспортының хәрәкәттәге составын яңыртыу сиктәрендә 2026 йылда 1,338 миллиард һум күләмендә 83 автобус һатып алыуға бюджет ассигнованиеһы ҡаралған.

✓Халыҡ-ара ауыр атлетика федерацияһы Рәсәйҙең 23 йәшкә тиклемгә ауыр атлеттарына халыҡ-ара ярыштарҙа ил флағы һәм гимны менән ҡатнашырға рөхсәт бирҙе. "Уҙған йыл йомғаҡтары буйынса яҡшы һөҙөмтәләргә өлгәштек: 67 халыҡ-ара федерация Рәсәй атлеттарына рөхсәт бирә. 2025 йылда донъя һәм Европа чемпионаттарында 112 миҙал яуланыҡ. Быйыл олимпия спорт төрҙәре буйынса 60 донъя һәм Европа чемпионаттары планлаштырыла", - тип билдәләне спорт министры Михаил Дегтярев. Италияла Олимпия уйындарында ил исеменән 10 спортсы сығыш яһай, тип белдерҙе ул.

✓Башҡортостанда Бөтә Рәсәй саңғы ярышы ойошторола. 44-се "Рәсәй саңғы юлы" ярышы 14 февралдә үткәрелә. Быйыл спорт байрамының төп майҙансығы - Салауат ҡалаһы, тип хәбәр иттеләр республиканың Спорт министрлығынан. Белеүегеҙсә, былтыр Нефтекамала йәш спортсылар ҙа, совет спорты ветерандары ла стартҡа сыҡты. Бөтәһе 2800-ҙән ашыу саңғысы ҡатнашты.

***✓ Башҡорт теле яһалма интеллектың оло тел моделдәренә ингән, нейроселтәрҙәр башҡорт телен яҡшы аңлай, машина тәржемәһе бар, телмәр синтезлау һәм телмәр таныу мөмкинлеге, тәүге нейропроекттар булдырылған.***



ӨФӨ - ХӘРӘКӘТТӘ



# ЯҠТЫ КИЛӘСӘККӘ НИГЕҘ

**Республика Башлығы Радий Хәбиров республикаға ҡайтҡас та Өфө тирәһендәге ауылдарҙы мәктәптәр һәм балалар баҡсалары менән тәьмин итеү маҡсатын ҡуйҙы.**

Республика өсөн Өфө районының Шмидтов ауылында 640 урынлыҡ яңы белем биреү үҙәге һәм "Башҡортостан сәскәләре" биҫтәһендә 180 урынлыҡ балалар баҡсаһы асылыуы шатлыҡлы ваҡиға булды. Шулай уҡ Затон-Көнсығыш һәм Кузнецов Затоны биҫтәләрендә мәктәптәрҙе төҙөү тамамланыу алдында, ошо көндәрҙә унда дәрестәр башланасаҡ.

Былтыр Өфөлә шәп проект - 360 урынлыҡ үҙенсәлекле математика мәктәп-интернаты төҙөү башланды. Төҙөлөшкә 3 миллиард һумға яҡын аҡса бүленгән, ә уны асыу 2027 йылға планлаштырылған. Шулай уҡ Өфөнөң Нуғай ауылында 260 урынлыҡ балалар баҡсаһы төҙөлә башланы.

# ӨЙҘӘ ОСРАШАЛАР

**Республикабыҙҙағы йәки унан ситтәге юғары уҡыу йорттарында уҡып йөрөгән йәштәрҙе #Өйҙә студенттар фестиваленә саҡыралар.**

Башҡортостандың Йәштәр сәйәсәте министрлығы әүҙем аралашыу, тәжрибә уртаҡлашыу һәм танышыуҙар вәғәҙәләй. 30 ғинуарҙа теләгән һәр кемде баш ҡаланың Көрәш һарайында көтөп ҡалалар. Фестивалдә ҡатнашыусыларҙы артистар, йырсылар һәм диджейҙарҙың сығыштары көтә. Саранын хедлайнерҙары - Рәсәй йырсыһы, йырҙар авторы Фогель. Шулай уҡ сәхнәлә BABY Ti псевдонимы менән билдәле Арыҫлан Тимеров, DJ VITA SAMURAЙ һәм башҡалар сығыш яһай.

# ҮҘӘКТӘ БАР БЕР ЙОРТ...

**Башҡортостан Башлығы Бәҙәр Йосопова исемендәге Актерҙар йортон ремонтлау буйынса йөкләмәләр бирҙе. Финанслау сығанағы - "Өфө" халыҡ-ара аэропорты.**

Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә Радий Хәбиров вице-премьер Рөстәм Ғәзизовҡа 2026 йылда 1970 йылда төҙөлгән бинаны ремонтлауҙы проектлау менән шөғөлләнергә ҡушты. "Бина Өфөнөң үҙәгендә урынлашҡан. Мин асыҡ конкурс үткәрергә тәҡдим итер инем. Бурыс шундай: иғтибарҙы йәлеп итеп торған матур бина төҙөргә. Эске яҡтан ремонт ҡына кәрәк, мине тәү сиратта фасадтар ҡыҙыҡһындыра. Яҡында ғына Совет майҙаны. Эстә 2 ресторан, 2 зал, китапхана бар. Кешеләр килһен өсөн тырышып эшләгеҙ", - тине республика етәксеһе һәм бинаның эсендә асыҡ музей йәки галерея эшләргә кәрәк тигән тәҡдим дә индерҙе.

- Был тарихи ваҡиға - һеҙ 55 йыл эсендә Актерҙар йортона килгән тәүге республика етәксеһе. Театралдар өсөн был оло әһәмиәткә эйә, - тип билдәләне Башҡортостан Театр эшмәкәрҙәре союзының яңы рәйесе, Башҡортостандың халыҡ артисы Алмас Әмиров.

# ЦИРКЫБЫҘ ЯҢЫРАСАҠ!

**Өфө циркын реконструкциялау эштәре 2026 йылда башлана. Был хаҡта республика Хөкүмәте ултырышында Премьер-министр Андрей Назаров белдерҙе.**

Өфө дәүләт циркын реконструкциялау 2026 йылдың иң көтөлгән проекты булып тора. Ремонт өс йылға иҫәпләнгән. Беренсе йылда быныӊ өсөн 869,4 миллион һум бүлеү планлаштырыла, тип асыҡлыҡ индерҙе республика Хөкүмәтенең беренсе вице-премьеры Урал Килсенбаев.

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Өфө циркы 2017 йылда уҡ ябылды, бина авария хәлендә тип танылды. Республика үҙ иҫәбенә реконструкция проектын әҙерләне һәм Рәсәй Хөкүмәтенән бинаны үҙенә тапшырыуҙы һораны. Башҡортостан Башлығы Владимир Путинға ярҙам итеүен һорап мөрәжәғәт итте. Шулай уҡ 2025 йылдың ноябрендә Радий Хәбировтың илдең мәҙәниәт министры Ольга Любимова менән осрашыуында циркты төҙөкләндереү мәсьәләләре тикшерелде. Хәбәр ителеүенсә, Баш дәүләт экспертизаһы Өфө циркын реконструкциялау проектын хупланы.

# ТОЛОПТА КИЛ!

**Баш ҡалабыҙҙа ысын йылы байрам - беренсе "Толоп Фест" байрамы ойоштоорола.**

Өфө мэрияһында белдереүҙәренсә, "Толоп Фест" - ҡышҡы кейемгә баҫым яһап, Башҡортостан ҡышы, уның бай традициялары һәм үҙенсәлекле мәҙәниәте донъяһына сумыу. Быуаттар буйына ата-бабаларыбыҙ сатлама һыуыҡтарҙа толоп, бийма кейеп, йылы шәлдәргә уранып йөрөгән. Сарала ҡатнашыусыларҙы бай программа көтә, унда һәр кем күңеленә хуш килгән уйын табырға мөмкин: быйма кейеп йүгереү, футбол уйнау, уҡтан атыу, быйма ырғытыу һәм башҡалар. "Йылы" сара "Нефтехимиктар" мәҙәниәт һәм ял паркында 31 ғинуарҙа сәғәт 11-ҙә башлана. Өфөләргә фестивалгә толопта, быймала, йылы шарф урап килергә кәңәш бирәләр. 0+

КӨН ТЕМАҺЫ

# БАШҠОРТ ТЕЛЕБЕҘ...

## яһалма интеллект дәүерендә




**Донъяла цифрлы технологиялар үҫеше киҫкен боролош яһаны. 2026 йыл башына интернетта эҙләү системалары SEO (Search Engine Optimization) ысулынан яһалма интеллект (AIO, AI Optimization) һәм генератив моделдәр (GEO, Generative Engine Optimization) нигеҙендәге яңы процедураларға күсте. Алдағы йылдарҙа телдәрҙең цифрлы нигеҙе яһалма интеллекттың ҙур тел моделе (LLM, Large Language Model) менән бәйле буласаҡ. Сөнки ул мәғлүмәт һәм ғилем биреүҙең төп нигеҙенә, кешеләрҙең көндәлек аралашыу мөхитенә, мәғариф һәм мәҙәниәт ҡоралына әүерелә бара. Ә яһалма интеллект моделдәренә инмәгән телдәрҙең киләсәге хәүефле.**

Шуға күрә башҡорт телен яҡлау сәйәсәтен "интернет селтәрендә контент булдырыуҙың" ябай аҙымынан юғары кимәлгә, цифрлы экосистемаһын үҫтереүгә йүнәлтергә кәрәк. Был ирекле мәғлүмәт корпустарын, аудио- һәм видеоконтент, программа интерфейстарын һәм, иң мөһиме, кешеләр менән ЯИ-ассистенттар араһындағы диалогтарҙы үҙ эсенә ала. Әгәр башҡорт телендәге мәғлүмәт ресурстары, порталдар һәм сайттар нейроселтәрҙәрҙең эҙләү ысулына яраҡлаштырылмаһа, ә кешеләр яһалма интеллект менән әүҙем аралашмаһа, башҡорт теле Яндекс, Google, OpenAI һәм башҡа глобаль системалар "күҙенә" бөтөнләй эләкмәүе лә ихтимал. Әммә был хәүеф компанияларҙың "яман ниәтенә" түгел, ә башлыса үҙебеҙҙең әүҙемлеккә бәйле.

Әлеге ваҡытта цифрлы башҡорт теле ике "юл сатында". Бер яҡтан, башҡорт теле яһалма интеллектың оло тел моделдәренә ингән, нейроселтәрҙәр башҡорт телен яҡшы аңлай, машина тәржемәһе бар, телмәр синтезлау һәм телмәр таныу мөмкинлеге, тәүге нейропроекттар булдырылған. Икенсеһе, башҡорт телендә мәғлүмәт күләме һәм һорауға яуап биреү сифаты "бай" телдәрҙән күпкә ҡалыша, был айырмалыҡ бик тиҙ арта бара. Төп мәсьәлә моделдәрҙе өйрәтеү өсөн кәрәк булған башҡорт телендәге махсус корпустарҙың етешмәүенә, ә кешеләрҙең цифрлы сервистарҙы туған телдә һүлпән ҡулланыуына барып терәлә.

Шул уҡ ваҡытта цифрлы башҡорт телен тағы ла юғарыраҡ, "бай" телдәр кимәленә еткереү өсөн кәрәк булған өс мөмкинлек бар.

Беренсеһе, технологик яҡтан Рәсәйҙең һәм донъяның алдынғы ЯИ (яһалма интеллект) компаниялары менән үҙ-ара хеҙмәттәшлек каналы булдырылған, тел моделдәренә яңы мәғлүмәт сығанаҡтарын өҫтәү көйләнгән.

Икенсеһе, социаль яҡтан кешеләрҙең, шул иҫәптән йәштәрҙең, туған телдең "заманса йөҙөн" күреү теләге, телһөйәрҙәрҙең башҡорт телен цифрлаштырыу проекттарында ҡатнашырға әҙерлеге күҙәтелә.

Өсөнсөһө, сәйәси яҡтан Башҡортостанда туған телдәрҙе һаҡлауға һәм үҫтереүгә иғтибар ителә, Рәсәй Федерацияһы кимәлендәге маҡсатлы милли проекттарға индерелә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Булған хәүефтәр башҡорт телен цифралаштырыу эшмәкәрлеген өҫтөнлөклө йүнәлештәргә туплауҙы талап итә һәм быныӊ өсөн мөһим булған ыңғай мөмкинлектәр бар. Барлыҡ көстө, ресурстарҙы яһалма интеллекттың төп "аҙығын" - башҡорт телендәге мәғлүмәттәрҙе етештереүгә, яһалма интеллектты башҡорт телен өйрәтеүгә кешеләрҙе күпләп йәлеп итергә кәрәк. Эшмәкәрлек һөҙөмтәһе саралар һаны менән түгел, ә ирекле ҡулланыуға тапшырылған мәғлүмәт күләме һәм нейроселтәрҙәрҙең башҡорт телендәге телмәр сифаты менән үлсәнергә тейеш. Башҡорттар, туған телебеҙҙең киләсәге үҙебеҙҙең ҡулда! Бөгөнгә көндә һәр кем уны һаҡлауға һәм үҫтереүгә тос өлөш индерә ала. Заман технологиялары беҙҙе көтә.**

**Рөстәм НУРЫЕВ.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓2025 йылда Башҡортостан предприятиелары "Агросәнәғәт комплексында кадрҙар" төбәк проектын ғәмәлгә ашырыу барышында 43 миллион һумдан ашыу дәүләт ярҙамы алған. "Проект нигеҙендә 354 студент производство практикаһы үтте, ә 277 белгес уҡыу килешеүе буйынса белем алды. Быйыл предприятиеларға ярҙам итеү һәм агросәнәғәт комплексы өсөн кадрҙар әҙерләүҙең һөҙөмтәле системаһын булдырыу буйынса эш дауам итә", - тип билдәләне Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары - ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов.

✓Иглин районының Кальтовка ауыл советының миһырбанлы халҡы Белгород өлкәһе сигендәге яугирҙарға гуманитар ярҙам йыйған. Был хаҡта муниципалитет хакимиәтенә һылтанма менән Республикаға идара итеү үҙәгендә һөйләнеләр. Шулай уҡ ирекмәндәр Белгородтың тыныс халҡы өсөн аҙыҡ-түлек ебәргән. Гуманитар ярҙам урындағы эшҡыуарҙар ҡатнашлығында әҙерләнгән. Акцияны "Берҙәм Рәсәй" партияһы ойошторған.

✓"Өфө" халыҡ-ара аэропортының генераль директоры Александр Андреев Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә быйыл йәй осоштар географияһын киңәйтеү пландары хаҡында һөйләне. Уның һүҙҙәренсә, йәйгеһен Аҡтауға (Ҡаҙағстан) яңы рейс асырға әҙерләнәләр. Уның һүҙҙәренсә, йәйге миҙгелдә эске һәм тышҡы йүнәлештәр буйынса көн һайын 60-тан ашыу рейс планлаштырыла. Шулай уҡ Ҡытай, Шри-Ланка һәм Вьетнам кеүек популяр маршруттар буйынса осоштарҙы дауам итергә ҡарар ителде.

✓"Башҡортостан" мотоуҡсылар полкы матди тәьминәт ротаһының автомобиль взводы ефрейторы Илдус Ниғмәтуллин Рәсәй Оборона министрлығының юғары наградаһы - II дәрәжә "Хәрби батырлыҡ өсөн" миҙалы менән бүләкләнде. Башҡортостандан МХО яугиры Илдус Ниғмәтуллин 2023 йылдың көҙөнән хәрби бурыстарҙы үтәй. Яугир алғы һыҙыҡҡа кәрәк-яраҡтар ташый, хеҙмәттәштәре уның хаҡында хәрби һәм сәйәси әҙерлек отличнигы тип әйтә.

✓Башҡортостанда йәшәүселәрҙе килемгә һалым түләргә саҡырҙылар. Декабргә тиклем рәсәйҙәр мөлкәт һалымын түләргә тейеш ине, хәҙер килемгә һалым түләргә ваҡыт етте. Декларацияны 30 апрелдән дә һуңға ҡалмайынса тапшырырға кәрәк. Федераль һалым хеҙмәтенең республика буйынса идаралығынан хәбәр итеүҙәренсә, был иһә - күсемһеҙ милекте һатыуҙан, мөлкәтте бүләк итеп алыуҙан, сит ил сығанаҡтарынан, отоштан алынған килем.

✓2026 йылдың февралендә Австралияла Penrith Open һәм Australian Open ярыштары ойоштоорола, унда бар донъянан ишкәкселаломсылар йыйыла. Токиола Олимпия уйындарында ҡатнашҡан Өфө слаломсыһы Алһыу Минәзева Австралиялағы был халыҡ-ара ярыштарҙа ла сығыш яһарға әҙерләнә. Бынан алдараҡ Алһыу Минәзева Австралияла үткән донъя чемпионатында көмөш миҙал яулағайны.

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

***Ошо көндәрҙә Рәсәйҙә Студенттар көнө билдәләнде. Ә ниндәй ул бөгөнгө студенттың тормошо? Ни менән көн үткәрә улар? Байрам уңайынан юғары уҡыу йорттарында уҡып йөрөгән йәштәргә ошондай һорауҙар менән мөрәжәғәт иттек.***

***Ғайсар Мөхәмәтйәнов, Мәскәү дәүләт университеты студенты:*** М. Кәрим исемендәге 158-се Башҡорт гимназияһын тамамланым. Әлеге ваҡытта Мәскәү дәүләт университетында программист һөнәрен үҙләштерәм, 2-се курстамын.

Илдең баш ҡалаһында студент тормошо бик ҡыҙыҡлы, әммә шул уҡ ваҡытта ауыр ҙа. Уҡытыусылар студенттарҙан бик күпте талап итә, тик беҙ ҙә планканы юғары тотабыҙ. Әлбиттә, беҙҙең өсөн иң өҫтөнө - ул уҡыу, шуға күрә, йырҙарҙа йырланғанса, иртәнсәккәй тороп китәбеҙ дәрестәргә. Үҙем теләп килгән йүнәлеш булғас, уҡыуы оҡшай. Университеттан һуң инде мин күбеһенсә спортҡа баҫым яһайым, тәндең сәләмәт булыуы бик мөһим, тип иҫәпләйем. Әгәр буш ваҡытым ҡалһа, уны күбеһенсә китаптар уҡыуға йә дуҫтар менән осрашыуға бағышлайым. Мәскәүҙә Башҡортостан студенттары ассоциацияһы бар, улар менән бергә беҙ бик күп саралар: башҡорт йыйындары, йәштәр өсөн дискотекалар үткәрәбеҙ. Мәҫәлән, Өфөлә йәйге йыйылы көндәрҙә үткәрелә торған "Самауырлы ритайым" бик популяр булһа, Мәскәүҙә шуға оҡшаш "Сәй-party" тигән яҡташтар өсөн йыйылышып, иркенләп башҡортса аралашып, башҡорт көйҙәренә рәхәтләнеп бейеп, танышып ҡайта торған бик шәп сара бар. Баш ҡалала башҡорт йәштәре үҙ-ара күпкә әүҙемерәк аралаша тип тә әйтер инем, сөнки тыуған яҡтарҙы бик һағынған саҡта һәр яҡташты үҙ туғаныңдай күреп шатланаһың. Һәм тап Ватаныңдан ситкә киткәндә һинең ни кимәлдә патриот икәнең беленә лә инде, минеңсә.

***Нәркәс Ишмырҙина, М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты:*** Мин университеттың башҡорт филологияһы факультетында, "Башҡорт теле һәм әҙәбиәт, мәктәпкәсә логопедия" йүнәлешендә өсөнсө курста уҡып йөрөйөм. Беҙҙең университетта уҡыуы ауыр, тигән фекер йыш ишетелә. Минеңсә, һәр дәрескә әҙерләнеп йөрөһәң, үҙең ынтылып торһаң, уҡыуы бер ни ҙә түгел. Барыһы ла үҙеңдең тырышлылығыңдан һәм теләгеңдән генә тора. Уҡыу күп көс талап итһә лә, үҙем теләп килгән урын булғас, минә оҡшай. Киләсәктә белем алған һөнәрем буйынса эшләрмен микән тип уйлағаным бар. Уҡытыусы булырымды ныҡлы беләм, ә бына логопедия эшенә, бик ҡыҙыҡлы һөнәр булһа ла, әлеге мәлдә практика әҙерәк булғанға микән, ҡыйыулығым етмәҫ кеүек. Аллаһ бирһә, киләһе курстарҙа көстө мәҡәләләр яҙыуға, йәғни ғилми эшкә күберәк бирергә тип уйлайым.

Стипендия тураһында әйткәндә, эйе, бюджет иҫәбендә әүҙем, яҡшы уҡығандар юғары стипендияға дәғүә итә ала, ғаилә килеме түбән осраҡтарҙа матди ярҙам юллау мөмкинлеге лә бар. Унан башҡа күп студенттар хеҙер уҡыған саҡта уҡ эш башлай. Мин үҙем дә, беренсе һәм икенсе курста төнгө сменала эшләп, көндөҙ уҡырға китә инем. Улай дәрестәр менән эште бер тигеҙ алып барыуы ауыр шул, уҡыу өҫтөнөрәк әлеге ваҡытта, шуға күрә эште ҡалдырып торорға тура килде.

**Айһылыу ДАУЫТОВА яҙып алды.**

БЫЛ АЙҘА...

# "НИНДӘЙ ТЕЛӘКТӘРЕ БАР - ҺОРАҺЫНДАР..."

**Ҡыштың - һуңғы, йылдың иң ҡыҫҡа айы февраль (шаҡай) быйыл 28 көндән тора. Тарихтан мәғлүм булыуынса, был ай атамаһы боронғо Рим империяһында үткәрелә торған "Февруа" байрамы хөрмәтенә нарыҡланған һәм "таҙарыныу" тигәнде аңлата, тип яҙа тарихи сығанаҡтар. Башҡа халыҡтарҙа ла февраль яңырыу, киләсәк хаҡында уйланыу, яҙ килеүгә әҙерлек һәм уңдырышлыҡ нигеҙенең символы булараҡ ҡабул ителә.**



Мосолман календары буйынса быйыл февраль шәғбән айының икенсе яртыһы тамамланып, изге ураҙа - рамаҙан (**19**) айы башланыуына тап килә һәм шуныһы менән дә бик ихтирамлы, мөһим мәғәнәгә эйә булып тора. Шәғбән айының уртаһы Ислам традицияһы буйынса Бәрәкәт кисендә (февралдең 2-һенән 3-өнә ҡарай төн) мосолмандар, Аллаһ Тәғәләнән ярлыҡау һорап, шәғбәндең 15-нә ҡаршы көндө ураҙа тотоп, кисен ғибәҙәт менән үткәрә. Шуға күрә лә Бәрәкәт кисе "Гонаһтарҙың ярлыҡаныуы", йәғни "Таҙарыныу кисе" тип тә йөрөтөлә. "Бәрәкәт кисендә Аллаһ Тәғәлә бөни Кәләр ҡабиләһе һарыҡтарындағы йөндәр һанынса халыҡты йәһәннәмдән ҡотҡарып ҡалыр,"- тигән Бәйғәмбәр ғәләйһис-сәләм. "Шул кистә йәки төндә Аллаһ Тәғәлә донъяға рәхмәт күҙе менән ҡарар һәм: "Гонаһтарын ярлыҡауымды һораусылар юҡмы? Булһа, ғәфү итәм. Ризыҡ һораусылар юҡмы? Һораусылар булһа, ризыҡ бирәм. Ҡайғы-хәсрәттәрҙән ыҙа сиккәндәр йәки ауырып киткәндәр юҡмы? Күнелдәренә һәм тәндәренә шифа бирәм. Ниндәй генә теләктәре булһа ла, һораһындар - теләктәрен үтәрмен",- тиер һәм Уның был мөрәжәғәте кояш сыҡҡансы дауам итер", тиелә изге сығанаҡтарҙа.

Әйтергә лә түгел, ифрат та гонаһлы заманда йәшәйбеҙ шул.... Эре-эре түрәләр ҙә, уларҙан түбәндәрәк ултырыусы урындарҙағы чиновниктар ҙа - кемуҙарҙан ҡазна аҡсаһын урлай, муйындан коррупция һәм ришүәтселек һаҙлығына батҡандар. Көндәлек интернет яңылыҡтарын ҡарарға ла ҡурҡып торола бөгөн: кем кемде үлтергән; ҡайҙа кем балаһы атаһының мылтығын, йә булмаһа, бысаҡ, сүкмар тотоп, мәктәбенә үс алырға килгән; бер көндә күпме иҫерек водитель тотолған; юлдарҙа күпме кеше автоһәләкәт ҡорбаны булған... Осо-ҡырыйһыҙ, көн дә ҡабатланып торған был ғибрәттәрҙең бөтәһендә лә кеше факторы төп сәбәпсе булып сығыш яһай.

Мосолмандарҙың ай календары буйынса башҡа айҙарҙан айырылып торғаны өсөн рамаҙан айы ураҙа тотоу өсөн һайлап алына. Быйыңын сәбәбе - кешелекте хәҡикәт юлы менән алып барыусы, үҙенең бойороуҙары, тыйыуҙары, изгелекле хөкөмдәре менән бәндәләрҙе аҙашып йөрөүҙән ҡурсалап, хаҡ юлға төшөргән Изге Китап - Ҡөрьән индерелә башлау менән аңлатыла. Тап ошо ике изге ай - шәғбән менән рамаҙан осрашҡан февраль айына быйыл айырыуса әһәмиәт биреләр һәм уның мөмкинлектәрен файҙаланып ҡалырға ҡушыла. Быйың өсөн, әлбиттә, ошо мөһим мәлдәрҙә намаҙға баҫыу, ураҙа тотоу фарыз. Ураҙа тотоуҙың гонаһтарҙан һаҡланыу, рух ныҡлығы, күңел паклығы һәм сәләмәтлек өсөн файҙаһын белдереп, бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт ғәләйһис-сәләм ошо хәҙисте әйткән: "Ли күлли шәйьин зәкәтүн үә зәкәтүл-жәсәдис-сийәм". Мәғәнәһе: "Һәр нәмәнең паклаусыһы (таҙартыусыһы) булған кеүек, тән һәм йәндең дә паклаусыһы бар: ул - ураҙа".

Синоптиктарҙың быйылғы февраль айындағы һауа торошон фаразлауҙарына килгәндә, улар ҡыштың һуңғы айы, айырыуса икенсе ун көнлөгө, шаҡайҙың үҙенсәлегенә ярашлы, ҡарлы, һепертмә буранлы буласағына ишаралай. Уртаса һауа температураһы көндөҙ -8; -9, төндә -11; -13 градус, ай урталарында, ҡыҫҡа ваҡытлы йылы осорҙа терегөмөш бағанаһының -3; -5 градусҡа тиклем күтәрелеүе мөмкин, ти синоптиктар.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Иглин районынан апалы-һеңлеле Бәлхийәровалар Ҡаҙағстанда үткән "JAU-JUREK - мың бала" традицион уҡтан атыу буйынса асыҡ турнирҙа уңышлы сығыш яһап, дүрт миҙал яуланы һәм иң мәргән уҡсы тип танылды. Динара Бәлхийәрова "Жамба" дисциплинаһында - беренсе, ә "Азия Ордаһы" дисциплинаһында икенсе урынды алды. Уның һеңлеһе Самира Бәлхийәрова "Ҡалҡан" дисциплинаһында - беренсе, "Пута" дисциплинаһында өсөнсө булды. Турнирҙа Ауырғазы районынан Батырхан Ғайсин да Рәсәй намыҫын лайыҡлы яҡланы.

✓Башҡортостанға пилотһыҙ авиация системаларын үҫтереүгә 1,3 миллиард һум бүленә. Аҡсаны һынауҙар һәм компетенциялар ғилми-производство үҙәген йыһазландырыуға йүнәлтеү ҡаралған. Шулай уҡ пилотһыҙ авиация системаларын һынау һәм етештереү өсөн юғары аныҡлыҡтағы ҡорамалдар һатып алыу планлаштырыла. Был ватан пилотһыҙ аппараттарын эшләүҙе һәм сертификациялауҙы тиҙләтергә мөмкинлек бирәсәк. Был хаҡта республиканың Сәнәғәт, энергетика һәм инновациялар министрлығынан хәбәр итәләр.

✓Социаль селтәрҙә Белорет районының Тирлән ауылында бер аҙна эсәр һыуҙың булмауы тураһында мәғлүмәттәр таралды. Урындағы хакимиәттә Тирлән ауыл советы башлығы Ирина Нагорноваға һәм "Водоканал" предприятиеһы инженерҙарына һылтанма менән был мәғлүмәтте кире ҡаҡтылар. Әлеге ваҡытта хакимиәткә халыҡтан һыу тәьминәтенән өҙөү хаҡында мөрәжәғәттәр килмәгән, һыу селтәрендә аварияллы хәлдәр теркәлмәгән. Ауыл халҡы һорауҙар менән 8(347)76-3-71, 76-3-72, 76-3-73 телефондарына шылтыратырға мөмкин.

✓Рәсәйҙә мөһим тарихи дата - Ленинградты фашист блокадаһынан тулыһынса азат итеү көнө билдәләнде. 1944 йылдың 27 ғинуарында Ленинград блокадаһы өҙөлә. 82 йылдан һуң тотош илдә, шул иҫәптән Башҡортостанда иҫтәлекле саралар ойошторола. Башҡортостандың Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, бөгөн республикала "блокадалы Ленинградта йәшәүсе" билдәһенә лайыҡ булған 51 кеше йәшәй, Өфөлә иһә - 30 кеше.

✓Әбйәлил районында Mercedes автомобиле юлға килеп сыҡҡан ике ат менән бәрелешкән. "Таң менән Һамар һәм Озерное ауылдары араһындағы юлда фажиғә теркәлгән. Бәхеткә күрә, машиналағы йәш егеттәр имгәнмәгән", - тип яҙған район хакимиәте башлығы Айрат Әминев социаль селтәрҙәге сәхифәһендә. Аттарҙа чиптар һәм яҡтылыҡты ҡайтарғыстар булмаған. Йылҡыларҙы ваҡытлыса аҫрау пунктына япҡандар. Полиция көтөүҙең хужаһын эҙләй.

*✓ Украина биләмәһендә көнбайыш илдәренең теләһә ниндәй хәрби объекттары Рәсәй тарафынан РФ Ҡораллы Көстәре өсөн законлы сәп булараҡ ҡараласаҡ, тип тә өҫтәне Полищук.*



Геофизиктар белдереүенсә, быйыл ғинуарҙың икенсе яртыһында күҙәтелгән ҡеүәтле магнит дауылдары кеүек үк тетрәнеүҙәр февралдә ҡабатланмаһа ла, ҡайһы бер белгестәр фаразлауынса, айҙың 4-5-тәрендә, артабан 13-16-лары һәм, ниһайәт, 25-27-ләре шулай ҙа 4 индексҡа тиклем ярайһы көслө тирбәлеүҙәр булып алыу ихтималлығы һаҡлана. Һуңғы ваҡыт Ҡояш тәбиғәтендә сәйер үҙгәрештәр күҙәтелә: былтыр ноябрҙә һәм декабрь баштарында уның өҫтөндә бер нисә тапҡыр юғары класлы ҡабыныу, йәғни ҡеүәтле утлы шартлау хасил булып, унан бүленеп сыҡҡан плазма - зарядланған энергия өлөшсәләре - Ергә тәьҫир итә һәм уның магнит фоны менән бәрелешеүҙән магнит "бураны" һәм ҡайһы саҡ унан да ҡеүәтлерәге - магнит штормы барлыҡҡа килә. Иң тәүҙә уның эҙемтәһе спутник техникаһы, радиобәйләнеш һәм навигация системаларына, хатта йыһанда эшләүсе космонавтарға ла тәьҫир итеүе мөмкин. Магнит буранын насар кисереүсе кешеләр һаулығына бының тура-нан-тура зыяны булмаһа ла (Ер атмосфераһы беҙҙе нурланыуҙан ышанысლы һаҡлай), магнит тәьҫире индексы көслө булған осраҡтарҙа был йөрәк сирле һәм мейе ҡан әйләнеше боҙолған кешеләр өсөн етди хәүеф тыуҙыра: инфаркт, инсульт ихтималлығы көсәйә. Еңелерәк осраҡтарҙы иһә ҡан баҫымы күтәрелеү, баш әйләнеү һәм ауыртыу, тән һыныуы, быуындар һыҙлауы кеүек билдәләр ярайһы ғына үҙен һиҙҙерә. Бындай хәлгә бирешмәҫ өсөн табип тәғәйенләгән дарыуҙарҙы ҡабул итергә, күберәк һыу эсергә, көн һәм йоҡо режимын үтәргә, саф һауала йөрөргә, хәрәкәтләнергә кәңәш итә белгестәр.

Был айҙағы иҫтәлекле көндәр һәм һөнәри байрамдар: Рәсәйҙең хәрби дан көнө. Сталинград һуғышында совет ғәскәрҙәренең немец-фашист ғәскәрен тар-мар иткән көн **(2 февраль, 1943 йыл)**, Бәрәкәт кисе **(2-нән 3-өнә ҡарай)**, Аэрофлот, Рәсәй фәне, Йәш антифашист геройҙар көндәре **(8)**, Рәсәйҙә Ҡышҡы спорт төрҙәре, Граждандар авиацияһы, Халыҡ-ара теш табибы көндәре **(9)**, Бөтөн донъя ауырыуҙар, Фән өлкәһендә халыҡ-ара ҡатын-ҡыҙҙар көндәре **(11)**, Бөтөн донъя радио **(13)**, Бөтөн донъя компьютерсы, Ғашиҡтар, Халыҡ-ара китап бүләк итеү **(14)** көндәре, Ватан сиктәренән ситтә хеҙмәт бурыстарын башҡарған рәсәйҙәрҙе иҫкә алыу. Интернационалист яугирҙар көнө **(15)**, РФ Хәрби-Диңгеҙ Флоты разведкаһы көнө **(16)**, Рәсәй студент отрядтары, Бөтөн донъя сәләмләү **(17)** көндәре. Рамаҙан айы башлана. Ураҙаның тәүге көнө **(19)**, Бөтөн донъя социаль ғәҙеллек **(20)**, Халыҡ-ара туған тел **(21)** көндәре, Рәсәйҙең хәрби дан көнө. Ватанды һаҡлаусылар **(23)** көнө, Башҡортостан Республикаһының Дәүләт флагы көнө **(25)**, Рәсәй Федерацияһының Махсус операциялар көстәре көнө **(27)**.

**Шаҡайҙа тыуғандар:**

**1** - журналист, 1981-2011 йылдарҙа"Башҡортостан" гәзитенең үҙ хәбәрсеһе, Башҡортостандың атҡаҙанған матбуғат һәм киң мәғлүмәт хеҙмәткәре **Юнир Кинйәбаевҡа - 75 йәш** (1951).

**3** - музыка белгесе, педагог-методист, сәнғәт фәндәре докторы, филология фәндәре кандидаты, З.Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институты профессоры, Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре **Гөлназ Ғәлинаға - 65 йәш** (1961).

**6** - педагог, башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәреслеге авторы, Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы, Салауат Юлаев ордены кавалеры **Фәниә Сынбулатоваға - 70 йәш** (1956).

**7** - ғалим-фольклорсы, филология фәндәре докторы, Башҡортостандың атҡаҙанған фән эшмәкәре, Салауат Юлаев ордены кавалеры, С.Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты **Фәнүзә Нәҙершинаға - 90 йәш** (1936).

**12** - йырсы, "Сармат" фольклор төркөмөнөң художество етәксеһе, Башҡортостандың халыҡ артисы **Радик Вәлмөхәмәтовҡа - 60 йәш** (1966).

**20** - комбриг, 1920-1922 йылдарҙа БАССР-ҙың хәрби эштәр буйынса халыҡ комиссары, БашЦИК рәйесе, өс тапҡыр Хәрби Ҡыҙыл Байраҡ ордены кавалеры **Муса Мортазиндың тыуыуына - 135 йыл** (1891-1937).

**24** - дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре, 1920-1921 йылдарҙа РКП(б)-ның Башҡортостан өлкә комитеты секретары, БАССР Халыҡ комиссарҙары советы рәйесе **Әхмәт Бейешовтың тыуыуына - 130 йыл** (1896-1937).

**25** - "Башҡортостан" телерадиокомпанияһының баш режиссеры, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре **Гөлнур Моталлаповаға - 60 йәш** (1966).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ*

# АҪРАУСЫҺЫ ҠУЛЫН ТЕШЛӘНЕ

**Үткән аҙнала Берләшкән Ғәрәп Әмираттары баш ҡалаһында (Абу-Даби) был төбәк климаты өсөн һирәк осрай торған тәбиғәт күренеше - ҡойма ямғыр яуып үтте, тип хәбәр итте 25 ғинуарҙа "Новости" Яңылыҡтар агентлығы хәбәрсеһе.**

Күрәһең, ул ошо күренеште яҡшығы юрамаҡсы итте: мәғлүм булыуынса, 23-24 ғинуарҙа Абу-Даби ҡалаһында Украина конфликтын көйләү буйынса Рәсәй, Украина һәм АҠШ вәкилдәре ҡатнашлығында ике раунд һөйләшеүҙәр тамамланды. Һөйләшеүҙәр барышында Рәсәй яғы РФ һәм АҠШ президенттарының Анкориджлағы осрашыуында өлгәшелгән нигеҙ аңлашыуҙар позицияһында тороуын тағы бер тапҡыр иҫкәртте. Өс яҡлы һөйләшеүҙәрҙең киләһе этабын 1 февралдә Абу-Даби ҡалаһында үткәреү планлаштырыла. Был осрашыуҙарҙың төп темаһы - Украина Ҡораллы көстәрен (ВСУ) Донбастан сығарыу һәм Украинаны аяҡҡа баҫтырыу планы. Мәскәү өсөн, билдәле, электән белдерелеп килеүенсә, территория мәсьәләһе лә, Донбастағы рус телле халыҡты яҡлау ҙа, шул уҡ ваҡытта Мәскәү патриархатының Украина православия сиркәүе хоҡуҡтары мәсьәләһен күтәреү ҙә берҙәй үк мөһим. Ләкин шул уҡ ваҡытта АҠШ менән Украина араһында Донбаста нейтраль илдәр ғәскәрҙәрен урынлаштырыу буйынса булып үткән фекер алышыуҙар хаҡында мәғлүм булды.

The New York Times гәзите яҙып сығыуынса, "Америка менән украин вәкилдәре Донецк өлкәһе өлөшөндә тынислыҡ илселәре рәүешендә нейтраль көстәр урынлаштырыу йәки ҡоралһыҙланыу зонаһы булдырыу хаҡында һөйләште..." Шуға ҡарамаҫтан, Украина Донбасс территорияһынан үҙ ғәскәрҙәрен сығарырға теләмәүен ҡәтғи рәүештә белдерә килә. Икенсенән, бынан алдараҡ РФ Сит ил эштәре министрлығының БДБ илдәре департаменты директоры Алексей Полищук һиҙҙәренсә, Украина территорияһында Көнбайыш илдәренең хәрби подразделениеларын индереү мөмкин булмаған ниәт. Украина биләмәһендә көнбайыш илдәренең теләһә ниндәй хәрби объекттары Рәсәй тарафынан РФ Ҡораллы Көстәре өсөн законлы сәп булараҡ ҡараласаҡ, тип тә өҫтәне Полищук.

Украинаны финанслау өсөн Евросоюз Рәсәй активтарын файҙаланмаҫҡа ҡарар итте, һәр хәлдә - әлегә. Был мәсьәлә 18 февраль ЕС саммитында 16 сәғәт буйына тикшерелде, тип яҙа Financial Times гәзите. Ниһайәт, төнгө сәғәт өстәрҙә дөйөм ҡарарға килделәр һәм Киевҡа 90 млрд евро бүлергә хәл итеүле. Чехия, Венгрия һәм Словакия был ҡарарҙы ҡабул итеүҙән баш тартты. Кредит рәүешендә биреләсәк был аҡсаны Киев Рәсәйҙән компенсация алғас та кире ҡайтарырға тейеш, тип нығытылды Еврокомиссияла. Шунан һуң 22 ғинуарҙа Давоста булып үткән Бөтөн донъя иҡтисад форумында АҠШ президенты Дональд Трамптың үҙ сығышында Европаны "дөрөҫ юлдан бармауҙа" ғәйепләп тәнҡитләне. Зеленский ҙа, форум сиктәрендә Трамп менән осрашҡандан һуң, ҡыйыуланып китеп, үҙенә ярҙам ҡулы һуҙып торған Евросоюзды "борҡотоп" ташланы һәм Европа лидерҙарын үҙ хәүефһеҙлектәрен тәьмин итә алмауҙа, яңы килеп тыуған шарттарҙа ни ҡыларға ла белмәүҙә һәм, Ҡушма Штаттарҙың хәрби ҡеүәтенә һалышып, үҙаллылығын юғалтыуҙа ғәйепләп сығыш яһаны. "Әгәр Украина НАТО-ла булһамы, ул Гренландия янындағы Рәсәй карабдәре менән ни эшләргә белер ине", - тип тә өҫтәне хатта. Ә Зеленскийҙың былай ҡыланыуының сере бары шунда ине: ул АҠШ-тан өҫтәмә ярҙамға бик өмөт итте, ләкин Трамп Украинаның хәүефһеҙлеге буйынса ла, уның иҡтисадын тергеҙеү маҡсатында ла бер ниндәй ҙә вәғәҙә бирмәне.

РФ Хәүефһеҙлек советы рәйесе урынбаҫары Дмитрий Медведев Зеленскийҙың Давостағы был сығышын "Евросоюздың битенә төкөрөү" булды, тип яҙһа, Рәсәй Президентының матбуғат секретары Дмитрий Песков әйтмешләй, Киев режимының үҙ "аҫраусыһы ҡулын тешләү" булып килеп сыҡты. Европа илдәрендә иһә Зеленский сығышына ҡарата төрлөсә фекер әйтелде, әммә күпселек конфликттан ялҡыуҙары һәм үҙҙәренең шәхси проблемалары менән йәшәргә теләүҙәре хаҡында белдерҙе.

Әйткәндәй, Австрияла Украинаға ярҙам итеүгә ҡаршы протест янъялы килеп тыуҙы ла инде. Был илдең Азатлыҡ партияһы Генеральный секретары Михаэль Шнедлиц Киевҡа финанс ярҙамы күрһәтергә ризалыҡ биргән өсөн Австрия Сит ил эштәре министрының отставкаға китеүен талап итте. Уның әйтеүенсә, коррупция системаһына әйләнгән Киев режимы күптән инде аҡылһыҙ хөкүмәт арҡаһында миллиардлаған аҡсаны йотоп тороусы төпһеҙ бушлыҡҡа бәрәбәр. Австрия канцлеры Кристиан Штокер ҙа Украинаның Евросоюзға инеү ихтималлығына ҡырҡа ҡаршы булыуын белдерҙе.

Рәсәй ғәскәрҙәре Махсус хәрби операция барышында иң яңы ҡорал системаларын һәм технологик проекттарҙы уңышлы файҙалана. Мәҫәлән, тауыш тиҙлегенән юғары һәм күҙгә күренмәҫ Х-22 суперракеталар Киевты дер һелкенергә мәжбүр итте, тип яҙа хәрби эксперт Юрий Кнутов. Идара ителеүсе "Краснополь" снарядды ла юғары һөҙөмтә һәм сәпте юҡ итеүҙә теүәл аныҡлығы менән айырылып тора. Заманса технологиялар менән яңыртылған, 37 км-ға тиклем алыҫ араны алыусы совет осорондағы М-46 "сталин" пушкалары ла уңышлы файҙаланыла.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфө боксеры Артур Собханғолов Верджил Виторға (Филлипин) ҡаршы IBF Asia билбауы өсөн көрәшә. Алыш 13 февралдә Мәскәүҙә була, тип хәбәр итте спортсының тренеры Мария Карабанова. Артур Собханғолов профессиональ рингта 2021 йылдан сығыш яһай, 10 еңеү яулай. Верджил Витор иҫәбендә иһә 24 еңеү, 4 тапҡыр еңелгән. Уның WBO Oriental һәм WBC Asian Silver титулдары бар. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, сентябрҙә Өфөлә "IBA.PRO 12" турнирының төп алышында Артур Собханғолов Тигран Узлянды еңде һәм еңел ауырлыҡта WBA Continental билбауын яуланы.

✓Өфөнөң Шәфиев һәм Зорге урамдары киҫелешендә трамвай юлы ремонтланды. Башҡортостандың Республика менән идара итеү үҙәгенән белдереүҙәренсә, етешһеҙлек тураһында урындағы халыҡ социаль селтәрҙәр аша мөрәжәғәт иткән. Проблеманы Өфө мэрияһы һәм баш ҡала электр транспорты белгестәре контролгә ала. Ысынлап та, юл участкаһының насар хәлдә булыуы асыҡлана һәм ул тиҙ арала ремонтлана.

✓Өфөлә "Башҡортостандың этно-һылыуҡайы-2026" матурлыҡ һәм талант конкурсына ғаризалар ҡабул ителә башланы. Кастингта 16 йәштән 23 йәшкә тиклемге төрлө милләт вәкилдәре ҡатнаша ала. Ҡыҙҙарға төп талаптар: тәбиғи сибәрлек һәм һөйкөмлөлөк; үҙ халҡындың традицияларын белеү; сәхнә мәҙәниәте; матур итеп фотоға төшә белеү; 170 сантиметрҙан кәм булмаған күркәм буй-һын; этикаға тап килмәгән фото/видео булмауы. Конкурсты Һылыуҡай-BashBeauty студияһы ойоштора. Ҡатнашыусылар анкеталарын һәм ғаризаларын 1 февралгә тиклем тапшырырға тейеш.

✓Өфөнөң Тышҡы реклама идаралығы мәғлүмәт стендтарын урынлаштырыу өсөн 34 урын раҫланы. Улар Коммунистик, Революцион, Комсомол, Зорге урамдарында, Затон шоссеһы һәм аэропорт юлындағы туҡталыштарын үҙ эсенә ала. Стендтар берҙәм стилдә һәм форматта буласаҡ. Шулай уҡ идаралыҡ Ырымбур трассаһындағы туҡталыштар ҡыйығына ҡуйылған мәғлүмәт щиттары рәүешендәге ике реклама объектын алды. Рекламаны урынлаштырыуҙың бындай ысулы башҡаса ҡулланылмаясаҡ.

✓2026 йылдың 2 февраленән 10-сы "Өфө ДОК-ы - Максимовка ҡасабаһы" маршруты буйынса автобустар хәрәкәте схемаһы үҙгәрә. "Башавтотранс" мәғлүмәттәре буйынса, Өфө ДОК-ына табан юлланған саҡта автобус Яңы Максимовкаға боролоп инә. Ҡала халҡына һәм ҡала ҡунаҡтарына атап үткән йүнәлештә сәфәргә сыҡҡанда ошо үҙгәрештәрҙе иҫәпкә алырға кәрәк.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

***✔ Ни бары йөҙ йыл эсендә генә халҡыбыҙ ни өсөн шулай ныҡ үҙгәреп киткән? Боронғо ата-бабаларыбыҙ хаҡ мосолман булып, динебеҙҙә ҡәтғи тыйылған был әшәке эсемлек менән үҙҙәренең тәнен һәм аҡылын ағыуламаған.***



*ХАЗИНАБЫҘҘЫҢ БЕРЕҺЕ*



# БАЛ ҠОРТО МӨҒЖИЗӘҺЕ

## Йүкә балы, сәскә балы...

Йүкә, ҡарабойҙай, ҡандала үләне, йылҡы борсағы кеүек бер төрлө үҫемлектәр сәскәһенән (монофлора), йәнә төрлө болон, туғай сәскәләренән (полифлора) йыйылған бал юғары сифатлы һанала. Умартасылыҡ белгесе Василий Власов "Башҡортостан балы" китабында яҙыуынса: "Өлгөргән стандартлы башҡорт балы 18-19 процент һыуҙан һәм 82 процентҡа тиклем шәкәрле ҡоро матдәнән тора. Унда 35 процент виноград шәкәре (глюкоза), 40 процент емеш шәкәре (фруктоза), 2 процент сахароза һәм 0,1 процент аҡһым, йәнә ферменттар, гормондар, ергемгә яҡын аминокислота, минерал, хуш еҫ һәм төҫ биргән матдәләр бар".

Йүкә балы - иң билдәле, иң сифатлы балдарҙың береһе. Ҡайны урында йыйылыуына бәйле тәме, төҫө төрләсәрәк. Ғәҙәттә, ул хуш еҫле, асыҡ һары төҫлө, йәки еңелсә йәшелһыу. Ҡуйырғаны иретелгән туң май һымаҡ йәйһә бөртөклө. Башҡорт йүкә балы аҡһыл гәрәбә кеүек һәм ҡеүәтле, татлылығы, хуш еҫелеге буйынса Рәсәйҙә иң яҡшы һанала. Умартасылыҡ белгестәренең фекеренсә, өсдүрт йүкә ағасы бер гектар ерҙәге ҡарабойҙай биргән миҡдарҙа бал бирә. Йүкә сәскә атҡан мәлдә йүкәлекле тәйәктәрҙә бер күс көнөнә ун-ун биш килограмм һут ташый. Сәскәләрҙә һут күп саҡта ул ҡояшта ысыҡ тамсылары кеүек ялтырай. "Бал ямғыры", ти былдай күренеште солоҡсолар. Башҡорт йүкә балы ләҙзәте, ҡөҙрәте менән хуш, бактериялары һәм микробтарҙы иишһенмәҫ үҙенсәлектәре менән баһалы. Айырыуса, һалҡын тейҙергәндә, үпкә ауырығанда килешкән им. Уны алҡа-ҙан-эсәк юлдары шешкәндә, бөйөр, йөрәк ауыртҡанда, йәрәхәттәрҙе, бешкән урындарҙы дауалағанда ҡулланалар.

Төрлө-төрлө баллы үҫемлектәрҙең сәскә һуттарынан йыйылған һәм һәммәһенең ҡөҙрәтен туплаған бал да ифрат та шифалы һәм ҡиммәтле. Әйтәйек, яҙғы балда май-июнь айҙарында сәскәләнгән үгәй инә үләне, бәпембә, баллыҡай, тал, ҡарағат, саған кеүек егерменән ашыу үҫемлектең һуты һәм һеркәһе бар. Йәйге балда - йүкә, миләш, ҡыҙылхан, йылан көпшәһе, еҫле балтырған, фаягөл, ҡайын еләге, болон яраны, аҡ тумырҙкабаш, гөлйемеш, ҡурай еләге, әрекмән, мәтрүшкә, ҡымыҙлыҡ, арыҫлан ҡойроғо, ҡыҙыл ҡортмәле, һары мәтрүшкә, ҡуян кәбеҫтәһе, алтын тамыр кеүек бихисап үҫемлектәрҙең ҡөҙрәте. Уларҙың күбеһе - тәбиғи дауа сеймалы, үҙҙәре дарыу үләне. Ошо үҫемлектәрҙән йыйылған ҡатнаш бал, һис шикһеҙ, мөғжизәле дауалау үҙенсәлектәренә эйә. Ул кеше тәнендә матдәләр алмашыныуын яҡшырта, биохимик процестарҙы тиҙләтә. Балда уны оҙаҡ һаҡларға шарт тыуҙырған бактерияларҙы юҡ итеү үҙенсәлегенә эйә биоген стимуляторҙар бар.

Ҡарабойҙай балы, ғәмәлдә, Башҡортостандың дала яҡтары умарталыҡтарында йыйыла. Ҡыҙғылтыраҡ ҡуйы көрән, ҡуйы һары төҫтә, хуш еҫле. Унда аҡһымдарҙан, углеводтарҙан (глюкоза, гликоген, шәкәр...), майҙарҙан тыш, кеше организмы өсөн аҙ миҡдарҙа кәрәк булған тимер, кальций, фосфор, баҡыр, цинк, бор, йод, никель, кобальт кеүек микроэлементтар, шулай уҡ B1, B2, PP витаминдары һәм рутин бар. Һәйбәт антисептик булараҡ, ҡарабойҙай балы трофик сей яраларҙы, эренле йәрәхәттәрҙе, сиҡан ҡалҡыуын һәм башҡа тире ауырыуҙарын имләүҙә шифалы.

**Сәлимйән БӘҘРЕТДИНОВ.**
**(Дауамы. Башы 1-3-сө һандарҙа).**

*АЙЫҒАЙЫҠ, ЙӘМӘҒӘТ!*

# БАЛАНЫҢ КИЛӘСӘГЕН...

## алдан фаразлау дөрөҫмө?



Бер нисә йыл элек оҙаҡ ваҡыттар ҡүрмәгән бер танышымды ҡала урамында осраттым. Өҫтөндәге керле, аламараҡ күлдәге, майланып, бысранып бөткән джинсы салбары, ҡырынмаған, таушалған йөҙө уның тормошо ал да гөл булмауы хаҡында һөйләгәндәй. Башта уны танымайыраҡ та торҙом.

- Сәләм, Айытбай, - тип килеп ҡосаҡлап алды ул, ауыҙынан "перегар" еҫен аңҡытып, - танымайһыңмы әллә?

- Эйе, мин - Айытбай. Тик һине бер аҙ ғына тоҫмөрләй бирәм дә, түлке танып етмәйем, - тип, аҫты күгәргән һул күҙенә иғтибар итәм.

- Кит, эреләнеп торған булаһың!

- Эреләнгән юҡ былай. Өлфәт тиһәм... мин белгән Өлфәт икенсерәк ине...

- Эйе, Айыт дуҫ! Мин был, Өлфәт!

Ҡасандыр хатта яҡын дуҫым булып йөрөгән Өлфәтте шулай көскә таныным. Бәлки, берәй өмә-фәләндән, эштән ҡайтып килләр, тип тә уйларға тырыштым.

- Күрешмәгәнгә нисәмә йылдар үтеп киткән, Өлфәт!.. Хәл-әхүәлдәр нисек? - тип һораша башланым, һөйләшеп ултырырға тип, яҡындағы эскәмйәгә урын күрһәттем. - Һөйләп ташла хәлдәреңде.

- Һөйләшер өсөн тәүҙә берәрҙе төшөрөп алайыҡ, - тине дуҫым, - осрашыу хөрмәтенә, - тип өҫтәне. Была һиңә - мә!..

- Мин эсмәйем бит әле, дуҫ, - тием тегегә.

- Зато, мин эсәм...

- Улай булғас, бар эсеп сыҡ, - инде дуҫымдың хәленә ныҡ ышанмаҫлыҡ бөтөнә башлаған мин яҡындағы буфетҡа күрһәтәм.

- Аҡса юҡ, егерме тәңкәләй бир әле, зинһар... Кисә тыуған көнгә барып "ашап" ташлалған...

Уның хәле тамам аңлашылды. Хәҙер элекке дуҫымын ҡайғыһы юҡ унда, әлбиттә... Егерме һум сығарып тоттороҙом да, ҡыҙыҡһынып һорап ҡуйҙым:

- Нимәгә етә һиңә ул егерме һум?

- Нимәгә еткереү - мое дело, а твое дело - отдавать... - тип урыҫсалап һалдырмаһынмы был, ауыҙына май тунғыры...

...Һуңынан тағы ла бер-ике мәртәбә осраттым мин уны. Һәр саҡ шундай ҡиәфәттә, шул уҡ кимәлдәге хәл-әхүәл һөйләшеүҙәр... Уға фәҡәт "бер һыралыҡ ҡына" кәрәк... Бала саҡта ниндәй кеше булғанлығын иҫенә төшөрөп уҡылған өгөтнәсихәттәрем уның тарафынан бөтөнләйгә ҡабул ителмәне. Барлыҡ булмышы, холоҡ-фиғеле, нерв системаһы оҙаҡ йылдар буйы алкоголь тәьҫиренән ныҡ ҡына үҙгәргәйне. Ғөмүмән, ҡасандыр мин белгән Өлфәттән бер нәмә лә ҡалмаған ине унда...

Әбала саҡта мәктәптә иң тәртипле, иң һәләтле, иң алдынғы уҡыусыларҙың береһе ине бит! Уҡытыусы апай һәм ағайҙарҙың иң өмөтлө уҡыусыһы булған Өлфәттең фотоһүрәте почет таҡтаһынан төшмәне. Уның менән бергә мәктәптә һәр төрлө уҡыу ярыштарында ҡатнашып, алдынғы урындарҙы алып йөрөй торғайныҡ. Үҙем, вазифама ярашлы, оҙаҡ йылдар ҡырҙа йөрөү сәбәпле, синыфташтарымдың күптәренең артабанғы тормошон белмәй инем. Юғары уҡыу йортон да тамамлаған, баштараҡ яҡшы ғына эше лә булған уның. Әммә, шайтан тарафынан ауыҙлыҡланып, уның ихтыярына ғына бойһоноп йәшәргә мәжбүр ул (хәйер, хәҙер инде мәжбүр ҙә түгел, сөнки уны урам араһында үлеп ҡалған, тип иштем). Ошо юлдарҙы уҡып ултырған бик күптәр ҙә үҙҙәренең бала сағын, мәктәп йылдарын, бәғзе иптәштәрен иҫләп алғандарҙыр, тип уйлайым. Билдәле сәбәптәр арҡаһында танышымды уҙ исеме менән яҙмаҫҡа мәжбүрмен...

Мин бала саҡта уҡытыусыларыбыҙ йыш ҡына "Уҡыған - уҙыр, уҡымаған - туҙыр" тигән әйтемде ҡуллана ине. Алдынғы уҡыусы булараҡ, үҙем дә шуға бик ныҡ ышана инем. Таныштарым араһындағы насар уҡыусылар тормошта ла шулай һөйрәлеп барырҙар һымаҡ тойолдо. Дәрес ваҡытында шаярып, уҡытыусыны тыңламай, һәр саҡ унан шелтә алып йөрөгән шуҡ малайҙарҙың нисек кластан-класҡа күсеп барыуҙарына ла аптырай инем (бәғзеләре, әлбиттә, күсмәй ҙә ҡалғыланы)...

Хәҙер инде урта мәктәпте тамамлағанға ла алтынсы тиҫтә китте. Синыфташтарымды барлап, уларҙың кемеһе кем булып киткәнен анализлап ҡарайым. Уларҙың бер нисәүһе баштан уҡ юғары, йә башҡа уҡыу йортонда уҡып сығып, бәғзеләре "урында эшләп", хаҡлы ялға сыҡҡан. Тик бөгөн "отличник"-тарыбыҙ тураһында һөйләргә йыйынмайым, һүҙем, башлыса, уҡыуҙа уртасараҡ барған йә "артта һөйрәлеүсе" хаҡында. Бәхеткә, ҡөҙерле яҡташтар, бына шул категория иптәштәребеҙ хаҡында ла һөйөнөп һөйләрлек урын бар! Уларҙың бер-икеһе әрме хеҙмәтенә барып ҡайтҡас, ситтән тороп юғары уҡыу йортон тамамлаған, ныҡлы ғаилә ҡорған, эштә һәүетемсә яҡшы урын биләп, йорттар һалып, балалар, ейән-ейәнсәрҙәр үҫтереп, хәҙерге көндә ифрат етеш йәшәй, тип тә әйтер инем.

Шундай синыфташтарымдың береһенә туҡталып, һәр саҡ уҡытыусыларҙың "ошо Искәндәр бер нәмәгә лә эшкинмәй..." тигән һүҙҙәрен иҫкә төшөргә тура килә ине. Класта иң шаян, "әҙәм боҙоғо" булған был малайҙың нисек унынсыны тамамлап сыҡҡанына ошоғаса ғәжәпләнәм. Ә хәҙерге көндә ул оло хөрмәткә лайыҡ, абруйлы кеше... Оло ҡыуанысҡа, нәҡ шундай уҡ икенсе класташымдың, ҡайсаҡ хатта урамда мине танып ҡалып, ҡыйбатлы автомобилен туҡтатып, күрешер өсөн килеп сығыуы күңелгә бәлҙәм булып ята. Ыҫпай ғына кейенгән был Тимерғәле Рәмил улы хаҡында ҡасандыр класттың иң беренсе "хулиганы" ине, тиһәң, һис кем ышанмаҫ...

Артабан уҡырға теләмәй, ауылда ҡалған, әммә үҙ тормошона зарланмай, һарай тултырып мал аҫраған йә Себер яҡтарына барып, "оҙон" аҡса эшләп ҡайтыусылар хаҡында ла иҫтән һөйөнәм. Урта белем менән дә "эшҡыуар" булып, хатта бәғзе "отличник"тарҙың "танауына сиртеп" йәшәй улар, тигән фекерҙәр бар. Уҡыусылар араһында булған отличниктарҙы "ҡүккә сөйгән" хәлдә лә, насарыраҡ өлгәшкәндәрҙе түбәнһетергә ашыҡмаһын ине ҡайһы бер уҡытыусы апайҙар һәм ағайҙар, тимәксемен. Эйе, ысынлап та, ҡайны бер уҡытыусыларҙың "әй, Фәләнов, һинән ул да тыумаҫ, ҡыҙ ҙа тыумаҫ..." тип фаразлауы һәр саҡ ысынбарлыҡҡа тап килмәй, йәғни мәктәп программаһын аҙыраҡ йә күберәк үҙләштереү тормош көтөүҙә "хәл иткес төп фактор" булып тора алмай.

...Башта Өлфәт синыфташымды иҫкә алып киткәйнем бит әле. Была шундай, башлыса "йәшел йылан" сәбәбе арҡаһында харап булған ҡорҙаштарҙың араһында уҡымағандары ла, уҡығандары ла бар. Үкенескә, йәшләй генә көйөнсә бик күптәре тормош арбаһынан төшөп ҡалды... Нәфсеңде тыйырға көс тапмай, шайтан хәсәтенә эйәреп киттең икән, һиңә бер ниндәй ҙә "высшее образование" ярҙам итмәй икән шул.

Вафат булған таныштарымдың күпселеге утыҙҡырҡҡа ла етмәгән көйө, эскелек арҡаһында үҙен-үҙе һәләк иткән икән. "Һуғырға" яратыусы шундай яҡташтарым өсөн бер аҙ өгөт-нәсихәттәр әйтеп китеүҙе мотлаҡ тип һанайым. Хәмерһеҙ йәшәгәндәр улай уҡ күплән ҡырылмай бит! Әйтерһең дә, беҙҙең быуынға ҙур һуғыш тура килгән!.. Яҙыусы Әхмәр Үтәбай, Рамаҙан Өмөтбаевтың тикшеренеү мәғлүмәттәренә таянып, "Киске Өфө" гәзитендә былай тип яҙғайны: "Ун туғыҙынсы быуатта (бер быуат эсендә!) хәҙерге Әбйәлил районы территорияһында бер генә суицид осрағы булған. Ул да булһа - сит яҡтарҙан килгән эскесе бер кеше... Ә хәҙер эскелек арҡаһында ғүмере ҡыйылған милләттәштәр һаны һәр районыбыҙҙа (һәр йыл һайын!) тиҫтәләр менән иҫәпләнә!"

Ни бары йөҙ йыл эсендә генә халҡыбыҙ ни өсөн шулай ныҡ үҙгәреп киткән? Үҙем ҡуйған ошо һорауға һис бер икеләнеүһеҙ үҙем үк яуап бирәм: хәҙерге замандаштарыбыҙҙан айырмалы, боронғо ата-бабаларыбыҙ хаҡ мосолман булып, Ислам дине ҡанундары буйынса ғүмер иткән, ҡартатайҙарыбыҙҙың ҡартатайҙары динебеҙҙә ҡәтғи тыйылған был әшәке эсемлек менән үҙҙәренең тәнен һәм аҡылын ағыуламаған. Донъяуи уҡыуҙы бөтөнләйгә тиерлек белмәгән, әммә динебеҙ ҡанундарын үтәп, Аллаһ Тәғәләгә тулыһынса буйһоноп йәшәгән улар. Фәҡәт шулай ғына итеп аңлатырға була быны.

Баштараҡ килтергән "Уҡыған - уҙыр..." тигән әйтем дин ғилемен өйрәнеүгә лә ҡағылышлы тип әйтер инем. Дини уҡыуһыҙ, ысынлап та, туҙыу ҡурҡынысы бар, йәмәғәт, әгәүҙ билләһи! Күп кенә гәзиттәрҙә һәр төрлө авторҙар илебеҙҙә ғәйәт киң таралған эскелек, суицид тип аталған афәттәрҙән ҡотолоуҙы араҡының хаҡын күтәреү, эсергә яратҡан кешене административ язаға тарттырыуҙа, араҡы һатыу ваҡытын сикләү, халыҡты "мәҙәни эсеү"гә өйрәтеү һымаҡыраҡ саралар ҡулланыуҙа күрә. Әммә балаларыбыҙҙы бәләкәйҙән шәриғәт ҡанундарын үтәргә өйрәтмәһәк, әле һанап кителгән саралар алабутаны өҫтән-мөҫтән генә өҙгөсләүгә оҡшаған... "Дипломыбыҙ ҡайны ҙурлыҡта ғына булмаһын, ниндәй генә төр һөнәр эйәһе булыуыбыҙға ҡарамаҫтан, ана шул иң мөһим ғилемде һәммәбеҙ өйрәнергә тейеш!

Күптән түгел Дәүләт Думаһы депутаты Солтан Хамзаевтың сәнәғәт һәм сауҙа министрлығына илдә балалар шампаны (Детское шампанское) сығырыуҙы бөтөнләйгә тыйыу хаҡында мөрәжәғәт иткәнлеге хаҡында ишеткәнһегеҙҙер, моғайын. Интернет яңылыҡтарында яҙылған ошо мәғлүмәтте мин оло шатлыҡ менән ҡабул иттем. Тейешенсә кимәлдәге чиновниктар тарафынан да был көңөштең хупланырына ышанғы килә, әлбиттә. "Шампанское" тип аталған хәмер эсемлеген балаларыбыҙ өсөн гүзәл нәмә итеп күрһәтеп, уларҙы байрамда эсеүҙе рәсмиләштереү, ысынлап та, үҫмерҙәребеҙҙә алкоголгә ҡарата "һәйбәт хистәре" тәрбиәләй һымаҡ та баһа! Депутат Хамзаев үҙе мосолман кеше булараҡ та ана шуны тыйыу яҡлылыр инде... Афарин!

Байтаҡ ҡына тормош тәжрибәһен туплаған кеше булараҡ, үҙемдең шәхси фекерҙәрем менән бүлешеүем... Ошо яҙғандарымды, моғайын, мәктәптә уҡыуға битараф булырға өндәгән мәҡәлә һымаҡ итеп ҡабул итмәҫтәр. Һәммә йәш кешенең дә лайыҡлы тормош көтөр өсөн эске ресурстары була һәм уны дөрөҫ юлға йүнәлтә белеү генә кәрәк, тимәксемен.

**Айытбай ВӘЛИЕВ.**

✓ ***Урман башҡортоноң йәйләүе дала башҡортоноҡона бөтөнләйгә оҡшамаған. Бында даланы сыбарлап ултырған аҡ йә иһә ҡара-һоро тирмәләр урынына бәләкәй, тәпәш ыҙмалар осрай.***



*ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ*

# УРМАН БАШҠОРТТАРЫНА СӘЙӘХӘТ

**XIX быуат аҙағында - XX быуат башында йәшәгән рус табибы, медицина докторы Дмитрий Петрович НИКОЛЬСКИЙ 1899 йылда Санкт-Петербургта баҫылып сыҡҡан "Башкиры. Этнографическое и санитарно-антропологическое исследование" тип исемләнгән үтә ҡыҙыҡлы китап авторы булараҡ билдәле. Унан башҡа Д.П. Никольский 1895 йылда "Землеведение" ғилми журналында "Из поездки к лесным башкирам" тигән этнографик мәҡәлә баҫтыра. Был мәҡәләлә Архангел заводы, Тирәкле, Уҫманғәле, Инйәр ауылдары һәм Көньяҡ Уралдың башҡа урындары иҫкә алына. Автор урындағы башҡорттарҙың көнкүреше һәм йәшәү рәүеше, ялан һәм урман зоналары башҡорттары араһындағы айырмалыҡтар хаҡында ла бәйән итә.**




Көньяҡ Урал грандиоз урман байлыҡтарының юҡҡа сығарылыуының күңелһеҙ картинаһын хасил итә! Яҙ һәм ҡыш айҙарында киҫеп ташланған, бер нисә ҡолас йыуанлығындағы бик ҙур ағастар ерҙә сереп ята. Башҡа бер урман баһадирҙары: шыршылар, аҡ шыршылар, ҡарағайҙар, ҡарағастар, имәндәр һ.б. киҫелә башлаған йә иһә ҡайрыһыҙ ҡалған көйө ваҡытынан алда эшлектән сығасаҡ. Ҡоро-һары, йығылып ятҡан ағастар шул тиклем күп, уларҙы утын итеп ҡулланырға булыр ине, ә былар барыһы ла юҡҡа сыға. Башҡорттар киҫер өсөн һәр ваҡыт йәш һәм яҡшыраҡ ағастарҙы һайлай, әммә уларҙы төбөнән түгел, үҙҙәренең күкрәге кимәленән киҫә: эйелеп-бөгөлөп тормағас, ныҡ арытмай. Шуның һөҙөмтәһендә бик ҙур ағас төптәре бер файҙаһыҙға юҡҡа сыға. Ағастарҙың ҡырағайҙарса юҡ ителеүен күрһәң, бындағы Уралдың тулыһынса урманһыҙ ҡалыу ваҡытына күп ҡалмағандыр, тигән уй баштан сыҡмай. Эйе, Уралдың ҡайһы бер урындарында, бигерәк тә завод биләмәләрендә, быны әле лә күреп була, сөнки бындағы урмандарҙы вәхшиҙәрсә ҡырыу башҡорттарҙан һис кәм түгел.

Урман ҡырыусы башҡорт үҙен-үҙе астан үлеүгә дусар итәсәге хаҡында уйламай, сөнки уның өсөн урман - иң мөһим йәшәү сығанағы. Әлегә бындағы башҡорт ер эшкәртеү тураһында уйлап та бирмәй. "У нас урман много", - ти Инйәр башҡорто, - нам будат, а когда кунчал, тогда куда-нибудь гулять будем (пойдём)..."

Юл ауырайғандан ауырая барҙы, һәм беҙ бик аҡрын, атлап ҡына тигәндәй барҙыҡ; йыш ҡына юлға арҡыры ятҡан бик йыуан ағас олондарын урап үтергә тура килде. Кискә табан беҙ Елмерҙәк һырты түбәләренең береһендә урынлашҡан Йөйәк йәйләүенә килеп еттек. Беҙ ошонда ҡунырға тейеш инек. Был урын бигерәк тә матур булып күренә: бар яҡтан да ылыҫлы гүзәл урман менән уратып алынған тау түбәһендә, йәшеллек һәм сәскәләр араһында башҡорттарҙың йәйге өйҙәре тәртипһеҙ рәүештә, әммә бик йәмле булып таралып ята. Уларҙың ҡайһылары йөҙ-йәшәр ҡарағайҙар араһын, икенселәре - тау битләүен, өсөнсөләре туғайҙы һайлаған. Тау аҫтынан шарлап ағып ятҡан шишмә тауышы ишетелеп тора. Тирә-яҡтағы урман тынлығын йәйләүҙәге тауыштар, кешеләрҙең ҡысҡырып һөйләшеүҙәре генә боҙа. Беҙ бында килеп еткән мәл йәйләү хужаларының эштән ҡайтҡан сағына (бесән сабыуҙан) тура килде; бала-саға, сыр-сыу килеп, ҡысҡырышып, һарыҡтарҙы, ҡолондарҙы ялан кәртәгә ҡыуып индерә; ҡатын-ҡыҙҙар ҙа балаларына ниҙер һөрәнләй. Ҡайһы бер урындарҙа усаҡтар тоҡандырылған, унда урман башҡорттарының талымһыҙ ғына киске ашы әҙерләнә.

Урман башҡортоноң йәйләүе дала башҡортоноҡона бөтөнләйгә оҡшамаған. Бында даланы сыбарлап ултырған аҡ йә иһә ҡара-һоро тирмәләр урынына бәләкәй, тәпәш ыҙмалар осрай, улар беҙҙең ҡабыҡ йәки дранка менән ябылған крәҫтиән мөгәрәптәрен, йә булмаһа ялан ыҙмаларын хәтерләтә, ишектәре бәләкәй, тәҙрәләре юҡ тиерлек. Һәр өй янында ҡойма менән уратып алынған ихата бар, унда төнгә ҡаршы малдарҙы ҡыуып индерәләр. Иҙәндәре һәм түбә таҡталары юҡ; ергә таҡта түшәлә, йә иһә кейеҙ һалына.

**Бәҙри ӘХМӘТОВ тәржемәһе.**

**(Дауамы. Башы 3-сө һанда).**

*ХӘТЕР ЯҢЫРТЫП...*

# СУҠЫНДЫРЫУ СӘЙӘСӘТЕН...

## башҡорттар ҡабул итмәгән



**Батша хөкүмәтенең колониаль сәйәсәте Рәсәйҙең рус булмаған халыҡтары араһында төрлө рәүештә үткәрелә. Ул сәйәсәттә дин мәсьәләһе ҙур урын биләмәй. Хөкүмәт теге йәки был осорҙа, алдына ҡуйылған маҡсаттан сығып, колониаль сәйәсәттең ысулдарын да, ағыштарын да үҙгәртеп тора. Батша хөкүмәтенең Башҡортостандағы бөтә феодализм осорондағы (XVI быуаттың икенсе - XIX быуаттың беренсе яртыһы) дини сәйәсәте ошоға тиклем махсус өйрәнелмәне. Революцияға тиклем йәшәгән тарихсылар тарафынан был мәсьәләнең Ырымбур-Өфө епархияһы эшмәкәрлеге, Өфөлә мосолман Диниә назаратын асыу, Иҙел (Волга) буйы һәм Башҡортостан мәжүсиҙәрен һәм мосолмандарын суҡындырыу кеүек яҡтар ғына тикшерелде. Был мәҡәләлә батша хөкүмәтенең дини мәсьәләләр буйынса сәйәсәтенең мәғәнәһен асыу, уны тормошҡа ашырыу юлдарына туҡталмаҡсымын.**

### Беренсе осор

Батша хөкүмәтенең дини мәсьәләләр буйынса сәйәсәтен дүрт осорға бүлергә була. XVI быуаттың икенсе яртыһын - XVII быуаттың 80-се йылдарын үҙ эсенә алған беренсе осорҙоң йөкмәткеһе шул: башҡорттар рус дәүләтенә үҙ ирке менән ҡушылған саҡта Иван батшаның башҡорт ырыу башлыҡтары менән килешкән шарттарын хөкүмәттең бер һүҙһеҙ үтәүе. Бында төп сәбәп булып батшаларҙың ул ваҡытта әле дәүләттә абсолют йәки сикләнмәгән власҡа эйә булмағанлығы торалыр, күрәһең. Әкренләп, самодержавие ойоша башлаһа ла, сиркәү власының батша власына ҡаршы тороуы дауам итә. Крайҙы колонизациялау башлана ғына әле, бер нисә ҡәлғә-ҡала ғына төҙөлгән саҡ. Дворяндар ҙа көсһөҙ, улар ҡалалар тирәһен генә биләй. Православие сиркәүе лә дүрт монастырь һәм 30-40 ғибәҙәтхана ғына һалып өлгөргән. Шулай уҡ крәҫтиәндәр ҙә күпләп күсенә башламаған. Быларҙың бөтәһе лә башҡорттарҙың аҫабалығын нығытырға мөмкинлек бирә. Халыҡ йыйындары, аҡһаҡалдар идараһы һаҡланып килә. Шул уҡ ваҡытта Ислам дине лә ныҡлап тамыр йәйә.

**Әнүәр ӘСФӘНДИЙӘРОВ.**

**(Дауамы бар).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



**Сергей РУДЕНКО**

# БАШҠОРТТАР

## Солоҡсолоҡ һәм умартасылыҡ, малсылыҡ һәм ҡошсолоҡ, ер эшкәртеү

XX быуат башында ағас һабанды тимер һабан ҡыҫырыҡлап сығарған. Башҡорттарҙа һабан төрлө маркалы һәм төрлө дәүмәлдә булған. Улар менән ҡуш ат, өс ат, хатта дүрт ат егеп ер һөргәндәр. Дүрт ат егергә кәрәк булғанда ярлы башҡорттар ерҙәрен бергәләп эшкәртеү маҡсатында "супряжка"лар ойоштороғандар.

Ерҙе яндырып эшкәртеү системаһы булған урындарҙа сәсеү өсөн эшкәртелгән участкалар ағас тырма менән тырматылған. Бындай тырма шыршы ағасының уртаға киҫелгән олондарынан яһалған. Улар ике тәртә араһына ике һайғау менән оҙон (50 сантиметр самаһы) ботаҡтар алға, бер яҡҡа ғына ҡарап торорлоҡ итеп тоташтырылған.

Башҡорттарҙа һирәк осраған ағас тешле тырманы миңә Башҡортостандың үҙәк һәм төньяҡ-көнбайыш төбәгендә күрергә тура килде. Бындай типтағы тырма һайғауҙарҙан тора, ә шына формаһындағы тештәре һайғауҙар киҫешкән урында тал сыбыҡтары менән нығытылып бәйләп ҡуйыла. Бындай тырма, нигеҙҙә, квадрат формаһында һәм 25 тешле була. Уның алғы өлөшөнә йыуан сыбыҡтан йәйә бәйләнә. Был яңы баҫыуҙарҙы тырматҡанда тырма ағас төпһәләренә эләкмәһен, ә уларҙы урап үтһен өсөн эшләнә.

Башҡорттарҙа иң киң таралған ағас тырма 20 йәки 25 тимер тешле була. Бындай тырма дүрт йәки биш дүрт үҙ-ара арҡыры бурса менән нығытылған бурсанан тора. Уларҙың бырау менән тишелгән тишектәренә дүрт ҡырлы, осло тимер тештәр ҡағылған. Тырманың оҙонлоғо - 1,4-2 метр, киңлеге 1-1,2 метр булған.

Атҡа егеү өсөн тырманың алғы, арҡыры нығытылған өлөшөнә тимер йәки ҡарама, имән йәки муйыл ағасынан ишелгән ҡулса ҡуйылған. Был ҡулсаға валек бәйләнгән, ә уға - тәртә йәки мисәү.

Башҡорттарҙа уңыш йыйыу ураҡ ярҙамында башҡарылған. Һолоно салғы менән сапҡандар, әммә бөтөн ерҙә лә түгел. Игенде уңыш күп булмаған йылдарҙа ғына салғы менән сапҡандар, сөнки ул бик һирәк үҫкән, сүп үләндәре менән ҡатнашҡан һәм уны урыу файҙалы булмаған. Башҡорт урағы рус урағынан бер нәмәһе менән дә айырылмаған. Салғылар ҙа шундай уҡ булған, әммә уларҙың терәгенә (пятка) өс-биш оҙон ағас тырма теше беркетелгән **(һүрәттә).** Һәр тештән сабылған иген салғы һабы аша китмәһен һәм тигеҙерәк ятһын өсөн бау тарттырылған. Рус крәҫтиәндәре менән күрше йәшәгән бай башҡорттарҙың ҡайһы берҙәрендә бесән сапҡыстар, ат тырмалары һәм урғыс машиналары күренә башлаған.



Урылған игенде көлтәгә бәйләгәндәр һәм ҡаҙғанатҡа ултыртҡандар, һуңынан уларҙы ырҙын табағындағы ҙур келәттәргә һаҡлауға һалғандар.

Башҡорттарҙың иген киптереү әүендәре булмаған йәки бик һирәк кенә "шиш"тар осрай. Ул тирә-яғы таштар менән нығытылған, балсыҡ менән һыланған һәм яндырылған түңәрәк соҡорҙан ғибәрәт. Соҡорҙоң тирә-яғы буйынса өс метр оҙонлоҡта һәм остары конус формаһына килтереп бергә бәйләнгән һайғауҙар урынлаштырылған. Соҡор эсенә ут яғылған, ә соҡор өҫтөндә торған конус формаһындағы ҡыуыш өҫтөнә көлтәләр һалынған.

**(Дауамы бар).**

✓ ***Рухлы кеше - ул һәр саҡ "мәңгелек уҡыусы". Донъяны танып белеү - ялан аша үтеү түгел, ә океанды йөҙөп сығыу, "мәңгелек уҡыусы" булыу - ғүмер буйы хәҡиҡәтте өйрәнеү икәнен ул яҡшы белә.***



# КЕШЕНЕҢ ЭСКЕ ДОНЪЯҺЫ -

**Айбулат Ураҙбахтин - гәзитебеҙҙә йәшәйеш ҡанундары темаһына бағышланған бер нисә мәҡәлә авторы. Ул Сибай ҡалаһында йәшәй. Эшҡыуар. Донъяға үҙ ҡарашы булған, үҙенсәлекле фекерләгән шәхес булараҡ, һәр ваҡыт белемен камиллаштырыу, эҙләнеү юлында. Маҡсаттар ҡуйырға һәм уларға өлгәшергә, тормошта баланс табырға өйрәткән, үҫеш, карьера йүнәлеше өҫтөнлөктәрен билдәләргә ярҙам иткән шәхси консультант - коуч та ул. Уның менән кеше булмышы, рухиәт, йәшәйеш, уңыш серҙәре тураһында әңгәмә ҡорҙоҡ.**

**Гәзитебеҙҙең әүҙем авторы булһаң да, уҡыусыларыбыҙ һине бик үк танып та бөтмәйҙер. Әңгәмә башында үҙең менән таныштырып китһәң ине...**

- Сығышым менән мин Учалы районының Уральск ҡасабаһынан. 1977 йылда ябай эшселәр ғаиләһендә тыуғанмын. Атайым Ураҙбахтин Алик Рәйес улы ғүмере буйы иретеп йәбештереүсе һөнәре буйынса эшләне. Әсәйем Мәрйәм Барый ҡыҙы бухгалтер ҙа, төҙөүсе лә, мейес яғыусы ла булды. Хәҙер улар икәүһе лә хаҡлы ялда. Зәлифә һеңлем, Айрат ҡустым бар. 1986 йылда ғаиләбеҙ менән Бүрәт республикаһына, БАМ төҙөлөшөнә тип, күсеп киттек. Ете йыл йәшәнек ситтә. 1997 йылда Башҡорт дәүләт аграр университетына ер ҡороусы (землеустроитель) һөнәре буйынса уҡырға индем. Өсөнсө курста өйләндем. Ҡатыным Юлиә Сәлих ҡыҙы менән Уральскиҙа бер мәктәптә уҡыныҡ. Параллель кластағы ҡыҙға тәүҙә күҙ генә һалып йөрөгәнмен, күрәһең... Бөгөнгө көндә дүрт бала тәрбиәләйбеҙ. Өлкән улыбыҙ Айтуған аграр университетты тамамлап, хәҙер аспирантурала уҡый. Өйләнде, ейәнсәребеҙ бар. Айсыуаҡ та шул уҡ уҡыу йортон һайланы, беренсе курста, Айғына алтынсы синыфта, ә Айдинәгә әле ике генә йәш.

Һөнәрем буйынса алты ай ғына эшләп өлгөрҙөм - Сибай ҡалаһының Ер комитеты бөтөрөлөү сәбәпле, эшһеҙ ҡалдым. Ғаилә башлығы эшһеҙ ята алмай, күп уйлап тормай, ҡала типографияһына баҫмасы өйрәнсеге булып барҙым. Дүрт йыл эшләнем, шуның өс йылында директорҙың етештереү буйынса урынбаҫары вазифаһын биләнем. Эш араһында федераль Президент программаһы сиктәрендә ойошторолған етәкселәрҙең белемен күтәреү һәм камиллаштырыу буйынса "Кризисҡа ҡаршы идарасы" курсын тамамланым. Шул мәлдән "Идара" ғәмәли фәнен ентекле өйрәнәм.

Өс йыл Сибай ҡала телевидениеһын етәкләнем. Хәҙерге ваҡытта матбуғат, полиграфия йүнәлешендәге ғаилә бизнесын алып барам. Эшҡыуарлыҡ менән егерме йыл шөғөлләнәм.

**Беҙгә тормошта бер аҙға ғына туҡтарға, уйҙарҙы тәртипкә килтерергә, күргән-белгәндәргә таянып фекер тупларға, уларҙы теркәп ҡуйырға ваҡыт етмәй. Сөнки бик ҡабалан йәшәйбеҙ. Ҡасан, ҡайһы йәштә уй-фекерҙәреңде "йүгәнләргә" форсат таптың?**

- Һөнәрем буйынса хеҙмәт юлын яңы башлап, эшһеҙ ҡалыуым тормошомда һынылыш мәле булды - йәшәйеш, уның мәғәнәһе тураһында уйлана башланым. Миңә 26 йәш ине ул саҡта. Сократ: "Донъяны танып беләм тиһәң, тәүҙә үҙеңдең кемлегеңде белергә, аңларға тырыш", - тип әйтеп ҡалдырған. Эйе, мин, тормошомдоң ауыр бер мәлендә туҡтап, уй-фекерҙәремде көйләй алдым, аңым менән йәшәргә өйрәндем. Бының өсөн яҙмышыма рәхмәтлемен. Бындай илаһи мәлде һәр кем ғүмерендә бер тапҡыр булһа ла кисерә, килеп тыуған шул мөмкинлекте ҡулдан ысҡындырмаҫҡа ғына кәрәк.

**Танышым, "тырмаға баҫа", ҡаты тормош һабаҡтары ала торғас, әсенеп, күңел иңрәүе менән: "Ғәҙеллек юҡ, тормош бәғерһеҙ, ауыр һәм шөкәтһеҙ, ҡайһыларға мал буштан килә, күптәр, бер нисә эштә бил бөгөп тә, мандый алмай, хатта һуңғыһын юғалта, был донъя мәрхәмәтле һәм яҡшы кешеләр өсөн түгел, ә яуыз һәм бәғерһеҙ әҙәмдәр өсөн", - тигәйне бер мәл. Уның ошо хәлен нисек аңлатыр инең?**

- Кеше фиғелен күҙҙән үткәреү шуны күрһәтә: әгәр ул үҙ уңышһыҙлыҡтарының, етешһеҙ тормошонон, һаулығын юғалтыуҙың сәбәптәрен ситтән эҙләй икән (эшендәге хәлдән, күршеләренән, дуҫтарынан, ғаиләһенән, туғандарынан, чиновниктарҙан, дәүләттән, хөкүмәттән), тимәк, ваҡиғаларҙың сәбәп-эҙемтәләре бәйләнеше менән ул ҡыҙыҡһынмай, изге китаптарҙы һанламай, шәхес үҫеше тураһында бәйән иткән әҙәбиәтте уҡымай. Бындай замандаштарыбыҙҙың проблемаһы ябай - улар томана һуҡыр. "Нишләп бындай хәл фәҡәт миңә ҡағыла, уңышһыҙлыҡтарымдың сәбәбе низә, ни өсөн ауырыуҙар йәбешә, һаулығым юғала?" - тигән һорауҙы үҙенә үҙе биргәнгә һәм уға яуап эҙләй башлағанға тиклем дауам итәсәк ыҙалары. Йәғни, рухи үҫеш юлына баҫмай тороп, уның тормошо үҙгәрмәйәсәк.

***Рухилыҡ һәм диндарлыҡ төшөнсәләре бар. Элегерәк уларҙы бер бөтөн итеп ҡараһалар, хәҙер айыра башланылар. Диндарлыҡ кешенең ҡайһылыр конфессияға инеүе, шуға ярашлы табыныуы, тышҡы атрибуттарын файҙаланыуы, изге китаптарын уҡыуы һәм өйрәнеүе, ғибәҙәт ҡылыуына ҡайтып ҡала. Был - уның тышҡы һынланышы. Рухилыҡ иһә кешенең эске донъяһын, уның аҡыл ҡеүәһен билдәләй, йәғни уның тормошҡа ҡарашын, ғүмере ағышына йоғонто яһаған белем кимәлен, кешелек сифаттарын күтәреүгә йүнәлтелгән алымдарҙы даими ҡулланыуын сағылдыра.*** Ундай кеше тормошобоҙға бик күп сағылыштар, кәрәкмәгән кисерештәр өҫтәгән, тәбиғи булмаған ҡалыплашыуҙан ситен (заман психологияһы уны аҫҡы аңға һалынған программа тип атай). Ә ҡалыплашыуҙың барлыҡҡа килеүе тәрбиәгә ҡайтып ҡала. Ул бала саҡтан ғаиләлә һалына, мәктәптә биреләә, киң мәғлүмәт саралары аша таратыла. Балаға тормош һабаҡтары биреү ниәте менән беҙ, ғәҙәттә, "Тик "отлично"ға ғына уҡырға бурыслыһың", "Ҡулдарың кәкре, эш белмәй", "Эшкинмәгән бала", тип ысҡындырабыҙ. Шул уҡ ваҡытта тик ыңғай, позитив программаға йүнәлтелгән өгөт-нәсихәт тә киң ҡулланыла: "Бөтә кешеләр ҙә изгелекле булырға тейеш, изге бул", "Ғәҙел бул", "Тәртипле ҡыҙ (малай) бул" һәм башҡалар. Ғәжәп, позитив программалар ҙа кеше тормошона буталсыҡлыҡ, деструктивлыҡ индерә. Программа-стереотиптарҙы кеше үҙе үҙгәртә ала. Бының өсөн уға шәхсәнлеген аңларға һәм рухи үҫеш (психологик) практикаһын башларға кәрәк.



*Рухлы кеше матди донъяға, әйберҙәргә бәйле түгел. Ул был донъяның фанилығын, йән, рух өсөн матдилыҡтың тәрбиәүи һәм үҫеш роленән башҡа бер ниндәй ҙә әһәмиәте юҡ икәнен аңлай. Тимәк, кешегә көнсөллөк һәм ҡомһоҙолоҡ хас түгел. Матдиға йәбешеп ятыу йәнебеҙҙе әйберҙәргә бәйләргә теләүгә тиң. Бының йыһан ҡануниәтенә ҡаршы килеүен аңлатыу кәрәкмәй. Беҙ теге донъяға үҙебеҙ менән бер нәмә лә алып китмәйбеҙ, барыһы ла ошонда, ерҙә, ҡала.*

**Тимәк, тормошон юлға һалыр өсөн кеше рухи үҫеш кисерергә тейеш иң элек. Ябайыраҡ итеп быны нисек гәзит уҡыусыларға еткереп булыр ине...**

- Рухлы кеше матди донъяға, әйберҙәргә бәйле түгел. Ул был донъяның фанилығын, йән, рух өсөн матдилыҡтың тәрбиәүи һәм үҫеш роленән башҡа бер ниндәй ҙә әһәмиәте юҡ икәнен аңлай. Тимәк, кешегә көнсөллөк һәм ҡомһоҙолоҡ хас түгел. Матдиға йәбешеп ятыу йәнебеҙҙе әйберҙәргә бәйләргә теләүгә тиң. Бының йыһан ҡануниәтенә ҡаршы килеүен аңлатыу кәрәкмәй. Беҙ теге донъяға үҙебеҙ менән бер нәмә лә алып китмәйбеҙ, барыһы ла ошонда, ерҙә, ҡала. Матдиға бәйләнеп ятыуҙы иҫбатлаған төшөнсә булып уның "күңел торошон көйләүе" тора. Мәҫәлән, аҡса бар икән - кешенең кәйефе күтәренке, аҡса юҡ - кеше депрессияға бирелә. Йәки күршеһе заманса яңы машина алған: "Мин кемдән кәм, нишләп минеке лә юҡ, минең унан да шәберәк машина алғым килә", - тип үрһәләнә. Әйберен юғалтҡан, эштә премияһын ҡырҡҡандар - тағы депрессия. Былар, ғөмүмән, кешенең матди донъяға йәбешеп ятыуын күрһәтә. Әгәр ул ошо халәтенән ҡотола алмай икән, уның матди йәһәттән хәле бер ваҡытта ла яҡшы яҡҡа үҙгәрмәйәсәк, гел уңышһыҙлыҡтар эҙәрләйәсәк уны.

***Рухлы кеше - ул һәр саҡ "мәңгелек уҡыусы". Донъяны танып белеү - ялан аша үтеү түгел, ә океанды йөҙөп сығыу, "мәңгелек уҡыусы" булыу - ғүмер буйы хәҡиҡәтте өйрәнеү икәнен ул яҡшы белә.*** Киреһенсә, донъялыҡтағы барлыҡ нәмәне белдем тип уйлауы, уның шәхес булараҡ артҡа тәгәрәй башлауы, деградацияға бирелеүе, тигән һүҙ. Ундай кешегә, ғәҙәттә, минминлек, эгоизм хас.

***Рухлы шәхестең юғары маҡсаты бар һәм ул уға ынтыла. Кешенең иң юғары маҡсаты матди яҡтан байыу ҙа, карьера эшләп, ҙур түрә булып китеү ҙә, хатта нәҫел ҡалдырыу ҙа түгел. Былар барыһы ла эске донъяны үҫтереү ҡоралдары ғына. Юғары маҡсат - үҙеңде табыу, рухиәт ҡанундарын өйрәнеү, белемеңде йәмғиәткә таратыу.*** "Йәшәү мәғәнәһе низә?" тигән мәңгелек һорауға яуап та фәҡәт ошонда. Уратып алған матди мөхиттең, кешеләрҙең, йәмғиәттең, хайуандар донъяһының, тәбиғәттең, ҡул менән тотоп ҡарап булмаған, ләкин күңел аша үткәреп белгән нәмәләрҙең рухты үҫтереүгә, уның өлгөрөп етешеүенә илткән юл икәнен

***Әгәр ир менән ҡатын рухи йәһәттән үсешмәй икән, 20 - 30 йылдан мөнәсәбәттәрҙә ҡыйынлыҡтар, аңлашмаусанлыҡтар башлана. Шуға 50 - 60 йәшкә еткән кешеләр араһында айырылышыуҙар арта хәҙер.***



# ЙЫҺАНДЫҢ ҮҘЕ

аңлау, рухиәт үсешебеҙҙең кинәт алға китеүен күрһәтә.

***Рухлы кеше - ҡыйыу шәхес. Ул тормошҡа уның теләһә ҡайһы сүрәтендә лә ышана, эштәрендә тәүәккәл, яуаплылыҡ тоя. Уратаһындағы, йәмғиәттәге, донъялағы булып ятҡан хәлдәрҙең барыһы ла уның эске торошон көйләүгә, тимәк, яҡшыға йүнәлтелеүен белә.*** Ҡурҡыу комплексы - емергес көскә эйә халәт. Уның нигеҙендә йәшәйешкә ышанмаусанлыҡ ята, шуға ла быға дусар кешеләр барыһын да - туғандарын, балаларын, дуҫтарын, эштәге хеҙмәттәштәрен, янындағы һәм глобаль теләһә ҡайһы эш-хәрәкәтте - контролдә тоторға ынтыла. Кешегә ғазап һәм һыҙланыуҙар килтергән, бындай мөнәсәбәттәрҙе емерергә ынтылған балалары, тыңлауһыҙ хеҙмәттәштәре, туғандары, дуҫтары ышанмаусанлыҡ комплексының һөҙөмтәһе булып торасаҡ.

Шуны өҫтәргә кәрәк: һанап үтелгәндәрҙең асылы бер генә - үҙеңде өйрәнеү. Үҙеңде өйрәнеүҙең мәғәнәһе иһә тереклектең берҙән-бер ҡануниәтенә - мөхәббәт ҡануниәтенә - буйһоноу. Шуға ла рухиәтле кешене ике һүҙ менән генә кәүҙәләндереп була: ул - мөхәббәтле һәм аҡыллы. Мөхәббәт ҡанундарына буйһоноу, уратып алған донъяны хафаланмай һәм ҡәһәрләмәй, нисек бар, шулай ҡабул итергә кәрәк, тигәнде аңлата. Аҡыл иһә тормошта рухи белемде ҡуллана алыу маһирлығын күрһәтә.

**Күптәр, бөгөнгө ярлы донъяны нисек бар, шулай ҡабул итеү - ул һәр саҡ алданыу, барыһынан ҡолаҡ ҡағыу, тигән һүҙ бит, тиәсәк...**

- Бөгөнгө заман психологтары, күп кешеләрҙе өйрәнеп, кешелек донъяһында яҙылмаған ҡанун - кире бәйләнеш ҡануны - эшләй, тигән һығымтаға килгән. Икенсе төрлө уны "бумеранг ҡануны", "тартыу ҡануны", тиҙәр. Ул беҙҙең уйҙарҙың матдиләшеүен аңлата. Кәйефтә сағылған фекерҙәр был ҡанунды эшләтеп ебәреүсе механизм булып тора. Боронғо ведтар тәғлимәтендә ул Карма ҡануны, йәки Ғәмәл ҡануны булараҡ теркәлгән. Уны бик ябай ғына сисергә мөмкин - ни сәсһәң, шуны урырһың. Шул уҡ ваҡытта уның мәғәнәһе бик тәрән. Ҡанун матди өлкәгә лә, күңелгә лә тәьҫир итә. ***Әйтәйек, кеше гел юғары кәйеф, ҡыуаныс кисерһә, ләззәтләнеп йәшәһә, уны гел яҡшы кешеләр урата, тормошондағы ваҡиғалар гел ҡыуаныслы ғына була, ғөмүмән, бәхетле йәшәй. Кире миҫал: меланхолик тибындағы ҡурҡып йәшәгән кешенең тормошонда эргәһендәгеләр гел негатив хәл-ваҡиға сығанағы булып тора, уларҙың һәр саҡ нимәһелер боҙола, эштә ҡыйырһыталар, ғөмүмән, улар өсөн тормош күңелһеҙ ваҡиғаларға бай.*** Асылда, был осраҡта кәйефте негативтан позитивҡа ғына әйләндерергә кәрәк - һәм барыһы ла үҙгәрәсәк.

Әйтелгәндәр - тәҡдир ҡануны. Ул кешенең тәбиғилектән дә бигерәк, энергетик йән булыуын раҫлай. Энергия тигәндә, беҙ кешенең эске донъяһын, характерын, зиһенен, күңелен күҙ уңында тотабыҙ. Физика фәнендә энергияның һаҡланыу Законы бар. Ул, энергия бер ҡайҙа ла юғалмай һәм юҡтан бар булмай, ул бер төрҙән икенсе төргә күсә генә ала, тип аңлата. Тимәк, иҫкә алынған эмоция бер ҡайҙа ла юҡ булмай, ә башҡа төр энергияға әйләнә һәм беҙҙе уратҡан мөхиттә тороп ҡала.

Шуға ла үҙен үҙгәрткән кеше уратып алған мөхитте лә үҙгәртә ала, ә эске торошо яҡшырған йәмғиәт барлыҡ донъяны үҙгәртергә һәләтле. Әгәр йәмғиәттә рәнйеү, асыу, ризаһыҙлыҡ, ҡомһоҙлоҡ, көнсөллөк тойғолары менән йәшәйҙәр икән, бындай ағыулы мөхиттә тик байыу, йәмғиәтте талау, булғанды емереү ынтылышы өҫкә сыға. Үҙебеҙҙе, ижтимағи кәйефте талап ителгәндең иң түбән миҡдарына - 30 процентҡа - үҙгәртә алһаҡ та, кешелек донъяһы матди һәм рухи үсештә шаҡтай алға китәсәк. Был - уйҙырма ла, утопия ла түгел, ә ысынбарлыҡ. Кешелек йәмғиәтенең бөгөнгө заман үсешендә ул бигерәк тә актуаль, һәм һәр кемебеҙгә йүнәлтелгән. Бәхет, сәләмәтлек, ҡыуаныслы мөнәсәбәттәр, уңыш һәм ҡаҙаныштарға өлгәшергә теләһәк, үҙебеҙ яҡшы яҡҡа үҙгәрәйек!

***Үҙеңде өйрәнеүҙең мәғәнәһе иһә тереклектең берҙән-бер ҡануниәтенә - мөхәббәт ҡануниәтенә - буйһоноу. Шуға ла рухиәтле кешене ике һүҙ менән генә кәүҙәләндереп була: ул - мөхәббәтле һәм аҡыллы. Мөхәббәт ҡанундарына буйһоноу, уратып алған донъяны хафаланмай һәм ҡәһәрләмәй, нисек бар, шулай ҡабул итергә кәрәк, тигәнде аңлата. Аҡыл иһә тормошта рухи белемде ҡуллана алыу маһирлығын күрһәтә.***

**Кеше донъяла яңғыҙ йәшәй алмай. Иң элек беҙ - ғаилә ағзалары. Нимә ул ғаилә һәм уның һәр кем, йәмғиәт өсөн әһәмиәте ниҙә?**

- Ғаилә - социаль ячейка. Уны айырым ойошма тип тә ҡарарға мөмкин. Һәр ғаилә ағзаһының айырым үҙ бурысы бар.

Дөйөм йәмғиәт ғаиләләрҙән тора. Бала тәрбиәне ғаиләлә ала. Ғаиләлә ниндәй мөнәсәбәт, ата-әсәһе араһында ниндәй мөнәсәбәт - быларҙы һеңдерә бара ул, асылда, йәшәү кодын аҫҡы аңына һала бара, өлкәндәрҙең фиғелен аңһыҙ рәүештә үҙенә күсерә. Бер ваҡытта ла атайым-әсәйем һымаҡ булмайым, тип уйлаһа ла, барыбер уларҙы теге йәки был миҡтарҙа ҡабатлай. Үҙ ғаиләһендә лә барыһы ла ҡабатлана. Төпкә төшөп ҡараһаң, шулай килеп сыға. ***Шуға иң элек атаәсә үҙҙәрен тәрбиәләргә тейеш, үҙ-ара мөнәсәбәттәрен, күңелдәрен. Ыңғай мөхиттә үҫкән бала бер ваҡытта ла боҙоҡ булмай.***

Кешенең эске торошо, күңеле абстракт төшөнсә түгел, ә уның энергетик асылы. Шул энергия тирбәлеү, вибрация рәүешендә барлыҡ ғаилә ағзаларына тарала, күсә. Әгәр ир менән ҡатын рухи йәһәттән үсешмәй икән, 20 - 30 йылдан мөнәсәбәттәрҙә ҡыйынлыҡтар, аңлашмаусанлыҡтар башлана. Шуға 50 - 60 йәшкә еткән кешеләр араһында айырылышыуҙар арта хәҙер. Был - аптырарлыҡ хәл. Шул уҡ ваҡытта уны аңлатыуы ла еңел - рух үсеше төрлө кимәлдә булған ир менән ҡатын бер-берееһен аңламай башлай. Әгәр кемеһелер рухи үсеш юлына сыҡһа, икенсеһе уға эйәрергә тейеш. Башҡаса сара юҡ. Был ҡапыл ғына килеп сыҡмай, әлбиттә. Айҙар, йылдар үтеүе ихтимал. Мин үҙгәрәм, ә һин нишләп эйәрмәйһең, тип ризаһыҙлыҡ белдереү дөрөҫ түгел. Быны үҙ миҫалымдан сығып әйтә алам. Ҡатыным минең артымдан ун йылдан һуң ғына үсеш юлына баҫты. Булған бөтөн китаптарҙы, методик әсбәптарҙы уҡып сыҡты, рухи практикаларҙы үтә башланы. Шуға күрә ни тиклем Аллаһ Тәғәлә, рух ҡанундарын тиҙерәк аңлай башлаһаҡ, шул тиклем беҙҙең ғаиләнең сифаты үҙгәрәсәк. Әйтәйек, мин егерме йәштә үҙгәрә башлаһам, ҡатыным да минең арттан тиҙерәк эйәрер, балалар баштан уҡ рухи камиллыҡ шарттарында тәрбиәләнер ине.

***Ауырыуҙар ҙа рухи дискомфорт арҡаһында барлыҡҡа килә. Аллаһ Тәғәлә: "Илле йыл йәшәнең, мал артынан ҡыуҙың, ә йәнде иҫеңә лә төшөрмәнеңме? Мә, улай булғас, баһаһын ал", - тип ауырыуҙар ебәрә. Кеше быны аңламай, үҙенең уңышһыҙлыҡтарында дәүләтте, йәмғиәтте, эргә-тирәләгеләрен ғәйепләй. Тәүҙә ғаиләбеҙҙә аңлашыуға өлгәшәйек.*** Күп осраҡта бит бер-береһен ятҡан ике йән дә бер һүҙгә килә, килешә алмай, ә беҙ иҫ киткес ҙур илдә, сүпер социаль системаны тиҙ генә бер яйға килтерергә ныҡышабыҙ. Йәмғиәтебеҙ ғаиләләрҙән тора, ә ғаиләләрҙең яртыһынан күбе бөгөн айырылыша. Ике кеше бер ҡыйыҡ аҫтында тыныс йәшәй алмағанда, ғәйәт ҙур илдә камил ҡоролош булдырыу - утопия. Шуға үҙебеҙҙән башлайыҡ: минән, һинән, унан... Һәр йәһәттән үҙгәрештәр башлаһаҡ - ғаиләлә, үҙебеҙҙең күңел донъяһында, профессиональ йәһәттән - йәмғиәтебеҙҙең кимәле күтәренке буласаҡ, дәүләт яғынан да үҙгәрештәр көтөргә ҡала.

**Донъя йөҙөндә илдәр бик күп. Үҫеш кимәленә, мәҙәниәтенә ҡарап, уларҙың төрлөлөгөн күрәбеҙ. Уларҙа, шартлы рәүештә әйткәндә, бәхет кимәле нисек һуң? Шундай анализ эшләгәнең юҡмы?**

- Ғөмүмән, ундай анализ эшләргә мөмкин, әлбиттә. Әйтәйек, планетар масштабта нимә ул Ер? Боронғо Вед тәғлимәттәрендә Ер карма ғәмәле майҙаны тип атала. Ғәмәл ҡануны ошо рәүешле яңғырай: ни сәсһәң, шуны урырһың. Планетала ике төрлө билдә бар - ыңғай (плюс) һәм кире (минус). Шундай ҡапма-ҡаршылыҡ булғанға ғына Ерҙә үсешкә урын бар. Кире билдә баҫымы һуғыштарға, ҡазаларға, енәйәттәргә алып килә. Тик ыңғай, тик барыһы ла уң ғына килеп торһа, үсешкә урын ҡалмаҫ ине. ***Психологтар билдәләүенсә, комфортлы мөхиттә кеше деградацияға дусар, аҫҡа тәгәрләй.***

***Ерҙә шулай уҡ Көнбайыш һәм Көнсығыш бүленеше бар. Ошо ике ҡитға уртаһында Рәсәй ята. Рәсәйҙә самалыҡ ҡануниәте (закон меры) хөкөм һөрә. Башҡортса ул: "Нәфсеңде тыя бел", - рәүешендә яңғырай.***

Көнбайышта матдилыҡ өҫтөнлөк итә, шул юл менән үсешәләр. Ул даими күҙәтелгән көрсөккә илтә. Гомосексуализм, хатта каннибализм юҡҡа ғына таралмай Европа илдәрендә. Асылда, уларҙа колониаль система йәшәп килә. Борон нисек булһа, бөгөн дә ул сәскә ата, уның сағылышы булып кредит-финанс системаһы тора. Америка, мәҫәлән, хаҡы бер ни менән дә баһаланмаған долларҙар баҫа, МВФ аша башҡа илдәргә кредит бирә һәм шуның иҫәбенә сәскә ата. Буш ҡағыҙҙарға донъя байлығы һатыла, һатып алына. Хәҙер нишләп тағы көрсөк, кризис, талаш-тартыш тыуып тора? ***Низағ һин алданыуыңды аңлай башлаған мәлдән башлана. "Туҡта, нишләп мине талайҙар?" - тигән ризаһыҙ һорау тыуһа, уға тәүге аҙым яһала. Ул ҙур һуғышҡа ла килтереүе ихтимал. Алданмаҫ өсөн белем кәрәк, иң элек - рухи белем.*** Был турала төпкә төшөп күп һөйләргә була. Ваҡыт етмәйәсәк. Баҫылған бик күп китаптар бар, шулар аша аңламаған һорауҙарыңа яуап табырға мөмкин.

Библияла: "Не ропщите на своего правителя, ибо каждый народ достоин своего правителя", - тип әйтелә. Ҡөрьәндә: "Кеше үҙе үҙгәрмәй тороп, Аллаһ уның хәлен үҙгәртмәй", - тиелә. Ғөмүмән, ниндәй нур сағылдырһаҡ, шундай уҡ яҡтылыҡ алабыҙ.

Тағы ла ғаилә мөхитенә әйләнеп ҡайтайыҡ.

***Ғаиләлә мөхәббәт булырға тейеш. Илерткес тойғо, сабырһыҙ бер-береңә тартылыу тураһында түгел һүҙем, ә илаһи мөхәббәт хаҡында. Ул кешене ҡалай бар, шулай ҡабул итеүҙе һәм яратыуҙы аңлата. Тәҡәтһеҙ енси тойғо ике-өс йылдан һүрәнләнә, нәҡ шул мәлдә ир менән ҡатын ихтирам аша мөхәбәттең юғарыраҡ үренә артылырға, артабан илаһилыҡҡа олғашырға тейеш.***

Ә ысын мөхәббәт кешенең үҙендә башлана. Йәғни һин үҙеңде нисек бар, шулай ҡабул итеүҙән. Ғәҙәттә, әҙәми зат үҙендә, үҙенең кисерештәрендә соҡонорға, етешһеҙлектәрен табырға ярата. Был комплекстарҙың барлыҡҡа килеүенә сәбәп бирә.

Үҙенә булған мөхәбәтте кеше әйләнә-тирәһенә тарата, үҙенсәлекле мөхит булдыра. Эшендә уға тик уңышлыҡтар ғына юлдаш. Иждиһат һалып башҡарған ғәмәл матур һөҙөмтәләр бирә, мөхәббәтле ҡулында сифатлы, зиннәтле әйберҙәр тыуа. Ҡулланыусы уға рәхмәттәр уҡый, ул оҫтаға кире әйләнеп ҡайта. Үҙеңде яратҡас, Йыһан да һине ярата булып сыға.

Японияны алайыҡ. Унда сәнәғәт ныҡ алға киткән, етештергән тауарҙары, сығарған техникалары юғары сифатлы. Япондар әйберҙе иждиһад менән эшләй һәм яуап итеп, донъяның барлыҡ тарафтарынан маҡтау ишетә, йәғни мөхәббәттәре уларға көсәйеп кире әйләнеп ҡайта. ***Беҙ иһә тормоштан гел ҡәнәғәт түгелбеҙ, үпкәбеҙ ҙур уға. Тимәк, беҙҙә мөхәббәт юҡ һәм, әлбиттә, тормош та шуның менән түләй. Аллаһ Тәғәләнең ҡанундарын боҙғас, мөхәббәт аша үҙгәрә алмағас, Карма буйынса - ауырлыҡтар һәм михнәттәр (насар - яҡшы - насар - яҡшы) аша үсешәбеҙ. Йәғни беҙгә мәжбүри юл менән мөхәббәт ҡанундары индерелә.***

**(Дауамы 10-сы биттә).**

✓ *Ауырыу балаларҙың донъяға йыш килеүе лә билдәле. Әгәр кеше баҡыйлыҡҡа үкенес менән китә икән, уның йәне, һынау аша юғарылыҡҡа өлгәшеү өсөн, кире ауырыу тәндә ҡайта.*

# КЕШЕНЕҢ ЭСКЕ ДОНЪЯҺЫ - ЙЫҺАНДЫҢ ҮҘЕ

(Башы 8-9-сы биттәрҙә).

**Мөхәббәт ҡанундарына ярашлы үҫеш этаптары: кеше үҙе үҙгәрә, ир менән ҡатын мөнәсәбәттәре ихтирам аша юғары кимәлгә күтәрелә, Аллаһ Тәғәләгә ылығыу, илаһилыҡ. Бөгөн никахтарҙың яртыһынан күберәге тарҡала икән, тимәк, беҙҙә мөхәббәт бөтөнләй юҡ, тигән һүҙ. Нишләп һуң элек айырылышыуҙар булманы?**

- Совет власы заманында ҡиммәттәр системаһы икенсе ине: ғаилә, эш, партия. Ул рәсми рәүештә ҡабул ителгән һәм дәүләт контроле ярҙамында тотолған. Күреүебеҙсә, ҡиммәттәр теҙмәһендә рухилыҡ юҡ. Йәғни совет власы осоронда рухи үҫешкә тыйыу булған. Белеүебеҙсә, мәсеттәр ябылған, рухиниҙар эҙәрлекләнгән. Һәр йәһәттән контроль көслө булған, дәүләт пропагандаһы киң йәйелдерелгән. Әйтәйек, айырылышыу оят һаналған, дәүләт һәм коммунистик йәмғиәт тарафынан ҡаты тәнҡитләнгән.

Совет власы ҡорған ҡиммәттәр системаһынан тайпылыу, аҫҡа тәгәрәү осраҡтары ла йыш булған. Алкоголизм, берәҙәклек, енәйәтселек һәм башҡа асоциаль күренештәр тураһына һүҙ был осраҡта. Юлдан яҙған кешеләрҙе лә власть ыҡҡа килтерергә, тәрбиәләргә тырышҡан. Шефлыҡҡа алыу, иптәштәр суды, махсус учреждениелар эшләгән.

Бөгөн тормошта дәүләт контроле лә, рухи үҫешкә лә тыйыу юҡ. Йәғни кеше үҙ ихтыярына ҡуйылған, уға киң юлдар асылған.

Хәҙер ни өсөн айырылышыуҙар күбәйҙе?

Әгәр беҙ рухи камиллыҡҡа ынтылмайбыҙ, үҫеш юҡ икән, ғаиләлә, эштә, башҡа мөнәсәбәттәрҙә һәр саҡ көсөргәнешлеккә, стресҡа урын бар. Стресҡа дусар кеше көсөргәнештән бушаныр өсөн йыш осраҡта эскегә бирелеүсән. Алкоголь ваҡытлыса ғына эффект бирә. Йыш ҡабатланған эскелек алкоголизмға алып килә. Был иһә - ғаиләнең емерелеүенә тура юл. Йәғни никахтарҙың тарҡалыуы иң өҫтә ятҡан рухиһыҙлыҡты күрһәткән бер күренеш кенә. Рухилыҡҡа өлгәшеү юлдары тураһында үрҙә әйтеп үттек инде. ***Әгәр һине проблемалар баҫа икән, йөрәгең аша һорарға тейешһең: "Нишләп нәҡ минең менән быңдай хәл килеп тыуҙы?" - тип. Был - рухилыҡҡа табан һин эшләгән тәүге аҙым. Китаптар яҙылған, лекциялар өҫтән төшөрөлгән - уҡы, эҙлән, һорауҙарыңа яуап тап!***

***Бөгөн үҫеш тағы туҡтаны. Ни өсөн шулай? Сөнки халыҡтың төп массаһы үҙгәрмәй, үҫеш юлына баҫмай, кеше битараф ҡала килә. 1,5 волтлы батарейка ҡуйып, 10 волтлыҡ яҡтылыҡ алырға теләйбеҙ, йәғни артыҡ көс һалмай яҡшы йәшәгебеҙ килә. Юҡ, тәүҙә эстән таҙарын: асыуыңдан, көнсөллөктән, ҡомһоҙлоҡтан, нигеҙһеҙ талаптарыңдан ҡотол.***

Әйткәндәй, нишләп СССР юҡҡа сыҡты һуң? Ресурс йәһәттән дәүләт тотороҡлого тигән төшөнсә бар. Тәбиғи байлыҡтар, фән, сәнәғәт үҫеше, мәғариф һәм мәҙәниәт кимәле - Советтар Союзында былар барыһы ла бар ине. Асылда, СССР-ҙы бер нисек тә емереп булмай ине. Илде өҫтән, идара итеүсе даирәләр емерҙе. Рухилыҡтан айырылыу, барыһын да емереп, яңы ҡоролошто өрәнынан башларға ынтылыу - деградацияға илткән юлдар. 90-сы йылдар ауырлыҡтары беҙгә төшөрөлгән һынау булды. Ыҙа аша үҫеш юлына сығарыр өсөн ебәрелде ул. Иктисади көрсөк, теракттар, Кавказ һуғышы - шулар аша үттек.

**Ғәҙәттә, беҙ тиҙ һөҙөмтәләр көтәбеҙ, ул юҡ икән һыуынабыҙ, ҡул һелтәйбеҙ. Ғөмүмән, белемдән башҡа ниндәйҙер эш, хәрәкәт, сабырлыҡ, инаныу кәрәктер бит…**

- Әлбиттә, кәрәк. Тик иң башта: "Ә-ә-ә, бына нимә арҡаһында тормошом уңмай икән", - тигән уй төшөргә тейеш башына. Шунан белемдә эшкә егергә кәрәк. Мәсьәләне сисер өсөн дә бит ҡабатлауҙар таблицаһын, формулаларҙы, закондарҙы белеү мотлаҡ. Ә белемгә ынтылыу үҙенә һорау биреүҙән ярала. Кеше, ғәҙәттә, үҙенә һорау биреү урынына сәбәптәрҙе ситтән эҙләүсән. Әгәр уҡыусы әҙер икән, уҡытыусы мотлаҡ киләсәк.

***Бөгөн үҫеш тағы туҡтаны. Ни өсөн шулай? Сөнки халыҡтың төп массаһы үҙгәрмәй, үҫеш юлына баҫмай, кеше битараф ҡала килә. 1,5 волтлы батарейка ҡуйып, 10 волтлыҡ яҡтылыҡ алырға теләйбеҙ, йәғни артыҡ көс һалмай яҡшы йәшәгебеҙ килә. Юҡ, тәүҙә эстән таҙарын: асыуыңдан, көнсөллөктән, ҡомһоҙлоҡтан, нигеҙһеҙ талаптарыңдан ҡотол.***

**Һәр кешенең үҙенә айырым характеры, ғәҙәттәре, яҡшы һәм яман үҙенсәлектәре бар. Әйтәйек, ул ялҡау булыуы ихтимал. Был бит киң таралған шәхсән сифат. Әгәр беҙҙең халыҡты алһаҡ, ул күп осраҡта ауылда йәшәй. Ауыл кешеһен иһә эш, донъя мәшәҡәттәре баҫҡан. Үҙенә ҡул һелтәгәндәр эскегә һалышҡан йә түбәгә төкөрөп тик ята. Уның башына: "Нишләп былайтып ятам әле?" - тигән һорау килерме икән ҡасандыр?**

- Әлбиттә, күптәргә был уйҙың килмәүе ихтимал. Әгәр кеше тормошо менән, уның ниндәй булыуына ҡарамай, үҙенсә ҡәнәғәт икән, ундай фекер башына нишләп төшһөн, төшмәй. Ул үҙенең хәлен Аллаһ Тәғәләнең тәҡдире тип аңлата.

Беҙҙең Ерҙәге был ғүмер бәрәү генә түгел. Изге китаптарҙа әҙәми заттың ергә ни өсөн килеүе, ул ҡайҙа олғашырға тейешлеге аңлатылған - кеше мөмкин тиклем Аллаһ Тәғәләгә яҡынлашырға тейеш. Аллаһ Тәғәлә - ул абсолют энергия. Шул юғары кимәлгә өлгәшә алмаған кешенең йәне, үлгәндән һуң, икенсе ҡиәфәттә ергә тағы ҡайта. Боронғо тәғлимәттәрҙә ул реинкарнация ҡануны булараҡ билдәләнгән. Яңынан тыуған һайын ул рухи йәһәттән үҫергә тейеш. Юғары кимәлгә етһә, башҡаса ергә ҡайтмай. Ҡөрьәндә лә үлеп терелеү тураһында әйтелә.

Белеүебеҙсә, балалар төрлө һәләт менән тыуа. Ауырыу балаларҙың донъяға йыш килеүе лә билдәле. Әгәр кеше баҡыйлыҡҡа үкенес менән китә икән, уның йәне, һынау аша юғарылыҡҡа өлгәшеү өсөн, кире ауырыу тәндә ҡайта. Иғтибар иткәнһегеҙҙер, тыумыштан ауырыу балалар сабыр, оло кешенекендәй аҡыллы тәрән ҡарашлы була.

**Кешегә ашап-эсергә - ризыҡ, инеп ятырға - өй, замансса йәшәргә бик күп әйбер, кәрәк-яраҡ, көнкүреш техникаһы, автотранспорт кәрәк. Көндәлек тормошта рухилыҡ менән матдилыҡты нисек бәйләргә? Эшҡыуар булараҡ был һорауға һин нисек яуап бирер инең.**

- Күптәр үҙ эшен асып, хәҙер кеҫәләремде аҡса менән тултырам, тип уйлай. Күп осраҡта ундай кеше ярыҡ ялғаш янында ҡала. Самалыҡ ҡануны, йәғни матди һәм рухи йәһәттән тигеҙ үҫештең булыуы мотлаҡ. Кире осраҡта уңышһыҙлыҡтар көт тә тор. Рәсәй самалыҡ ҡанундары энергияны хөкөмә аҫтында, тигәйнек инде. Үҙ эшенә тотоноррҙан алда рухи ҡанундарҙы өйрәнеү кәрәк, тип иҫәпләйем. Сөнки эшҡыуарҙарға, ғәҙәттә, ҡомһоҙлоҡ һәм көнсөллөк хас, улар матди донъяға нык бәйләнгән.

Хәйер, матди хәлебеҙ һәр кемебеҙҙең күңел торошона нык йоғонто яһай. Донъя малын күңелебеҙгә, йәнебеҙгә бәйләргә ынтылыу ярылып ята. Ә был, ғөмүмән, мөмкин түгел. Сөнки тормошобоҙҙоң матди яғы - ул инструмент ҡына. Кеше үлһә, йәне күккә олғаша, ә малы ерҙә ҡала, уны үҙең менән теге донъяға алып китеп булмай. Әгәр мөлкәтебеҙ өсөн үлеп торабыҙ икән, һәр саҡ ҡаза кисерәсәкбеҙ. Ошо ҡаза аша Аллаһ Тәғәлә беҙҙе кисәтә: донъяңа нык эсенмә, ана, машинаңды ҡыуып алып киттеләр, ә һин нисек йәшәнең, шулай көн итә бирәһең, күк уйылманы, ер емерелмәне, ти. Муллыҡ насип иткән икән - Аллаға шөкөр, юҡ икән - башым һау, ғаиләм имен булһын, мал табылыр, тиергә кәрәк. Ошоно аңлаһаҡ ҡына уңышлыҡтарға юл асыла. Хәҙер эшҡыуарҙар хәйриәлеккә иғтибар итә - күберәк биргән һайын, күберәк инә лә.

ШУЛАЙ ИТЕП…

**Кеше, Ер, Йыһан бер ҡанунға - камиллыҡ ҡанунына буйһонған, ти Айбулат Ураҙбахтин. Үҙең үҙгәрмәй, камиллыҡҡа ынтылмай тороп, тормошоң ыңғай яҡҡа көйләнмәҫ, яҡындарың менән мөнәсәбәт яҡшырмаҫ, йәмғиәтебеҙ ҙә кинәт ғәҙел булып китмәҫ. Ысынлап та, йәшәйешебеҙ ҡағиҙәләре иҫ киткес ҡатмарлы һымаҡ тойолһа ла, уның нигеҙендә ябай тәртип ята, тик беҙ уны күп осраҡта аңлап етмәйбеҙ.**

**Рәсүл БАЙГИЛДИН әңгәмә ҡорҙо.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# ХӘЙЛӘҺЕҘ ДОНЪЯ ФАЙҘАҺЫҘМЫ?



**Иҫегеҙҙәме, халҡыбыҙҙа бер ҡыҙыҡ әйтем бар: "Хәйләһеҙ донъя файҙаһыҙ". Ысынлап та, тормош юлын үткән саҡта, исмаһам, саҡ ҡына хәйләле була белеүең дә файҙа килтерә ул.**

Иҫемдә, партия ҡушыуы буйынса бер цехҡа ваҡытлыса эшкә урынлашырға тура килгәйне. Унда минең күптәнгә танышым эшләй ине, ни сәбәптәндер, ул минең турала төрлө уйҙырмалар һөйләп, цехтағыларҙы миңә ҡаршы ҡуйҙы. Шулай итеп, мин көн дә цехтың "экспериментттар" бүлегендә эшләүселәрҙең нәфрәтле ҡарашы менән осрашам. Әммә уларҙың мине яратмауын белгәнмәгә белдермәйем, бөтәһе менән дә ихлас йылмайып аралашам. Белдерһәм, мөнәсәбәттәр бөтөнләй түҙеп торғоһоҙ булып китәсәген аңлап торам. Ул саҡта мин, 30 йәшлек ҡатын, донъяның да, кешеләр араһындағы мөнәсәбәттәрҙең дә ҡатмарлы булыуын күптән аңлағайным инде. Ана шул башымды йүләрлеккә һалып, кешеләрҙең дошманлығын күрмәмешкә һалышып йөрөүем менән еңдем мин уларҙы: күпмеләр ваҡыттан күбеһе минең менән яҡшылап аралаша башланы...

Эйе, ҡайһы саҡта кемдәндер, бөтөнләй таныш булмаған кешенең дә, һинә нәфрәт менән ҡарағанын тойорға тура килә. Бына бер миҫал. Былтыр грипп менән бик ҡаты ауырып өҙләктем. Ҡолаҡтарым насар ишетә башланы. Талон алып, киттем лор табибына. Кабинетҡа һаулыҡ һорашып, йылмайып барып индем. Әммә минең үҙемде шулай тотоуым оло йәштәге табип ҡатынға оҡшаманы, ул миңә шундай уҫал итеп ҡараны. Ҡаушап, тотлоға-тотлоға зарымды һөйләнем. Ул "Бында ултырма, бында баҫ!" тип, миңә бер туҡтауһыҙ екерергә кереште. Шулай этеп-төртөп тикшерҙе лә, ҡулыма рецепт тотторҙо. "Нинә генә килдем икән?" тигән үкенес менән, кәйефем ҡырылып сығып киттем. Дарыу һатып алып, "Процедуралар" бүлмәһенә киттем. Сибәр генә шәфҡәт туташы йылмайып ҡаршы алды. Ауыртырмай ғына укол һалды. Күңелемә йылы йүгерҙе. Уколға икенсе көн ингәндә: "Бахилла алырға өлгөрмәнем бит әле", - тип ғәфү үтенгәйнем, ҡыҙыҡай миңә шкафтан ике пар бахилла сығарып бирҙе. Өсөнсө көнөнә уколға һуңлай яҙҙым. Ухылдап барып инеп: "Табибҡа сиратта тороп, уколға һуңланым инде, ҡабул итерһегеҙме?" - тинем. "Кабул итәм, әлбиттә, мин бит һеҙҙе яратам!" - булды яуап. Был шәфҡәт туташының ошо һүҙҙәре генә лә һауығып китерлек булды бит...

Күрәһең, берәү берәүгә тартыла, берәү берәүҙе этәрәләр, тигән уй килә башыма. Шуға ла дошманды бер нисек тә дуҫҡа әйләндереү мөмкин түгелдер ул. Был көндәлек тормоштағы күренештәрҙән тағы шундай һығымта ла яһарға мөмкиндер: илдә әпкәләйҙәр, илһөймәҫтәр ишәйһә, бөтөн көсөндә дуҫтар тәрбиәләргә йүнәлтергә кәрәктер. Ә ҡылыс болғап, яуға ташланыуҙан, мөнәсәбәттәр асыҡлауҙан файҙа юҡ. Дуҫтар күбәйһә, дошмандан ҡурҡмай йәшәләр.

**Айгөл АХУНОВА.**

***✓ Кендеге тыуған ерҙәренән айырылған кеше тулы бәхетле була алмайҙыр. Күптәре, мәлдәре еткәс, ауылға алып ҡайтып ҡуйыуҙарын үтенеп, васыят әйтә. Тере сағында үҙ аяҡтары менән ҡайтмағас, һуңынан ҡайта алыуҙары икеле...***



ХӘТИРӘЛӘР

**Уҡыусыларыбыҙ хәтерләйҙер, гәзитебеҙҙә "Ябай кешенең... ҡатмарлы фекерҙәре" тигән баш аҫтындағы үҙенсәлекле, ысынлап та, ҡатмарлы, фәлсәфәле, уйландыра ла, бәхәс тә тыуҙыра торған яҙмалары менән даими рәүештә сығыш яһай торғайны Урал МОСТАФИН. Һуңғы йылдарҙа ул һирәгерәк яҙыша, әммә беҙ уның яҙмаларын һәр саҡ көтөп алабыҙ. Ошо көндәрҙә Урал Сабирйән улына 75 йәш тулды. Ихлас ҡотлайбыҙ һәм уҡыусыларыбыҙға уның ошо хәтирә-яҙмаһын тәҡдим итәбеҙ.**

# СИХЫРЛАҒАН МИНЕ ТЫУҒАН ЕРЕМ...



Башҡортостандың Баймаҡ районы 2-се Этҡол ауылында 1951 йылдың 17 ғинуарында ябай крәҫтиән ғаиләһендә донъяға килгәнмен. Атайым Сабирйән (атаһы - Ғәлимйән, әсәһе - Йәнбикә) 1924 йылғы ине. Яуырынынан үксәһенә тиклем яралар алған һуғыш ветераны, колхозда төрлө эштәрҙә йөрөнө: бухгалтер, хисапсы, бригадир, балта оҫтаһы ла булды. Ауылда йәшәп, колхозда эшләгән һәр кеше кеүек, миҙгел эштәрендә һабансы, сәсеүсе, урыусы, урмансы, бесәнсе лә булып эшләне. Әсәйем Тайфа (атаһы - Фәруҡ, әсәһе - Хөмәйрә) - өй хужабикәһе. Атайыма кейәүгә сыҡҡанға тиклем, һуғыш осоронда ул да колхозда төрлө эштәрҙә йөрөгән.

Атайым менән әсәйем икеһе лә сығыштары менән Байым ауылынан, үҙ заманының мәғрифәтсеһе Байым ишан Динебәков (1733-1816) тоҡомонан. Байым ишан, Бохара мәҙрәсәһендә белем эстәп, Мәккә, Мәҙинәлә хажда йөрөп ҡайтҡас, Атъетәр (хәҙерге Байым) ауылында мәҙрәсә асып, балаларға дин тәғлимәттәрен өйрәтеү менән бер рәттән, математика, география, астрономия фәндәренән белем биргән. Ваҡыты менән мәҙрәсәһендә тирә-яҡтан 130-ға яҡын шәкерт белем алыуы билдәле.

Әсәйемдең атаһы Фәруҡ - Мөхәмәтйәнов Ғатаулла (1877-1929) менән Рәмиевтар тоҡомонан булған Фатиманың балаһы, Ҡолсора ауылында тыуып үҫә. Ауылдың указлы муллаһы бурыстарын фиҙаҡәр атҡарыуында ғәйепләнеп, 1929 йылда ҡулға алына һәм атып үлтерелә. Хөмәйрә өләсәйем береһенән береһе бәләкәй 6 балаһы менән бер нәмәһеҙ: өйһөҙ, малһыҙ, кейемһеҙ, кәрәк-ярәкһыҙ урамда тороп ҡала...

Бала сағымдан күрше ауылдарҙағы туғандарым менән аралашып, ер-һыуҙары менән танышып үҫтем. Бер йылы Тәкәһуҡҡан ауылындағы туғандарҙа (кем яғынан булғандарҙыр, иҫләмәйем) йәй үткәрҙем. Ул ауыл (хәҙер юҡ инде) урман араһында ултырыуы менән иҫтә ҡалған. Урам уртаһында ла, кәртә артында ла эре-эре ҡайындар, ҡарағайҙар - хистәрҙең иң сағыу сағы, торғаны менән әкиәт донъяһы инде...

Һүҙ ыңғайында йәнемде күптән борсоған һәм аңым ҡабул итергә теләмәгән бер күренеш тураһында әйтеп үтеүем урынлы булыр. Үткән быуаттың 60-сы йылдарында ғына беҙҙең яҡын-тирәләге мин белгән 8 ауыл юҡҡа сыҡты: Тәкәһуҡҡан, Һарыбейә, Мырҙый, Ҡортүлгән, Аҡтырнаҡ, Мәтем, Ҡуяндар, Күлйертау.

Юҡ, шөкөр, илгә бер ниндәй афәт тә башҡа бәлә-ҡаза ла килмәне, кешеләр үҙҙәре генә ғәйепле был хәлгә. Ғөмүмән, беҙҙең яҡтарҙа ғына түгел, ҡайҙа мәғдәнселек, урмансылыҡ менән булышалар, шунда был күренеш йыш күҙәтелә.

Бигерәк тә алтын йыуыусыларҙы ер ҡорттоҫтары тип әйтеп була. Ҡайҙа ғына эшләһәләр ҙә ерҙән үҙҙәренә кәрәген алып бөтһәләр, уларҙан һуң һәр ваҡыт аҫты өҫкә аҡтарылған тупраҡ, ҡотһоҙ соҡорҙар, ярҙары емерелеп, үҙәндәре йырғысланған йылғалар, ташландыҡ хәлдәге фәҡир ҡасабалар ҡала.

Тәбиғәтте һаҡлаусылар, тип уйлаһаҡ та, урмансыларҙың да эшмәкәрлеге маҡтанырлыҡ эҙҙәр ҡалдырмай. Үҙҙәренә кәрәк сифатлы ағастарҙы ҡырҡып, йығып бөтһәләр, уларҙан һуң деләнкәләрҙә бер кемгә лә кәрәкмәгән, штабель-штабель өйөлөп сереп ятҡан юғары сифатлы ағастар, йырғысланған урман юлдары, иҙгеләнгән ялан, болон, үҙәктәр, ташландыҡ ауылдар ҡала. Эш булмағанлыҡтан, тәүҙә ирҙәр ҡырға китә, ғаиләләрен күсерә башлаһалар, мәктәп, магазин ябыла, ҡарт-ҡороға ла ауылды ташлап китеүҙән башҡа сара ҡалмай.

1970 йылдарҙа Бөрйән, Ейәнсура, Йылайыр, Баймаҡ урмандары өҫтөнән "кукурузник"та (Ан-2 самолеты) осҡанда ул хәлдәрҙе мин күп күрҙем. Райкомда эшләгән осорҙа Өлкә комитет (КПСС) инспекторы менән бер ялыу тикшергәндә, деләнкәләрҙә йөрөп ҡайтҡас, илебеҙҙең киләсәктә яҡшы йәшәй башлауына ышаныслы бөттө, сөнки үҙ ерендең байлыҡтары менән ҡырағайҙарса хужалыҡ итеп, ил мөлкәтен талафлап, яҡшы тормош ҡороу мөмкин түгел икәненә тамам инандым...

Икенсе йәйҙе Ҡолсора ауылында әсәйемдең ағайы Әбдрәхим апаларҙа үткәрҙем. Һаҡмарҙа һыу төшөп йөрөгәндә, ҙур йылғаға йөҙөп өйрәнмәгәс, ағым ыңғайына, өйөрөлтмәккә төшөп киткәнмен. Сәбәләнеп, хәлһеҙләнеп бата башлағас, ҡысҡырғанмылдыр инде, Әхәт менән Самат ағайҙар һөйрәп сығарып, күтәреп алып ҡайтҡандар ҙа, инәйҙең әрләүенән ҡурҡыптыр, мине алаҫыҡҡа индереп һалғандар. Күпме иҫһеҙ ятҡанымды белмәйем. Эсемдә бер нәмә ҡалмағансы ҡоҫҡанымды иҫләйем. Йоҡонан уянып, иҫемә килгәндә ҡараңғы төшкән ине. Эргәмдә Бибинур инәйем һуҡранып йөрөй: "Кеше балаһы батып ҡуйһа..." Шуның тауышына уянғанмылдыр. Иртәгеһенә минә, минән бәләкәй Азат, Азамат, Ғөбәйт ҡустыларға йылға яғына барыу ҡәтғи тыйылды. Шунан бирле һыуҙан ҡурҡтым: яҡшы йөҙә белһәм дә, үҙем белмәгән ерҙә һыуҙан шикләнәм.

Байым ауылында йылдың бөтә миҙгелдәрендә лә булғаным бар. Унда атайым, әсәйем яғынан да туғандар күп булғас, үҙ ауылымда йөрөгән һымаҡ тойола ине. Йылғаһы - шул уҡ беҙҙең ауыл аша аҡҡан Таулы йылғаһы, Раһай (Урал тауының боронғо атамаһы "Рефей"ҙән микән әллә?) тауы беҙҙең Көрәй, Бешәтауға барып тоташа.

Атайым, әсәйемә ошо тормош дәрестәре өсөн рәхмәтлемен. Күрше ауылдарға йөрөтөп, туғандар менән, ят кешеләр менән дә аралаштырып, балаларын сит ерҙәрҙә таныш булмаған мөхиткә, унда йәшәгән кешеләргә тиҙ өйрәнеп, ят шарттарға ҡаушап ҡалмай яраҡлашып, сабырлы, үҙаллы булып үҫергә сынықтырғандар. Был тормош тәжрибәм киләсәктә күп тапҡырҙар йәшәйешемдә еңеләйтте. Бәләкәй саҡтан өйҙән, атай-әсәйҙән айырылып, кешеләр менән мөнәсәбәттәр ҡорорға өйрәнгәс, ҡайҙа йәшәһәм дә, кемдәр менән аралашһам да, ят шарттарға тиҙ күнектем, ят кешеләргә лә тиҙ ылыҡтым, шөкөр...

Бала саҡтан ватаным - тыуған ауылым икәнен йөрәгем, йәнем менән һиҙеп үҫтем. Күрше-тирәләге ауылдарға барғанда ла үҙ ауылымды һағынып илауым иҫтә. Шуға күрә, бөгөн дә Ватаным - ауылым, тыуған илем - Башҡортостан, ә Рәсәй минең өсөн - үҙ илендә йәшәгән төрлө халыҡтарҙы берләштергән дәүләт. Тыуған илем Башҡортостанда - кәрҙәштәрем, мөһабәт Уралым, киң Ағиҙелем, йәмле Ирәндегем, шифалы Талҡаҫым, талғын Һаҡмарым. Ватаным - тыуған ауылымда - туғандарым, ҡорҙаштарым, дуҫтарым бар. Таулы, Рәжәп, Саҡмағош йылғалары, Көрәй, Раһай, Олостүбә, Әсебейек тауҙары, Бөркөт, Сейүртәгән, Ҡоймауар, Билән, Мәтем яландары, Сарҙаҡ, Киндер күлдәрем бар. Йәнем ереккән, күңелемә ҡәҙерле, ғүмеремдә әһәмиәтле бөтә нәмәләр ошонда булғас, минең өсөн ауылымдан да, тыуған яғымдан да яҡынырак ниндәй ер булһын?..

...Бөтә әҙәм балаларының кеүек, минең күңелем дә һәр саҡ тыуған яҡтарыма тартылып тороуы һис ғәжәп түгелдер. Кеше үҙе иғтибар итмәһә лә, ҡайҙа ғына йөрөһә лә, ниндәй генә мөғжизәләр күрһә лә, һәр ваҡыт үҙенә таныш мөхит: күренеш, йөҙ, ризыҡ, көй, тауыш эҙләй. Кеше таныш мөхит табып, йәненә хәүефһеҙлек, тыныслыҡ, маҙа көҫәй. Әгәр ул мөхитте тапмаһа, ыҙалай, йонсой, хатта ауырыуға һабыша. Мәҫәлән, заводта эшләгән осорҙа миңә командировкаларға йөрөргә тура килде. Тыуған еремдән алыҫҡараҡ киткән һайын, тиҙерәк ҡайтырға ашҡындым. Самолет, поезға билет булмағанда, хатта, йәйәү ҡайтып китерлек хәлгә еткән саҡтарымды хәтерләйем.

Кендеге тыуған ерҙәренән айырылған кеше тулы бәхетле була алмайҙыр тип уйлайым. Сөнки, уҡыу йорттарын тамамлап, йүнәлтмәләр буйынса киң илебеҙҙең төрлө төбәктәренә таралып, эшкә урынлашып, ғаилә ҡороп йәшәгән ҡорҙаштарымдың олоғая килә тыуған яҡтарын һағыныуын беләм. Ҡайтырҙар ҙа ине, унда - балалары, ейәндәре. Күптәре, мәлдәре еткәс, ауылға алып ҡайтып ҡуйыуҙарын үтенеп, васыят әйтә. Тере сағында үҙ аяҡтары менән ҡайтмағас, һуңынан ҡайта алыуҙары икеле...

Ғүмеремдә кеше күп уҡый, күпте белә, күп кешеләр менән осраша, белем, ғилем эстәй, тәжрибә туплай. Ләкин оло тормош юлына сыҡҡас, һәр күргән, ишеткән, белгәндәрен бала саҡта күргән, ишеткән, белгәндәре менән сағыштырып үҙләштерә. Яңы мәғлүмәт, күренеш, тәжрибә бала саҡ тәьҫораттарына тап килһә йәки бала саҡта тәрбиәләнгән хис-тойғоларына хуш килһә, аңы ҡабул итә, ә килмәһә, кире ҡаға.

Әҙәм балаһы донъяны сағыштырып аңлай. Яҡшыны ҡәҙерләр өсөн - яманды белергә, татлыны баһалар өсөн әсенән ауыҙ итергә кәрәк, туңған ғына йылыға кинәнә, яңылышҡан ғына уңыштарына ихлас ҡыуана белә. Кеше барыһын да сағыштырып белә, сағыштырып йәшәргә өйрәнә.

Мәҫәлән, мин 33 йәшемдә етәксе булып Чехословакияға туристик сәйәхәткә бер төркөм яҡташтарымды алып барҙым. Баҡса кеүек биҙәлгән, төҙөк, етешле йәшәгән илдең ҡайһы төбәгендә, ниндәй мөғжизәләренә хайран ҡалһам да, бөтә күргәндәремде үҙ еремдәге күренештәргә сағыштырып йөрөгәнемде аңланым. Һәр яңы нәмәне үҙебеҙҙең яҡтағыға оҡшатып аңланым, һәр ерҙе үҙ ер, һыу, тау, яландарыма сағыштырып баһаланым, һәр ят күренешкә иҫем китмәй генә ҡараным.

1970 йылда студент отряды сафында Тольятти ҡалаһында "Жигули" автомобиль заводы төҙөлөшөндә эшләгәндә Жигули тауы битләүҙәрен күрҙем, Свердловск ҡалаһында Уктус тауы итәктәрендә йөрөнөм, Сочиҙа Мацеста буйҙарын гиҙҙем, Чехословакияла Татра тауҙарына мендем. Ләкин тыуған еремдәге Көрәй, Раһай, Бешәтау түбәләре, алыҫтан күгәреп ятҡан Ирәндек ҡаялары уларҙан бейек тә, бөйөк тә һымаҡ күренде. Ә мөһабәт Урал тауы тураһында әйтеп тораһы ла юҡ. Ниндәй генә матур парк, төҫлө баҡса күрһәм дә, ауылым эргәһендәге сауҡалыҡ иҫемә төштө. Ниндәй генә киң, тулы һыулы йылға ярында торһам да, ауылым аша аҡҡан Таулы, Рәжәп йылға ярҙары күҙ алдыма килде.

Мин бәхетле, сөнки үҙ еремдә йәшәйем! Тыуған еремдә мин бер нәмәнән дә шикләнмәйем: һыуҙары ла, тауҙары ла, юлдары ла, ғөмүмән, бар тирә-яҡ мөхит миңә таныш. Бер нәмәнән дә ҡурҡмайым, ғүмеремә янаған ят бер йән эйәһе лә юҡ: бөжәктәре, ҡош-ҡорттары, йәнлек, хайуан, хатта йыландары ла таныш. Үҙ еремдең туғай, тау, урмандарында мин, һаулығым өсөн хәүефләнмәй, теләгән емешеләкте өҙөп ҡабам, теләһә ниндәй ағас күләгәһендә тәгәрәп ятам, шишмәненән түшемә ятып һыу эсәм, бөжәк, себененән ерәнмәйем.

*Сихырлаған мине тыуған ерем,*
*Тыуған яғым мине арбаған.*
*Хистәренән аҙып үҙ еренә*
*Мин генәме йыйҙар арнаған...*

Бөтә кешеләрҙең дә, иләҫ-миләҫ булһа ла, иҫендәге, һәр кешегә үҙенән үҙе аңлашылған ябай ғына нәмәләр тураһында яҙам кеүек. Ләкин күп ваҡыт кеше шул ябай ғына нәмәләр тураһында уйланмай ҙа. Тыуған ере, изге төйәге булыуына шатлана, унда туғандары менән ҡатнашып йәшәүенә ҡыуана ла белмәй! Ошо үҙенән үҙе аңлашылған нәмәләр тураһында уйланһа, кешеләр туғандарын ҡәҙерләргә, тыуған төйәгенең тәбиғәтен һаҡларға өйрәнер, илен төҙөкләндерергә дәртләнер ине, былаһи...

**Урал МОСТАФИН.**

*✓ Үҙ ваҡытында бәйеттәрҙе мәҙрәсә шәкерттәре өйҙән-өйгә һөйләп йөрөгөндәр, тараттҡандар. Ә инде һуғыш ваҡытында һалдаттар һуғыш, әсирлек мәлдәрен тасуирлап, бәйет-хаттар яҙғандар.*



ИНТЕРНЕТТАН



# КИТАП ТОТҺА, баланың ҡулдары тиҙерәк үҫешәсәк

■ Бала ҡулдарының әүҙемлеге ни тиклем юғарыраҡ булған һайын уның фекерләү ҡеүәһе лә тиҙерәк үҫешә, бала яҡшыраҡ һөйләшә. Белгестәр шуға ла китапты баланың ҡулына иртәрәк тотторорға кәңәш итә. Ул уның биттәрен асырға маташҡанда ла, биттәрен һыйпап ҡарағанда ла ҡулдарға яҡшы массаж яһала. Шулай уҡ балалар китаптары тәҡдим итеүсе етештереүселәрҙең төрлө уйынсыҡ формаһында яһалған китаптарын да белгестәр юғары баһалай. Былар барыһы ла баланы киләсәктә китап уҡырға яратырға ла күнектерәсәк.

■ Томат һуты бик файҙалы икәнен беләһегеҙме? Бер стакан һутта каротиндың, С витаминының һәм организм өсөн башҡа кәрәкле матдәләрҙең тәүлек нормаһы бар. Тимерҙең һәм фолий кислотаһы гемоглобиндың кимәлен күтәрә. Томат һутын һығып алғас, уға ҡатыҡ, әнис, петрушка, шәкәр, тәменсә тоҙ өҫтәһәгеҙ, витаминлы эсемлек килеп сыға. Гипертонияны булдырмау өсөн көн һайын 1 ҡалаҡ бал өҫтәлгән томат һутын эсеү ҙә етә. Был эсемлек глаукоманан һаҡлай, ашҡаҙан һуты бүленеп сығыуға булышлыҡ итә, йөрәк мускулдарын ҡан менән тәьмин итеүҙе яҡшырта. Ябығырға теләүселәр өсөн белгестәрҙән махсус салат рецепты: томат, алма, һуған, ҡаймаҡ, лимон киҫәге, тоҙ ҡушып болғатырға, көн һайын ашарға.

■ Тикшереүсе ғалимдар мәғлүмәттәренә ярашлы, иртәнге күнегеүҙәр ябығыуҙың һөҙөмтәһен 20 процентҡа күтәрә. Тик күнегеүҙәр ас ҡарынға башҡарылырға тейеш. Тикшеренеүҙәрҙә 12 ир-егет ҡатнашҡан, уларҙың бер өлөшө спорт менән ас көйөнә, бер өлөшө иртәнге аштан һуң шөғөлләнгән. Һөҙөмтәләр күрһәтеүенсә, иртән спорт менән шөғөлләнеүселәрҙең көн дауамында калориялы ризыҡ ашарға теләге булмай, улар асығып та бармай. Ә бына ас көйөнсә спортзалға йүнәлеүселәр уларға ҡарағанда 20 процентҡа калорияларҙы күберәк яндыра.

■ Ғалимдар асыҡлауынса, телевизорҙан рекламаланған төрлө йогурттарҙың кеше организмы өсөн бөтөнләй файҙаһы юҡ икән. Белгестәр 500 етештереүсенең тауарын тикшергәндә һуң, уларҙың 70 процентының рекламала әйтелгән мәғлүмәткә тап килмәүен билдәләгән. Әммә был яңылыҡ йогурттарҙы бөтөнләй ҡулланырға ярамай, тигәнде аңлатмай. Бары уларҙан ниндәйҙер дауалау эффекты көтмәгеҙ. Ғалимдар фекеренсә, көн һайын һөт йәки һөт аҙыҡтары ашаусылар гипертония менән һирәгерәк ауырый. Тикшеренеүселәр әйтеүенсә, һөт аҙыҡтарында кальций һәм калий күп, улар артериаль баҫымды көйләү һәләтенә эйә.

■ Ас көйөнә мөһим ҡарар ҡабул итмәгеҙ, ти Макс Планка институты ғалимдары. Асығыу тойғоһо кешене уйланылмаған ҡабалан аҙымдарға этәреүе ихтимал. Баҡтиһәң, ашҡаҙан буш ваҡытта ҡарар ҡабул итеүгә баш мейеһенең бөтөнләй икенсе өлөшө яуап бирә икән. Ғалимдар емешеләк себенендә тәжрибә үткәреп ҡараған һәм унын ас ваҡытта хәүефкә барыу механизмы нисек эшләүен асыҡлаған. Ваҡ себендәр инстиктив рәүештә углекислы газдан ҡурҡа, әммә асыҡҡан мәлдәрендә улар газға ҡарамайынса аҙыҡҡа яҡынлаша. Ғалимдар фекеренсә, был нервы системаһының ике өлөшөнөң компромисы һөҙөмтәһе, бындай компромисҡа кешенең нервы системаһы ла һәләтле.

АҒИНӘЙ МӘКТӘБЕ

# БӘЙЕТТӘР ҘӘ ТАРИХ ҺӨЙЛӘЙ



**Ошо көндәрҙә Учалы районы Илсеғол ауылы ағинәйҙәре район ағинәйҙәрен "Бәйеттәрҙә - беҙҙең тарих" тип аталған сараға саҡырҙы.**

Сараны асып, Илсеғол ауылының төп ағинәйе Зөлфиә Әминева бәйет тураһында бик ентекле белешмә бирҙе: "Бәйет жанры башҡорттарҙа һуңғы 200 йыл элек самаһы ғына тарала башлаған һәм яҙып ижад ителгән. Бәйеттәрҙең авторы була, әммә отоп алынып, телдән-телгә, хаттан-хатҡа, ҡағыҙҙан-ҡағыҙға күсә торғас, авторы онотолоп, халыҡлашып китә. Бәйет йөкмәткеһе башлыса ниндәйҙер бәлә-ҡаза, фажиғәле хәл-ваҡиғаларҙы тасуирлай, уларҙа һуғыш темаһы ҙур урын алып тора. Үҙ ваҡытында бәйеттәрҙе мәҙрәсә шәкерттәре өйҙән-өйгә һөйләп йөрөгөндәр, тараттҡандар. Ә инде һуғыш ваҡытында һалдаттар һуғыш, әсирлек мәлдәрен тасуирлап, бәйет-хаттар яҙғандар.

Борон бәйеттәр яҙып ҡына түгел, импровизация юлы менән дә ижад ителгән һәм йыйындарҙа, һабантуйҙарында, мәжлестәрҙә әйтелгән. Мәҫәлән, Бөрйән районында Бәйет тауы, Ырымбур өлкәһендә Бәйет әйтешкән түш тип аталған урын бар. Бөгөн беҙ ҙә һеҙҙе бәйет әйтешеү ярышына саҡырҙыҡ",- тип тамамланы һүҙен Зөлфиә Әсҡәт ҡыҙы.

Сараның шарты буйынса, ҡатнашыусылар тормош-көнкүреше бәйете, һуғыш тураһында бәйет, үҙең ижад иткән бәйет әҙерләп килергә тейештәр ине. Тәүҙә тормош-көнкүреш темаһына арналған бәйет һөйләүселәргә һүҙ бирелде. Бындай темаға арналған бәйеттәр халыҡ күңелендә байтаҡ һаҡлана икән һәм уларҙың нигеҙендә теге йәки был ауылда булып үткән ҡыҙғаныс тарих ята. Рәйсә Баязитова әсәһенән отоп алып, бер нисә куплеты бөгөнгәсә хәтерендә һаҡланған "Һуҡыр әбей" йәки "Хөрмә әбей" бәйетен әйтте. Һуҡыр Хөрмә әбейҙең донъя йөҙөнән ике күҙенә дарыу таба алмау зары һүрәтләнгәйне унда.

Рәйсә Хәйбуллинаның "Илама һин, балам, илама" бәйетенең йөкмәткеһе лә фәһемле булды. Баҡыйлыҡҡа күскәс тә әсә кешенең балаһын ҡайғыртыуы, уны күктәрҙән ҡарап торасағы, унын фани донъяла саҡта дөрөҫ йәшәүенә, хәләл тормош алып барыуына, һау-сәләмәт йәшәүенә ҡыуанасағы тасуирлана унда.

Кәрим ауылынан 77 йәшлек Жәүиҙә Йәшелбаева үҙе ижад иткән бәйете менән сығыш яһаны. Ваҡытында һауынсы ла, һатыусы ла була ул. Әммә күңеле ижад ҡомары менән тулы икән. Ошо сараға элегерәк ауылдарында Ғәлимә исемле йәш ҡыҙ менән булып үткән фажиғәле хәл-ваҡиғаға бәйле бәйет ижад иткән. Етем ҡалғас, еңгәһенең ҡыйырһытыуына сабырлығы ҡалмаған йәш ҡыҙ Ғәлимә, йәшел ҡайынлыҡҡа барып, үҙ-үҙенә ҡул һала. Ат эҙләргә сыҡҡан үҙ ағаһы табып ала һеңлеһен. Үҙәк өҙгөс күңел кисереше ауыр ыңғырашыу булып ергә һеңә. Хоҙай Тәғәләнән туғанын кисереүен һорап ялбара ул.

Илсе ауылынан Илүзә Ильясова ауылдарында булып үткән хәл-ваҡиғаны тасуирлаған Саҙиҡа бәйетен әйтте. Саҙиҡа әбей үҙ аҡсаһына халыҡ өсөн ҡоҙоҡ ҡаҙҙырта. Ҡышҡы саҫҡауҙа 14 йәшлек Нәфисәнең бейәләйе сылбырға ҡуша туңып, ҡыҙ һыу төбөнә төшөп китә. Тауышты ишетеп килеп еткән комсомол Сөләймән ҡыҙҙы ҡотҡарырға һыуға ырғый. Нәфисәне сығарып өлгөрәләр, Сөләймәнде инде тартып алабыҙ тигәндә, сылбыр өҙөлөп китә. Яңы арҡан табып килтергәнсе комсомол Сөләймән туңып ҡуя, үле кәүҙәһен генә сығара алалар. Был фажиғәнән һуң Саҙиҡа әбей ҡоҙоҡто йоҙаҡлап ҡуя. Илүзә көйләгән икенсе бәйет - Сәғиҙә бәйете - ғибрәтле хәлде, үҙ риҙалығынан башҡа көсләп ҡарт мәзингә кейәүгә бирелгән ҡыҙ баланың енәйәткә барыуын, баструкка оҙатылыуын бәйән итә. Әбйәлил яҡтарында булған ваҡиға тасуирлана бәйет йөкмәткеһендә.

Тыуған ил һәм тыуған ергә арналған бәйеттәрҙә халыҡтың үҙ ерен һаҡлауға йәнен аямай көрәшеүе, еренән ҡыуылырға мәжбүр булғандарҙың һыҡтауы сағылыш алған. Илсеғол ағинәйҙәре шундай темаға арналған "32 ҡыҙ" бәйетен әйтеп ишеттерҙе. Ерҙәрен тартып алыусы урыҫ байҙарына ҡаршы көрәштә ирҙәрен, улдарын, яҡындарын юғалтҡан 32 ҡатын-ҡыҙ ҡулына ҡорал алып, йән аямай аяуһыҙ көрәшкә сыға.

Ағинәйҙәр ҡоронда ҡатнашыусы Сәлим Йәшелбаев "Ҡасҡынбайҙар" бәйетен оҫта итеп әйтте. Борон Мулдаҡайҙан 10 км алыҫлыҡта Ҡасҡынбай тигән башҡорт ауылы була. 18-се быуатта иң күп алтын шунда сығарыла ла. Ошо алтынға хужа булыу өсөн, ерҙе һатып алып, ҡасҡынбайҙарҙы ауылдан ҡыуалар. Ауылдан киткән саҡта халыҡ ҡыуыусыларға ҡарғышын да, тыуған еренән яҙыуын да ошо бәйеткә һалған. Сәрнәкәү тигән тауы, Ҡырмыҫҡа тигән һөлөклө күле, Айыу ҡоҙоғонон үҙәге, Ташҡойоһонон тамағы, Ямансура үҙәне - барыһы ҡалды ҡымырышып донъя көткән халыҡтан, тип әйтелә бәйеттә. Әлеге ваҡытта ул урында Силәбе өлкәһенә ҡараған Ленинский ауылы урынлашҡан.

Һалдат бәйеттәренән билдәле булған "Француз һуғышы", "Герман һуғышы", "13 партизан" бәйеттәре әйтелде. Һөйөндөк ауылынан Виләә Мырҙағолова, һуғышта ятып ҡалған ҡартатайына арнап, үҙе ижад иткән бәйет менән сығыш яһаны. Олатаһының яуҙа яраланып йығылыуы, Сабирйән исемле ауылдашының ярҙамға ынтылыуы, олатаһының ярҙамдан баш тартып, ауылдашына алға барырға ҡушыуы, иҫән-һау ҡайта алһа, ғаиләһенә ярҙамлашып тороуын үтенеүе, Сабирйәндең тыуған яғына имен әйләнеп ҡайтып, ошо ваҡиғаларҙы һөйләүе, өләсәһенең ирен һәр саҡ көтөүе - үҙе бер тарих.

Үҙ ижадтары менән килеүселәрҙең бәйете илдәге бөгөнгө ҡатмарлы хәлдәр, МХО-ла ил алдындағы бурысын үтәүселәр, әсәләрҙең ғәзиз улдарын көтөүҙәре тураһында ине. Зөлфиә Ғазалованың - "Замана батырҙары", Фәриҙә Маскованың "Һалдаттарға теләктәр" исемле бәйеттәрендә ир-егеттәребеҙҙең батырлығына дан йырлана, иҫән-һау ҡайтыуҙарын теләгән теләктәр әйтелә. Нәжибә Латипова апайҙың бәйете хәбәрһеҙ юғалған улына арналып, әсә күкрәгенән сыҡҡан иңрәү булып яңғыраны. Ватан саҡырғас, ейәнуландарҙың ҡулдарына ҡорал алып, ил һағына баҫыуын, кисә ҡартатай үткән юлдан бөгөн ейәне үтеүен Виләә Мырҙағолова ла оҫта итеп һалған бәйет юлдарына.

Ағинйәҙәр үҙҙәре ишетеп белгәнен дә, хәтерҙәрендә һаҡланғандарын да, үҙҙҙәре ижад иткәнен дә көйләп әйтеп ишеттерҙе. Ысынлап та, бәйеттәр йөкмәткеһендә тетрәндергес хәл-ваҡиғалар, халыҡ яҙмышы, тарих ята икәненә шаһит булдыҡ. Һәр сығыш яһаусы тыңлаусыны талғын ғына моңо менән арбаны ла ваҡиғалар төпкөлөнә алып инде, уйландырҙы, тетрәндерҙе.

Учалы районы башҡорттары ҡоролтайының әүҙем ағзаһы Марс Харис улы Камалов менән Илсеғол ауылы хакимиәте башлығы Зәлифә Азамат ҡыҙы, ошо сараға, район ағинәйҙәренең йыл буйына алып барған эштәренә юғары баһа биреп, оло рәхмәттәрен еткерҙе. "Шәжәрәләрҙе барлап", "Урал батыр" эпосы - боронғоларҙың аманаты", "Ир-егеттәр - ил һағында", " Бәйеттәрҙә - беҙҙең тарих" исемле күләмле сараларҙы ойоштороуҙа, үткәреүҙә әүҙемлек күрһәткән ағинәйҙәргә Марс Харис улы район башҡорттары ҡоролтайы исеменән Рәхмәт хаттары тапшырып ҡыуандырҙы.

**Мәрзиә СОЛТАНБАЕВА,**
**Учалы районы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе.**

✓ *Юнир Сәмиғулла улына мөһим хаттарҙы ебәрһәк, беҙҙең күңел тыныс була ине: был хат буйынса ул хәбәрсе тикшереүе ойошторop, ҡырҡ тапҡыр үлсәпһынағас ҡына "Хат юлға саҡыра" рубрикаһына мәҡәлә яҙып ебәрер булды.*



ҮҘЕБЕҘ ХАҠЫНДА ҮҘЕБЕҘ

**Бар ине замандар! "Совет Башҡортостаны", аҙаҡ "Башҡортостан" атамаһы менән сыға башлаған республика гәзите ул саҡтарҙа ( 1980 йылдар күҙҙә тотола) журналист булыу хыялы менән янған кеше өсөн буй етмәҫлек юғарылыҡ булып тойола ине. Һәм был, ысынлап та, шулай ине: тарих фәндәре кандидаты Абдулла Исмәғилев, унан һуң республикала күренекле сәйәсмән, философия фәндәре кандидаты, сәйәсәт фәндәре докторы, профессор Мансур Әйүпов, билдәле дәүләт эшмәкәре Тәлғәт Сәғитовтар баш мөхәррире булған һәм 100 меңләп тираж менән сыҡҡан был гәзит республика матбуғаты кимәлен билдәләүсе етди ҙә, уҡыусылары күңеленә яҡын да, темалар төрлөлөгө, тел-стиль йәһәтенән өлгөлө лә баҫма булараҡ ҙур ихтирам менән файҙаланды.**

# КЕШЕ КҮҢЕЛДӘРЕН ДАУАЛАУСЫ



80-се йылдар тиеүем шунан: мин дә, үҙ хәбәрсебеҙ Юнир Кинйәбаев та был гәзиткә 1981 йылда эшкә килдек. Редакцияның иллеләгән хеҙмәткәре араһында ул саҡ билдәле журналистар Рәүеф Насиров, Ризван Хажиев, Марсель Ҡотлоғәлләмов, Ғәтиәт Үзбәков, Гөлфиә Янбаева, Әниф Бикҡолов, Дәүләт Мәһәҙиев, Аҫылғужа Баһуманов, Сабир Шәрипов, Мәрйәм Бураҡаева, Самат Мөхәмәтйәнов, Гөлсирә Ғиззәтуллиналар менән бергә республика райондарында йәшәп эшләүсе бер төркөм үткер ҡәләмле үҙ хәбәрселәр төркөмө: Ильяс Иҫәнбаев, Фәтхулла Комиссаров, Фәтих Абдуллин, Сәлимйән Бәҙретдинов, Хәбирйән Таһиров, Миҙхәт Шәриповтар эшләне һәм шулар араһында бөгөн һүҙ барасаҡ хөрмәтле коллегабыҙ - Мәләүез, Көйөргәҙе, Ейәнсура, Күгәрсен, Федоровка райондары, Күмертау ҡалаһы буйынса 30 йылдан ашыу "йөҙөп" эшләгән үҙ хәбәрсебеҙ Юнир Кинйәбаев та бар ине.

Юнир Сәмиғулла улы әле һанап кителгән журналистар йондоҙлоғонда тәғәйен генә үҙ урыны, үҙ граждандыҡ позицияһы булған үткер, тура һүҙле хәбәрсе булараҡ айырым хәтерҙә ҡалған. Ауыл хужалығымы, етештереү сәнәғәте булһынмы, йәшәйеш проблемаларымы - сетерекле, ҡатмарлы темаларҙы ул үҙенә генә хас иплелек, әҙәп, шул уҡ ваҡытта объективлыҡ менән хәл итә белде. Беҙ, хаттар бүлеге хеҙмәткәрҙәре, үҙ хәбәрселәргә уларҙың үҙ зонаһындағы райондарҙан килгән проблемалы хаттарҙы, тикшереп, сара күреү, авторҙарыбыҙға ярҙам итеү маҡсаты менән ебәрә инек, сөнки ул йылдарҙа урындағы чиновниктарҙың битарафлығына йә булмаһа, ҡайһы бер бәхәсле хәлдәр хаҡындағы хаттар редакцияға күпләп килде. Ябай гәзит уҡыусы урындағы власть органдарына ҡарағанда, гәзит редакцияһына мөрәжәғәт итеүҙе өҫтөн күрҙе, гәзит һүҙенә нығыраҡ ышанды, журналистар йөҙөндә үҙенең яҡлаусыһын күрә ине. Һәм үҙ хәбәрселәребеҙ бындай ышанысты аҡлау өсөн тырышты, командировкаларҙан ҡайтып инмәне, кәрәк икән - район етәкселеген "быжғыртып" алыуҙан да тартынып торманы. Юнир Сәмиғулла улына ана шундай мөһим хаттарҙы ебәрһәк, беҙҙең күңел тыныс була ине: был хат буйынса ул хәбәрсе тикшереүе ойоштороп, хат авторҙары, урындағы власть вәкилдәре менән осрашып, мәсьәләнең төбөнә төшөп, кәрәк булһа, хатта йыйылыштар үткәреп, ҡырҡ тапҡыр үлсәпһынағас ҡына "Хат юлға саҡыра" рубрикаһына мәҡәлә яҙып ебәрер булды. Журналистың төпсөрлөгөн, мәсьәләне тура ярып әйтә белеүен күргән гәзит уҡыусылар йыш ҡына хатта уның үҙенә шәхсән адреслап та хаттар яҙып ебәрә ине. Юнир Кинйәбаев ҡултамғаһы менән баҫылып сыҡҡан мәҡәлә, очерк, репортаждар уҡымлығы, темалар төрлөлөгө менән айырылып торҙо. Шуға күрә лә "Башҡортостан" гәзитенең ошо райондар буйынса элек эшләгән үҙ хәбәрсеһе, билдәле журналист, Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан Фәтхулла Комиссаров исемендәге премия бер тауыштан Юнир Кинйәбаевҡа тапшырылды ла инде.

Әйткәндәй, күп йылдар Мәләүездең "Көнгәк" гәзите мөхәррире булып эшләгән һәм ошо гәзитте башлап ойоштороусы билдәле йәмәғәт эшмәкәре һәм журналист Сәйфулла Әмиров башҡорт телендәге район гәзитен сығарышыуҙа Юнир Сәмиғулла улының да ҙур ярҙам күрһәтеүе, даими рәүештә бай тәжрибәһе менән уртаҡлашыуы хаҡында һөйләй: "Көнгәк"тең тәүге һанын әҙерләгәндә Юнир Сәмиғулла улы беҙҙең янибыҙҙа булды һәм район журналистары менән бергә ҡатнашты. Әйткәндәй, "Көнгәк" ул тәҡдим иткән девиз менән сыға башланы. Шул уҡ ваҡытта тәжрибәле хәбәрсе кәңәштәре менән ярҙам итте, көнүҙәк, мөһим темаларға иғтибарыбыҙҙы йүнәлтә, редакцияның финанс-хужалыҡ эшмәкәрлеге буйынса ла эшлекле тәҡдимдәрен әйтә килде".

- Минең тормош юлымдың, ғүмеремдең ҙур өлөшө журналистикаға бағышланды. Утыҙ йылдан ашыу республиканың иң олпат, абруйлы матбуғат баҫмаһының үҙ хәбәрсеһе булып хеҙмәт иткәндә үҙемә беркетелгән биләмәләге райондарҙа бер нисә йөҙ мең саҡырым юлдар үтеп, йөҙәрләгән тапҡыр арҡырыбуйға йөрөп сыҡтым. Һәр сәфәрем ҡайнап торған тормоштоң уртаһына сумдырҙы. Донъяның бер генә мәле лә, хәле лә минең мөнәсәбәттән, иғтибарҙан, баһанан ситтә ҡалманы. Яҙмаларымдағы бер генә мәсьәләне, теманы уйлап сығарманым - улар минең күҙ алдымда, мөхиттә булды, - ти Юнир Сәмиғулла улы үҙе.

"Башҡортостан" гәзитендә оҙаҡ йылдар эшләп, республика матбуғатын үҫтереү буйынса күрһәткән фиҙаҡәр хеҙмәттәре өсөн Юнир Кинйәбаев "Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған матбуғат һәм киң мәғлүмәт хеҙмәткәре" тигән почетлы исемгә лайыҡ булды. Был исемде иң тәүгеләрҙән булып алыуы ла фекеребеҙҙең дөрөҫлөгөн дәлилләй: замандаштар уның гәзиттә донъя күргән мәҡәләләрен ратып, баҫылып уҡыны, дөрөҫлөккә йүнәлтелгән ҡыйыу сығыштарына һоҡланды. Ғәҙеллеге, хаҡлыҡ өсөн таш ярыуы, проблемаларҙың, мәсьәләләрҙең төбөнә төшөп өйрәнеүе менән хөрмәт яуланы ул халыҡ араһында.

Беләһегеҙ, халыҡ араһында, талантлы кеше бөтә яҡта ла, бөтә мөхиттә лә һәләтле, йәки талантлы тигән һүҙ йәшәй. Юнир Сәмиғулла улы, хаҡлы ялға сыҡҡас та, тағын иҫбатлап ҡуйҙы был хәҡиҡәтте. Ғүмере буйы шөғөлләнгән һөнәренә бер яғы менән дә оҡшамаған һөнәргә төплө өйрәнеп, бөтә нескәлектәрен барлап, һөлөк һалыусы оҫталығына ирешә. Һөлөк терапияһы ғалимдарының, көслө белгестәренең китаптары уның өҫтәленән төшмәй, ошо йүнәлештә эшләгән тибет, ҡытай, япон, Рәсәй ғалимдарының яҙмалары ҡат-ҡат уҡыла, һығымталар яһала. Ярҙам һорап юлланыусылар хәҙер меңдәргә етә, йөҙәрләгән ауырыу-сиргә кәртә ҡуйылған, әҙәм балаһы бәлә-ҡазанан ҡотҡарылып, ғүмерен һаҡлаған. Ул ғына түгел, медицина хеҙмәткәрҙәренең үҙҙәренең дауаланыуға йөрөүе үҙе ни тора!

Шулай итеп, Юнир Сәмиғулла улы тынғыһыҙ асылына тоғро булып, һаман да кешеләр араһында ҡайнай. Журналист хеҙмәте кеүек үк, халыҡ табиплығы ла кеше күңелен дауалау, йәне-тәнен таҙартыу һәм сәләмәт тормош рәүешенә йәлеп итеү бит ул. Ҡәләмдәшебеҙҙең бөгөнгө эшмәкәрлеге лә уның ярҙамсыллығын, ихласлығын, тормошобоҙҙо яҡты һәм сәләмәт итеп күрергә ынтылышын сағылдырып тора. Юнир Кинйәбаев "Киске Өфө" гәзитен алдырып уҡыусылар өсөн һөлөк тураһында бик фәһемле, ҡыҙыҡлы әңгәмә лә вәғәҙә итте. Ул яҙмалар киләһе һандарҙа донъя күрер тип ышанабыҙ.

Әйткәндәй, 1 февралдә Юнир Сәмиғулла улына 75 йәш тула. Ошо уңай менән хөрмәтле ҡәләмдәшебеҙҙе ихлас ҡотлайбыҙ! Намыҫлы, изгелекле, тоғро йәшәүең һәм эшләүең юҡҡа булмаһын, яҙмыш һинең үҙеңде сәләмәтлек, оҙайлы ғүмер менән ҡыуандырһын.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

## Ҡара ҡарға

**(Грач)**



Ҡап-ҡара төҫтә: суҡышы ала ҡарғаныҡына ҡарағанда нескәрәк, тура. Боттарында ҡаурыйҙары "ыштан" формаһында оҙон, соңҡаһында ла ҡаурыйҙар еңелсә генә оҙонораҡ булып күренеп тора. Тауышы - ҡарлыҡҡан "ҡраа".

Март башында осоп ҡайта, колониялар менән йәшәй, йә урманлы-далалы ерҙәрҙәге ағастар башына ояҡоралар, шулай уҡ ауылдар, зыяраттар, баҫыу, юл буйлап сәсеп үҫтерелгән ағас һыҙаттарында йәшәйҙәр. Хатта ҡара ҡарға кешегә яҡыныраҡ булырға тырыша тип әйтһәк тә була. Мәҫәлән, Өфө тирәһендә лә ҡара ҡарға оялары йә бензин ҡойоу станцияларында, йә туҡталыштарҙа, анығыраҡ әйткәндә, "Ял" кафеһы" туҡталышында, аэропортта бар. Күп йылдар буйына тотонолған оялар ҙурлығы менән дә аптырата, шулай уҡ иҫке ояға яңыһын "төкәтеп" тә яһап алалар. Ҙур булмаған колониялар электр бағаналарына ла оя ҡора. Беҙгә бындай ҡарға оялары Архимандрит күле тирәһендә, "Йәшел сауҡалыҡ" санаторийына ингән ерҙә осраған булды.

Ояны икәүләп ҡоралар, ботаҡтарҙан яһайҙар ҙа, төбөнә кипкән үлән, йөн түшәйҙәр. Инә ҡош 4-5 йомортҡа һала, уларҙы үҙе 16-18 көн буйына баҫа. Ата ҡош инә ҡошты ризыҡ ташып ашата. Бәпкәләр ай тирәһе ояла ултыра.

Ҡара ҡарға яңы һөрөлгән баҫыуҙарҙан ямғыр селәүсендәрен, башҡа бөжәктәрҙе, уларҙың йомортҡаларын сүпләп ашай, хатта һабан артынан эйәреп йөрөй. Шулай уҡ сысҡан кеүек кимереүселәр менән туҡлана. Ҡойолоп ҡалған иген менән дә һыйлана. Йәй баҫыуҙа яңы сығып килгән иген культураларын, уларҙың орлоғон да ашай. Ҡала янында йәшәүсе ҡара ҡарғалар сүплектәрҙә соҡона.

Ҡар яуғас йылы яҡҡа юллана. Ҙур булмаған өлөшө беҙҙә ҡышлай, сүплектәрҙә туҡлана. 20 йылға яҡын йәшәй.

## Сәүкә

**(Галка)**



Күгәрсен ҙурлығында. Ҡара төҫтә, муйыны һәм башы көл төҫөндә. Ҡарғаларға ҡарағанда суҡышы көсһөҙөрәк, ҡанаттары ҡыҫҡағыраҡ, ҡойроғо тарыраҡ. Тауышы - "ҡау" йәки "ҡъя".

Ҡаланың бейек йорттарында, урмандар һәм парктарҙа ағас ҡыуышлыҡтарында, ҡаяларҙағы соҡорҙарҙа ояҡора. Мәҫәлән, Асылыкүлдә, Ағиҙелдең бөтөн ерендә лә ошондай ояларҙы күрергә була.

Бер һайлаған парына тоғро. Инә ҡош 4-6 йомортҡа һала, 17-20 көн баҫа. 35-37 көнлөк бәпкәләр оса башлай.

Туҡланыуы төрлөсә, бөжәктәрҙе лә, кимереүселәрҙе лә, кеҫәрткеләрҙе лә, бәпкәләрҙе лә, емеш-еләк, игенде лә ашай. Ҡалаларҙа ҡышын сүплектәрҙә соҡона.

Кеше йәшәгән ерҙә ҡышлай. 14 йәш йәшәй.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов, "Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан. (Дауамы бар).**



### 2 ФЕВРАЛЯ
### ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.10 "Модный приговор". [0+]
10.00 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.25, 1.05, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
12.00 "Горячий лед". Фигурное катание. Чемпионат России по прыжкам 2026. [0+]
13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.45 "Время покажет". [16+]
15.00 "Давай поженимся!" [16+]
15.50 "Мужское / Женское". [16+]
18.45 "Большая игра". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Капкан на судью". [16+]
0.00 "Время героев". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башкортостан!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.10, 3.30 Т/с "Райский". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Омут". [16+]
23.40 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.29 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Непридуманная жизнь". [16+]**
**11.00 Новости недели (на рус.яз).**
**11.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Специальный репортаж. [12+]**
**12.15 Сәләм представляет... [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 Асыш. [6+]**
**16.00 Башкорттар. [6+]**
**16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**16.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**17.00 Д/ф "Любимое кино". [16+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**18.00 Защитники Отечества. [12+]**
**18.45 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Нефтехимик" (Нижнекамск). КХЛ.**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Генералы Башкортостана. [12+]**
**23.45 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**0.15 М/ф "Отель "Онегин". [12+]**
**1.45 Спектакль "Кахым туря". [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**

### 3 ФЕВРАЛЯ
### ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25, 13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.45 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.40, 18.45 "Большая игра". [16+]
15.00 "Давай поженимся!" [16+]
15.50 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Капкан на судью". [16+]
0.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башкортостан!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.10, 3.30 Т/с "Райский". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Омут". [16+]
23.40 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.29 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Непридуманная жизнь". [16+]**
**11.00 "Дорога к храму". [6+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 17.45, 20.15 Интервью. [12+]**
**12.00 Тайм-аут. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**16.00 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**16.45 Республика LIVE. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**18.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**19.00 Телецентр.**
**20.00 Сәнгелдәк. [6+]**
**20.30 Д/ф "О чем говорят Памятники". [12+]**
**21.00 Специальный репортаж. [16+]**
**22.00 Подкаст. Интонации. [12+]**
**23.00 Подтекст: инструкции к себе. [12+]**
**23.45 Х/ф "Кто вызвал аниматора?" [16+]**
**1.15 Спектакль "Башмачки". [12+]**
**3.30 Защитники Отечества. [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**

### 4 ФЕВРАЛЯ
### СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25, 13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.45 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.40, 18.45 "Большая игра". [16+]
15.00 "Давай поженимся!" [16+]
15.50 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Капкан на судью". [16+]
0.00 Премьера. "Шоу Вована и Лексуса". [16+]
1.05, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башкортостан!" [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.10, 3.30 Т/с "Райский". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Омут". [16+]
23.40 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.29 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Непридуманная жизнь". [16+]**
**11.00 Специальный репортаж. [16+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 17.45, 20.15 Интервью. [12+]**
**12.00 Сәләм представляет... [12+]**
**12.15 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 "Экологично". [6+]**
**16.00 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**16.45 Дознание. [16+]**
**17.00 Креативный код. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**18.00 Дустар. [16+]**
**19.00 Телецентр.**
**20.00 Сәнгелдәк. [6+]**
**20.30 Защитники Отечества. [12+]**
**21.00 Монолог. [12+]**
**22.00 История одного села. [12+]**
**23.00 "Байык" представляет... [12+]**
**0.00 Х/ф "Зоськина заправка". [16+]**
**1.45 Спектакль "Таганок". [12+]**
**3.30 Д/ф "О чем говорят Памятники". [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**

### 5 ФЕВРАЛЯ
### ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25, 13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.45 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.40, 18.45 "Большая игра". [16+]
15.00 "Давай поженимся!" [16+]
15.50 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Капкан на судью". [16+]
0.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башкортостан!" [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.10, 3.30 Т/с "Райский". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Омут". [16+]
23.40 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.29 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Х/ф "Три дня на любовь". [12+]**
**11.00, 21.00 Креативный код. [12+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 17.45, 20.15 Интервью. [12+]**
**12.00, 17.30 Новости СВО (на рус. яз). [12+]**
**12.15 Дознание. [16+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 Сулпылар. [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Автограф. [12+]**
**16.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**17.00 Д/ф "Любимое кино". [16+]**
**18.00 "Йома". [6+]**
**19.00 Телецентр.**
**20.00 Сәнгелдәк. [6+]**
**20.30 "Первая городская на башкирском". Газете "Ашкадар" - 35 лет. [12+]**
**22.00, 3.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Дополнительный урок". [16+]**
**1.45 Спектакль "Ыныйыкай и Юлдыкай". [12+]**
**3.15 Письма солдатам. [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

### 6 ФЕВРАЛЯ
### ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25, 17.00 "Большая игра". [16+]
11.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
13.15, 14.15 "Время покажет". [16+]
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.05 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 "Голос". Новый сезон. [12+]
23.30 Д/ф "Жаркие. Зимние. Твои". [12+]
0.25 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башкортостан!" [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30 Т/с "Райский". [16+]
17.00 Прямой эфир. [16+]
21.30 "Дуэты". [12+]
0.40 "Истории Большой Страны". [12+]
1.40 Х/ф "Противостояние". [12+]
4.56 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Х/ф "Три дня на любовь". [12+]**
**11.00 "Йома". [6+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 17.45, 20.15 Интервью. [12+]**
**12.00, 17.30 Новости СВО (на баш. яз). [12+]**
**12.15 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 Тирмәкәй. [6+]**
**16.00 Хазина. [12+]**
**16.45 Специальный репортаж. [12+]**
**17.00 Республика LIVE. [12+]**
**18.00 Башкорттар. [6+]**
**19.00 Честно говоря. [12+]**
**19.45 "Мама". [12+]**
**20.00 Сәнгелдәк. [6+]**
**20.30 "Башкорт йыры представляет". [12+]**
**21.15 Бизнес-обзор. [12+]**
**22.00 СВОих не бросаем. [12+]**
**22.15 Письма солдатам. [12+]**
**23.00 Дустар. [16+]**
**23.30 "Курай-шоу". [12+]**
**0.00 Х/ф "Архипелаг". [16+]**
**1.45 Спектакль "Алима или свадьба Мырдаша". [12+]**
**3.15 Колесо времени. [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

### 7 ФЕВРАЛЯ
### СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 "Умницы и умники". [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Д/ф "Дом любви и солнца". К 90-летию со дня рождения Анны Герман". [12+]
11.10 "Вспомнить всё". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Поехали! [12+]
13.10 Т/с "Я не могу без тебя". [16+]
17.00 "Кто хочет стать миллионером?" [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 Премьера. "Ледниковый период". [12+]
21.00 "Время".
21.35 "Сегодня вечером". [16+]
0.10 Д/ф "Меня зовут Альфред Хичкок". [18+]
2.15 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 "Формула еды". [12+]
9.25 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Наши. Военкоры". [12+]
12.00 Д/ф "Последний подвиг русских линкоров". [16+]
13.00 Большие перемены.
14.30, 20.50 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.50 "Юмор! Юмор! Юмор!!!" [16+]
17.50 "Привет, Андрей!" [12+]
21.00 Х/ф "День рождения". [16+]
0.40 Х/ф "По велению сердца". [12+]
4.08 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**7.45 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**8.45 Хазина. [12+]**
**9.15 Сәләм представляет... [12+]**
**9.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**9.45 СВОих не бросаем. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Книга сказок. [6+]**
**10.45 Әкиәтсе. [6+]**
**11.00 Гора новостей.**
**11.15 "Курсак". [6+]**
**11.30 Зерно. [6+]**
**12.00 Преград. Net. [6+]**
**12.30 Ете егет. [12+]**
**13.30 Башкорттар. [6+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Т/с "Зоя". [16+]**
**18.30 Новости (на баш. яз).**
**19.00 Специальный репортаж. [12+]**
**19.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**20.00 Сәнгелдәк. [6+]**
**20.15 "Курай даны". [12+]**
**20.30 "Байык" представляет... [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00, 5.45 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.45 Новости недели (на баш. яз).**
**23.30 "Башкорт йыры представляет". [12+]**
**0.15 Караоке по-башкирски. [12+]**
**0.45 Х/ф "Потерянный остров". [16+]**
**2.15 Спектакль "Два берега бытия". [12+]**
**4.30 Башкорттар. [12+]**
**5.00 Новости недели (на баш. яз). [12+]**

### 8 ФЕВРАЛЯ
### ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10 Играй, гармонь любимая! [12+]
6.55 "Часовой". [12+]
7.25 "Здоровье". [16+]
8.30 "Золотая коллекция Союзмультфильма". [0+]
9.10 "Непутевые заметки" с Дм. Крыловым. [12+]
9.30 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
10.15 "Жизнь других". [12+]
11.10 "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Будем жить!" [16+]
13.10 "Видели видео?" [0+]
14.00 Д/ф "Империя: Петр I". [12+]
18.00 Вечерние новости.
19.00 "Три аккорда". [16+]
21.00 "Время".
23.00 "Большая игра". [16+]
0.10 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.30, 2.30 Х/ф "Любовь не по правилам". [12+]
7.20 "В кругу друзей".
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00 Вести.
11.30 "Наши. Военкоры". [12+]
12.00 "Доктор Мясников". [12+]
13.00 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
14.30 Местное время. Вести-Башкортостан.
15.00 "Парад юмора". [16+]
17.50 "Песни от всей души". [12+]
20.00 Вести недели.
22.30 Москва. Кремль. Путин.
23.00 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.35 Д/ф "Последний подвиг русских линкоров". [16+]
4.11 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**7.45 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**8.30, 20.15 "Курай даны". [12+]**
**8.45 Күстәнәс. [12+]**
**9.15 "Мама". [12+]**
**9.30 Новости (на рус. яз).**
**9.45, 21.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Тирмәкәй. [6+]**
**10.45 "Городок АЮЯ". [6+]**
**11.00 Гора новостей.**
**11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**11.30 Сулпылар. [6+]**
**12.00 "Асыш". [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз).**
**13.15, 2.30 Подтекст: инструкции к себе. [12+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**15.00 Дорога к храму. [6+]**
**15.30 Честно говоря. [12+]**
**16.15 Преображение. [12+]**
**17.00 Республика LIVE. [12+]**
**17.45, 23.00 Х/ф "В небо за мечтой". [6+]**
**19.30, 3.45 Әлләсе. [12+]**
**20.30 Автограф. [12+]**
**21.00 Дознание. [12+]**
**21.30 Новости недели (на рус.яз.).**
**22.15 Ап-асык. [12+]**
**0.30 Спектакль "Старый дом". [12+]**
**3.15 Генералы Башкортостана. [12+]**
**4.30 Колесо времени. [12+]**
**5.30 Дустар. [16+]**
**6.00 Новости недели (на рус.яз.). [12+]**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1447 һижри йыл.*

| Февраль (Шәғбан) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ахшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 2 (13) дүшәмбе | 7:13 | 9:05 | 13:30 | 16:03 | 17:54 | 19:38 |
| 3 (14) шишәмбе | 7:12 | 9:03 | 13:30 | 16:05 | 17:56 | 19:40 |
| 4 (15) шаршамбы | 7:10 | 9:01 | 13:30 | 16:07 | 17:58 | 19:42 |
| 5 (16) кесе йома | 7:09 | 8:59 | 13:30 | 16:08 | 18:00 | 19:43 |
| 6 (17) йома | 7:07 | 8:57 | 13:30 | 16:10 | 18:02 | 19:45 |
| 7 (18) шәмбе | 7:05 | 8:55 | 13:30 | 16:12 | 18:04 | 19:47 |
| 8 (19) йәкшәмбе | 7:04 | 8:53 | 13:30 | 16:14 | 18:06 | 19:49 |

*БР Мосолмандары диниә назараты сайтынан алынды.*

***✓ Башҡортостандың Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитеты, ут ғәҙәттән тыш ваҡиғаларға алып килмәһен өсөн, һаҡ булырға саҡыра. Электр приборҙарының төҙөклөгөн даими тикшереп тороғоҙ.***



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ҠУРАЙЫ ЮҠТЫҢ ӨНӨ ЮҠ, ӨНӨ ЮҠТЫҢ КӨНӨ ЮҠ




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**1-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Байыш. Ултырыш. Абаға. Саҡма. Һалам. Ҡандала. Ҡатыҡ. Нәҫел. Уралым. Арҡар. Али. Тәгәс. Нәби. Киви. Рәсәй. Влади. Әсә. Тәбиғәт. Сәхәр. Бамбук. Йыртҡыс.

**Вертикаль буйынса:** Ҡыуатова. Ситдиҡова. Ҡыяр. Кит. Уйым. Әлибай. Аҡбур. Бутҡа. Алиби. Ғәйбәт. Абдуллина. Әтлек. Шашка. Эс. Һан. Тирәс. Әлкә. Енгә. Мал. Сайыр.

ҺАҠ БУЛЫҒЫҘ!



# АХ, БЫЛ ЯНҒЫНДАР!

**Башҡортостанда йыл башынан 230-ҙан ашыу янғын сыҡҡан, утта 11 кеше һәләк булған.**

26 ғинуарҙа Өфөнөң Орджоникидзе районындағы 3-сө Коллектив баҡсала ике ҡатлы кирбес йортта янғын сыға. Утты һүндергән сакта 85 йәшлек ҡатындың мәйете табыла. Тәфтишселәр янғын сәбәптәрен асыҡлай. Ошо ғәҙәттән тыш фажиғәле ваҡиға айҡанлы Рәсәй Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы көнкүрештә янғын хәүефһеҙлеге ҡағиҙәләрен ҡәтғи үтәү кәрәклеген иҫкә төшөрә.

Шаран районының Салмалы ауылындағы бер ҡатлы кирбес йорт янып китә. Янғын һүндереүселәр килгәнгә тиклем өйҙән өс өлкән кеше һәм бала үҙаллы сыға. 53 йәшлек ир тәтөнгә ағыулана һәм ауыр хәлдә дауаханаға оҙатыла.

Иглин ауылының Есенин урамында сыҡҡан янғында бер кем дә зыян күрмәй. Бер ҡатлы ағас йортта йәшәгән күп балалы ғаиләне ваҡытлыса күршеләре һыйындырған.

**Башҡортостандың Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитеты, ут ғәҙәттән тыш ваҡиғаларға алып килмәһен өсөн, һаҡ булырға саҡыра.**

- Электр приборҙарының төҙөклөгөн даими тикшереп тороғоҙ.
- Мейестә янған утты, шәмдәрҙе ҡарауһыҙ ҡалдырмағыҙ.
- Шырпыны һәм ут тоҡандырғыстарҙы балаларҙан һаҡлағыҙ.
- Төтөн датчиктарын ҡуйығыҙ һәм уларҙың батареяларын даими алмаштырырға онотмағыҙ.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**30 ғинуар "Ай тотолған төндә"** (М.Кәрим, А.Абушахманов), драма. 12+
**31 ғинуар "Яратам, тип әйтеп өлгөрмәнем"** (Г. Ғиззәтуллина, А.Абушахманов), кинодрама. 12+
**1 февраль "Фарман ханым"** (С. Әхмәт, У. Ҡарыпбаев), музыкаль комедия. 12+
**3 февраль "Урал батыр"** (А. Борисов), башҡорт халыҡ эпосы буйынса тамаша. 12+

## М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**30 ғинуар "Пеппи длинныйчулок"** (А. Линдгрен, О. Пронин). 11:00. 0+
**30 ғинуар "Униженные"** (З. Биишева, М. Күлбаев), драма. 19:00. 12+
**31 ғинуар "Чиполлино"** (Д. Родари, Р. Хәкимов), мажаралар. 12:00. 6+
**31 ғинуар "Йәшәгән, ти..."** (М. Ладо, Р. Хакимов), драмеди. 18:00. 16+
**1 февраль "Дингеҙ ярын инләй ала эт"** (С.Айтматов, М. Күлбаев), притча. 12+
**3 февраль "Удивительное путешествие кролика Эдварда"** (К. ДиКамилло, А. Абушахманов), мөхәббәт тураһында әкиәт. 11:00. 6+
**4 февраль "Аладдин"** (И. Казакова, Р. Хәкимов), мажаралы ваҡиға. 11:00. 6+
**4 февраль "Спасите Леньку!"** (М. Икрамова, М. Күлбаев), драма. 14:00 һәм 19:00. 12+
**5 февраль "Всё могло бы быть иначе..."** (И. Губач, М.Күлбаев), лирик комедия. 19:00. 16+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**31 ғинуар "Снежная королева"** (Г.Андерсен). 12:00 һәм 15:00. 0+
**1 февраль "Винни-Пух"** ( А.Мили). 12:00 һәм 15:00. 6+
**1 февраль "Снеговик и Солнышко"** (А.Малахов). 13:00. 0+
**5 февраль "Тысяча и одна ночь"** (П. Васильев). 19:00. 16+

## Х.Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**30 ғинуар "Органный калейдоскоп"** Марина Вяйзяның орган концерты (Санкт-Петербург). 12+
**4 февраль** З. Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институтының вокал сәнғәте кафедраһы педагогтары концерты. 12+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**30 ғинуар Искәндәр Ғәзизовтың** концерты. 6+
**31 ғинуар "Бишкә тиклем һанайым"** (М. Бартенев), әкиәт. 0+
**5 февраль "Хазина"** (С. Әбүзәр), комедия. 12+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**30 ғинуар "Рядовойҙар"** (А. Дударев), драма. 12+
**31 ғинуар "Нисек кейәүгә сығырға?!."** (Н.Ғәитбаев), комедия. 12+
**1 февраль "Мөхәббәт һәм күгәрсендәр"** (В.Гуркин, М. Күлбаев), комедия. 16:00. 12+

## Сибай концерт-театр берекмәһе

**30 ғинуар "Тарпан"** этно-фолк төркөмө концерты. 6+
**1 февраль "Лебединое озеро"** (П.Чайковский), балет. 6+
**5 февраль Элвин Грейҙың** концерты. 18+

ЙОЛАЛАРЫБЫҘ

# ҠУРМАС БАЙРАМЫ...

## тағы бер ризыҡҡа ҡыҙыҡһыныу уятты



**Ошо көндәрҙә Архангел ауылы ағинәйҙәре халҡыбыҙҙың онотола барған тағы бер йолаһына яңы һулыш өрҙө - Ҡурмас байрамы үткәрҙе. Уларҙы районның башҡа ауылдарынан йыйылған ағинәйҙәр, Өфөнән килгән ҡунаҡтар тамаша ҡылды.**

Мәҙәниәт йорто тупһаһынан уҡ күңелле таҡмаҡтар, дәртле бейеү менән ҡаршы алды, шунда уҡ түңәрәк эсенә өйрөлтөп алып төшөп тә китте ҡунаҡтарҙы ағинәйҙәр. Кергәндә үк сорнап алған йылы мөнәсәбәт, күтәренке кәйеф сара аҙағынаса һәм унан һуң да күңелдәрҙә оҙаҡ һаҡланды әле.

Башҡорттарҙың ғына түгел, ҡаҙаҡ, бүрәт һ.б. күп төрлө халыҡтарҙың милли ризығы - ҡурмасты бойҙайҙан ғына түгел, ә арпанан, арыштан, хатта борсаҡтан да ҡурғандарын беләһе инегеҙме? Ә Ҡурмас байрамына килгән тамашасылар был тәмлекәсте нимәнән генә түгел, ә нисек эшләгәндәрен дә белеп, ауыҙ итеп ҡайтыу форсатына ла эйә булды. Ағинәйҙәрҙең Архангел ауылындағы "Хазина" һәм "Ихлас" фольклор төркөмдәре башҡарған "Ҡапма-ҡаршы" кеүек дәртле халыҡ йыр-бейеүҙәре, үҙ эсенә ата-бабаларыбыҙҙың бар аҡылын туплаған йор мәҡәл-әйтемдәре бер кемде лә битараф ҡалдырмағандыр.

Халҡыбыҙ электән яратып ашаған был аҙыҡ үтә ауыр йылдарҙа күптәрҙе аслыҡтан да һаҡлап ҡалған. Көҙҙәрен башаҡ урған ваҡытта уңыштың иң тос игенен айырып, башаҡтағы иң яҡшы бойҙайҙы ғына ҡурмас өсөн ҡулланғандар элгәре. Бойҙайҙы тәүҙә елгәреп, таҙартып, матурлап йыуғас, табала йә ҡаҙанда ҡурғандар. Ә әҙерләгән бар өйгә таралған хуш еҫенән йә ашап ҡарап белгәндәр. Әҙер ҡурмасты ҡул тирмәнендә тарттырып, ононан талҡан, бутҡа, өйрә кеүек ашамлыҡтар әҙерләгәндәр. Бөгөнгө көндә дөрөҫ туҡланыу өсөн бик тә кәрәк ашамлыҡ булараҡ популярлаша ул. Ураҙа кеүек динебеҙ ҡушҡан фарыз ғәмәлде үтәгәндә лә ашҡаҙан сәләмәтлеген һаҡларға ярҙам итеүсе ризыҡ булараҡ билдәле.

"Ҡурмас ҡыҙҙырыу тураһында беҙ электән белеп үҫтек. Ниндәй файҙалы милли ризыҡтарыбыҙ, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, онотолоп бара. Ә тап ошо тамашала бала саҡ иҫкә төштө, хатта ауыҙҙа тәмен дә тойғандай булында. Был саранан һуң ҡурмас, талҡан кеүек ашамлыҡтарыбыҙға балаларҙа ла, өлкәндәрҙә лә йәнә ҡыҙыҡһыныу уяныр, улар яңынан тормошобоҙға әйләнеп ҡайтыр, тигән өмөт тә тоҡана яҙып ҡуйҙы хатта.

"Беҙҙең халҡыбыҙҙың ниндәй генә ризығын алма, ул ата-бабаларыбыҙҙың туҡланыу йәһәтенән шул тиклем белемле булыуын күрһәтә. Цивилизация заманында йәшәйбеҙ, күп нимәләр уйлап сығарыла, әммә барыбер халыҡтың алтын аҡылынан бөйөк булып булмай. Быуаттар буйына һыналған ризыҡ, йолалар, ғәҙәттәр һәр береһе шул тиклем урынлы, ҡәҙерле. Беҙ шуны онотмаһаҡ ине", - тип сығыш яһаны сараны тамаша ҡылыусы филология фәндәре докторы, фольклор белгесе Гөлнур Рауил ҡыҙы Хөсәйенова.

Ҡурмас байрамындағы аҡ яулыҡлы ағинәйҙәр ҡулындағы сағыу баластарҙағы биҙәктәр кеүек бит халҡыбыҙ йолалары. Уларҙың һәр береһе үҙенсәлекле, донъяла берәү генә. Тап ошондай саралар киләсәк быуынды милли ризыҡ, шөғөлдәр менән ҡыҙыҡһындырыр, уларҙы өйрәнеүгә этәрер, белеү теләге уятыр. Алдағы көндәрҙә бындай байрамдар киң билдәләлек алыр, зал тулып ололар ғына түгел, ә йәш быуын вәкилдәре лә ултырыр, тип ышанабыҙ.

**Айһылыу ДАУЫТОВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# КӨСЛӘП ТАҒЫЛҒАН ИЗГЕЛЕКТЕҢ...

## көсләү булыуы ла бар

Яман юлдаш яуға ҡалдырыр, яман бей дауға ҡалдырыр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер илгә бай төбәктә йәшәгән ситтәр килеп, бындағы көнитмештең һәм халыҡтың ярлылығын күргәндәр һәм уларға ярҙам итергә булғандар. Улар был илдәге бар булғанды емереп, үҙҙәренсә төҙөй, үҙгәртә, ерҙә сәскәләр һәм емеш ағастары үҫтерә башлаған. Ләкин был илдең аҫабалары бындай матурлыҡтан, төҙөклөктән ҡасып, тауҙарға күсенеп киткән. Ситтәр уларҙың был ҡылығын иҫәрлеккә һанап, аптыраған, ләкин уларҙы үҙ иркенә ҡуйып, ҡаланы артабан төҙөкләндереүҙе дауам иткән. Әммә бәхет оҙаҡҡа бармаған: ҡапыл ғына йылғаларҙа һыу юҡҡа сыҡҡан, тупраҡ ярыла, тау түбәләре ишелә башлаған. Ярлы булһа ла, үҙенсә йәшәп ятҡан төбәктә үле бушлыҡ, емереклек барлыҡҡа килгән. Бындай бәхетһеҙлеккә төрлөсә ҡаршы торорға маташҡан ситтәр, тамам аптырап, тауҙарға юл тотҡан һәм унда аҡһаҡалды эҙләп тапҡан. "Әйт әле, аҡһаҡал, ни өсөн беҙҙең изге ниәттәребеҙ был ергә зарар килтерҙе? - тигән ситтәр аҡһаҡалға. - Беҙ бит үҙ илебеҙҙә бай һәм етеш йәшәйбеҙ, һеҙҙә лә шундай тормош урынлаштырмаҡсы булғайныҡ, ләкин беҙҙең изгелек яуызлыҡҡа әйләнде түгелме?"**

**Аҡһаҡал шулай тип яуаплаған: "Үҙең белмәгәнде үҙгәртергә тырышырға ярамай. Беҙ был ерҙең һыуға бай булмағанын белә инек, шуға ла һыуҙы күҙ ҡараһындай һаҡланыҡ; тау түбәләренең ишелергә торғанын да белдек, шуға ла үҙебеҙҙең тыныс ҡына, артыҡ тауышланмай йәшәүебеҙ менән уның ныҡлығын тәьмин иттек; ошо тауҙарҙың ерҙе ҡоролоҡҡа килтереүсе елдәргә ҡалҡан булып тороуын да белә инек, шуға ла тәбиғәттең һәр үҙгәрешенә һиҙгер булып, үҙебеҙҙең йәшәү рәүешебеҙҙе уға яраҡлаштырырға тырыштыҡ. Беҙ был ерҙе меңәр йылдар буйы шулай һаҡлап килдек, уны бала кеүек ҡәҙерләп кенә бер быуындан икенсеһенә тапшырҙыҡ. Уның серҙәре лә бер быуындан икенсеһенә телдән телгә күсте. Беҙ был ҡырыҫ ерҙә үҙебеҙҙең бәхет һәм байлыҡ өсөн түгел, ә уны ҡотҡарыу, һаҡлау өсөн йәшәнек. Байлыҡ көсәгән, башҡаларҙың мәнфәғәтенә һуҡыр, һаңғырау, аяуһыҙ булған ситтәр генә яулап алынғандың серен дә, ҡәҙерен дә белмәй. Үҙеңдеке булмаған ерҙәрҙе баҫып алыу, хатта изге ниәттән булғанда ла, баҫып алыусының үҙенә лә изгелек килтермәҫ, ул ерҙәге быға тиклемге тормошто ла бөлдөрөр. Бына һеҙҙең изге ниәттәрегеҙ ҙә беҙҙең өсөн яуызлыҡҡа әйләнде. Тимәк, һәр изге ниәт тә изгелек түгел..."**

**...Эйе, ҡылынған изгелек берәү өсөн - изге, икенсе өсөн яуызлыҡ булыуы ла бар. Шуға ла кемгәлер изгелек эшләр алдынан ул кешенең һинең изгелегеңә мохтажмы, түгелме икәнен белеш. Көсләп тағылған изгелектең көсләү булыуы ла бар..."**

ИҪКӘРТӘБЕҘ!

# УНДАЙ ОРЛОҠ ЮҠ



**2025 йылдың 11 айында Россельхознадзорҙың Башҡортостан буйынса идаралығы хеҙмәткәрҙәре мониторинг ярҙамында маркетплейстарҙа дәүләт реестрына индерелмәгән йәшелсә культураларының орлоғон һатыу факттарын асыҡланы.**

Барлығы 1079 төр ялған йәшелсә орлоғо билдәләнгән, шул иҫәптән ҡатмарлы исемдәр менән. Улар араһында "Терраса", "Засолиха", "Брат с севера", "Теща золотая" исемле кәбеҫтә, "Дон Кихот", "Рыжая невеста", "Токусима", "Зайка моя" кеүек кишер орлоҡтары һәм башҡалар бар. Хәүефһеҙлек мониторингы йомғаҡтары буйынса ҡағиҙә боҙоусыларға 12 иҫкәртеү бирелгән. Бынан алда "Японский трюфель", "Курочка-несушка", "Засолочная гирлянда", "Сахарное мясо", "Быстрел-скороспел", "Бурлык", "Голубая ель", "Гусиное яйцо", "Оранжевый раша", "Кулак Поддубного" кеүек борос, ҡыяр орлоҡтары табылғайны, тип хәбәр итте "Башинформ".

ТЕЛҺӨЙӘР

# ШИҺАҠАЛА ЮЛ ЙӨРӨМӘ

**Сит телдәр өйрәнеү ҙә, туған телдәге һүҙ байлығын үҙләштереү ҙә хәтерҙе шөйлә яҡшырта, телмәрҙе шымарта. Аҡыл-зиһенгә лә шойҡан яһамай ҡалмай.**

**Шойҡан. 1.** Мәғәнәһе "Йоғонто, шауҡым, тәьҫир" тигәнгә тура килә. *Уйлап башҡарған эштең шойҡаны ла уңышлы.* **2.** "Шойҡан" ниндәйҙер йоғонтонан килгән зыянды ла белдерә ала. *Дауыл урап үткәс, ағастарҙы һындырыу, кәртәләрҙе ауҙарыу кеүек шойҡаны ла юҡ.*

**Шиһаҡа.** Ҡайһы бер урында "шиһаҡа" тип аҡман-тоҡманды атайҙар. *Шиһаҡа мәле. Шиһаҡа бураны шөйлә тиҙ туҡтаны.*

**Шөҙөр.** Шөҙөр - һыу өҫтөн шаҙралаған ваҡ тулҡын. *Күл шөҙөрөндә ҡояш нурҙары уйнай. Шөҙөр өҫтөндә аҡсарлаҡтар ҙа оса.*

**Шөйлә.** "Шөйлә" - "Арыу ғына, апаруҡ, ярайһы" тигән һүҙҙәргә иш. *Оҙайлы ямғырҙан һуң көн шөйлә сыуаҡланды. Кәйефтәр ҙә шөйлә күтәрелеп китте.*

**Шоҡом.** Кешенең хәйләкәр, мут булыу сифатын асыҡлаған һүҙ. *Шоҡом холоҡ. Алдаҡсы, шоҡом әҙәмдәрҙе өнәмәйҙәр.*

**Шулай итеп, яҡшы хәлдәрҙең генә шойҡанын тойоп йәшәргә яҙһын.**

**НУРБИКӘ әҙерләне.**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ02-01885, 30 июль 2025 йыл.

1 582218 911006 26004

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Рәсүл БАЙГИЛДИН, Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

**"Башҡортостан Республикаһы" Нәшриәт йорто" акционерҙар йәмғиәте типографияһында баҫылды.**
**Тел.: 8 (347) 226-99-48.**
ИНН 027806697, КПП 027801001
(450079, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |
| **Матбуғат таратыу** | **252-39-99** |

**График буйынса ҡул ҡуйыу ваҡыты -** 29.01.2026 й. 17 сәғәт 00 мин.
**Ҡул ҡуйылды -** 29.01.2026 й. 14 сәғәт 30 мин.
**Баҫылып сыҡты -** 30.01.2026 й.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 2677
Заказ - 175